ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

13-19 декабрь (аҡъюлай) 2024

№49 (1142)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡ -** һынауҙарҙы шулай ғына еңәсәкбеҙ



4-5

**Берҙәмлек тойғоһо уянһын!**



6

**Үҙ асылынан айырылмау -** заман шауҡымдарын еңер әмәл ул



8-9

**Башҡорт бал ҡорто...** яҡлауға мохтаж



12-13

***"Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, бөтә донъя башҡорттары!" тип сәләмләйбеҙ 12-13 декабрҙә баш ҡалабыҙға оло ҡорға йыйылған милләттәштәребеҙҙе. Кәңәштәрегеҙ берекһен, фекерҙәр уртаҡ булһын, илһөйәрлек, телһөйәрлек нығынһын, рух осҡоно, сәм ҡунһын йөрәктәргә, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр аҡылы өҫкә сыҡһын, тип теләйбеҙ. Хәйерле сәғәттә!***

## ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ




### Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

Ил тупланды бөгөн оло Ҡоролтайға,
Был байрамда бер туғандай гөрләшәйек.
Байраҡ булып ҡалҡһын оло маҡсатыбыҙ,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшәйек!

Байрам тыныр, тик тынмаһын уртаҡ уйҙар,
Әйҙәп торһон алға хәләл көрәшебеҙ,
Ситкә ташлап ваҡсыллыҡты, көнсөллөктө,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

Кәрәк түгел милләтем тип тамаҡ ярыу,
Кәрәк бары милләт өсөн юлдар ярыу,
Кәрәк бары көн-төн тимәй алға барыу,
Берләшегеҙ, бөтә донъя башҡорттары!

Еребеҙ тип беҙ янмаһаҡ, кем һуң яныр,
Бәләләрҙән беҙ ҡотҡармай, кем ҡотҡарыр?
Көс-ҡеүәтте беҙ тапмаһаҡ, кем һуң табыр?
Берләшәйек, бөтә донъя башҡорттары!

Беҙгә бер кем ситтән килеп ярҙам ҡылмаҫ,
Үҙебеҙҙең иңебеҙҙә бар эшебеҙ,
Еңелмәйек ялҡаулыҡтан, тарҡаулыҡтан,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

Илгә, йортҡа ҡот-бәрәкәт килһен тиһәк,
Китһен хәсрәт, кипһен тиһәк күҙ йәшебеҙ,
Таяныстың иң ныҡлыһы - тоғролоҡта,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

### Тантанаһы - туған телендә

Бөгөнгөһө көндә иң ҙур шатлыҡ,
Иң ҙур байрам башҡорт илендә.
Йыйындары - мәңге үҙ еренлә,
Тантанаһы - туған телендә.

Әгәр быны ҡанбабалар күрһә -
Түбәләре күккә тейерлек.
Улар ерҙе ҡурсалаған өсөн
Улар өсөн баштар эйерлек.

Халыҡ көсө ерен һис бирмәҫлек,
Йыр-моңона донъя һоҡланыр.
Күпме хазинаһы - ер аҫтында,
Үҙ ризығы - үҙе туҡланыр.

Барыһынан алда булғанда ла,
Китмәҫкә һис артыҡ маһайып.
Беҙҙә бөтә милләт татыу йәшәп,
Донъяға бер өлгө яһайыҡ.

Ерҙә беҙҙең ҡаҡшамаҫлыҡ дуҫлыҡ -
Башҡорт күңеленең киңлеге.
Кәрәк саҡта ҡылған батырлығы -
Була легендаға тиңлеге.

Ҡай ваҡытта шомландырып ҡуйһа,
Ысынында булған һаныбыҙ.
Әллә кемдән көтмә, сәбәп ҡыл һин,
Ҡайнап тора әле ҡаныбыҙ.

Беҙҙең ҙур дуҫлыҡҡа иҫе китеп
Ил-ҡитғалар беҙгә баҡҡандар.
Йөрәктәргә күпме ҡан һауҙыра
Күпме илдә ҡандар аҡҡанда.

Оло хыял тотҡан оло халҡым
Оло юлдан бара, киң юлдан.
Мең мәртәбә артыр, халҡым йәшәр,
Ҡоролтайҙар булыр мең йылдан.

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**
**2002.**

## УЙЛЫҒА - УЙ

# ТАМЫРҘАРЫБЫҘ - УРАЛДА!



***Беҙ, башҡорттар, был ергә ҡайҙандыр ситтән килмәнек. Тамырыбыҙ - ошонда.*** Йәнебеҙ, "Урал батыр" эпосында бәйән ителгәнсә, кешелек барлыҡҡа килгән мәлдә үк ошо ерҙә яралған. Ошо ерҙән моң, тел, һут, ҡот, бәрәкәт, ырыҫ алғанбыҙ. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙе "ситтән килтерергә", ошо ерҙең килмешәге итеп күрергә теләй. Әйтергә кәрәк, был фараз еребеҙгә, йәнебеҙгә, тарихыбыҙға дәғүә итеүселәрҙең уйҙырмаһы, ҡотҡоһо, аҫтыртын уй-ниәте. Был, үҙенә күрә, һыбайлы һәм йәйәүле мөнәсәбәте сағылышы. Тарихы шулайыраҡ: бер мәл һыбайлы үҙ юлында йәйәүлене осратҡан, ти. Арыған һәм талсыҡҡан йәйәүле һыбайлынан үҙен атҡа меңгәштереп алыуын үтенгән. Һыбайлы уны йәлләгән һәм эйәренән урын биргән, үҙенә ризыҡ биреп әүҡәтләндергән. Улар бергилке барғас, эйәрҙә ирекҡән элекке йәйәүле ат хужаһына: "Һин эйәрҙән төшөп, артабан йәйәү атла ла ҡуй, артабан мин бер үҙем барайым",- тигән белдереү яһаған. Кеше күңелле һыбайлы атынан төшөп, йәйәү атлаған һәм йәйәүлегә әүерелгән. Беҙҙе "ситтән килгән" тип иҫбатларға тырышыусы ла шул уҡ йәйәүле бит...

***Беҙ, башҡорттар, башҡа дәүләттәр һәм милләттәр менән һәр саҡ килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорҙоҡ, Рус дәүләте менән төҙөгән килешеүгә һәр саҡ тоғро ҡалдыҡ.*** Улай ғына ла түгел, Рәсәй именлегенә ситтәр ҡурҡыныс менән янағанда һәр ваҡыт башҡорт һыбайлыһы алғы сафта барҙы. Был беҙҙең бер ҡатлылыҡҡа яҡын антҡа тоғролоҡ сифатыбыҙ түгел. Ғөмүмән, башҡорттар һундар, Туран дәүләте, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа, Рус батшалығы, Рәсәй, Советтар Союзы ғәскәрҙәре сафында һуғышып, иң беренсе нәүбәттә үҙ милләтен, Уралтауҙы һаҡлауҙы маҡсат итеп ҡуйған...

(Дауамы 2-се биттә).

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

**✓ Башҡорт империяһы - кешелектең бер ҡорға ойошоуының идеаль этник империяһы өлгөһө. Башҡорттоң бер ваҡытта ла ситтәрҙең еренә дәғүә итмәүен, баҫып алмауын да тап ошо фактор менән аңлатып булалыр.**



ИШАРА

# ИКЕ ТЕЛ БЕЛЕҮҘӘН...

## бесәй ҙә ота



**Гәзитебеҙ сит телдәрҙе өйрәнеүҙең ыңғай яҡтары тураһындағы фекерҙәрҙе лә яҙып тора. Шуларҙың береһен уҡып сыҡтым да, шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғыры иҫкә төшөп, бөтә булмышымды биләне. Күптәр яттан беләләр был шиғырҙы:**

***Мин халҡымдың сәскә ҡуңеленән***
***Бал ҡортондай ыңйы йыямын,***
***Йыямын да йәнле ынйыларҙан***
***Хуш еҫле бер ҡәрәҙ ҡоямын.***

Эйе, башҡорт телебеҙ ынйылай гүзәл. Шағир яҙғанса, "Көслө лә ул, бай ҙа, ягымлы ла..." Әлбиттә, халыҡ ижадын, сәсәндәр һүҙен бар гүзәллеге, нескәлеге менән тойоу, аңлау бар кешегә лә тәтемәй. Төрлө милләттәрҙең теле ҡыҫырыҡланған дәүерҙә үҙ телендә аралашҡан ғаиләлә үҫеү, башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытҡан уҡытыусынан уныу мөһим. Телдәр тураһында бер көләмәс тә бар бит. Бер бесәй өйөнөң мөйөшөндә яңы оң күреп ҡалып, "Унда сысҡан барҙыр, ул сысҡан йүгереп сығыр ине лә, тик был тирәлә бесәй барҙыр тип уйлап, ҡурҡып ултыралыр, шуға ла йүгереп сыҡмайҙыр", тип ҡайғыра. Ысынлап та, ул өңдәге сысҡан "Яҡты бүлмәгә сығып уйнап килер инем дә, унда бесәй барҙыр", тип боҫоп ултыра икән. Ә бесәй "Әллә эт булып өрөп ҡарарғамы, эт булған тирәлә бесәй йөрөмәй бит, тип уйлар ул сысҡан", тип уйлап ала ла, тырышып-тырышып өрөүгә өҡшаш өндәр сығара. Ә сысҡан "Эт өрә, тимәк, унда бесәй юҡ", тип шатланып, яҡты бүлмәгә йүгереп сыҡһа, уны бесәй эләктереп алып, ҡабып та йота һәм үҙе: "Ҡайһылай һәйбәт икән үҙ телеңдән башҡа тағы бер телде белеүең", - тип ялана...

Беҙгә лә һәйбәт, башҡортса ла, русса ла иркен аралашабыҙ. Беҙҙең урамда "Йомарт" тигән магазин асылғас, ул магазин хеҙмәткәрҙәренә тәүҙә башҡортса өндәштем, аңламаһалар ғына рус телендә һорау бирҙем. Шулай итеп, биш ҡыҙыҡайҙың башҡорт балаһы икәнен белдем. Улар хәҙер йылмайып, минең менән башҡорт телендә һөйләшә. Миңә лә, уларға ла күңелле. Үҙебеҙҙең башҡорт мөхитен барлыҡҡа килтерҙек бит. Йәнә, кеше ике телде яҡшы белһә, бүтән телдәрҙе өйрәнеү һәләттәренең артып китеүен ғалимдар бик күптән иҫбат иткән.

Һеҙгә хат яҙып нөктә ҡуйҙым да, бесәй тураһындағы көләмәс урынһыҙ һымаҡ, был хаҡта юҡҡа ғына яҙҙым, тип үкендем. Бер милләт тә икенсеһен "йотмаһын" ине һәм телдәрҙе белеү хакимлыҡ итеү өсөн генә ҡулланылһын ине, тигән уйға килдем.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ТАМЫРҘАРЫБЫҘ - УРАЛДА!



**(Башы 1-се биттә).**

***Беҙ, башҡорттар, халҡыбыҙ төрлө ырыуҙарҙан баш ҡорға ойошҡандан алып, үҙ дәүләтселегебеҙ булған милләт.*** Әммә беҙҙәнсә дәүләтселек төшөнсәһе үҙ дәүләтселегенә төҙөгән башҡа ҡәүемдәрҙекенән ныҡ айырыла. Ни өсөн тигәндә, меңәр йылдар һүҙымында башҡорт милләте ике ҡитғаның төрлө төбәктәрендә йәшәүсе ҡәүемдәр һәм ҡәбиләләр вәкилдәренең Уралтауға, ундағы милләт ядроһын тәшкил итеүсе төп ырыуҙарға килеп ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән. Ситтән килеүселәрҙе төрлө тәбиғәт катаклизмдары (Туфан һыуы ҡалҡыуы, боҙлоҡтар шыуыуы, ҡара ҡыштар, йотлоҡтар), донъя һуғыштары Уралтауға, унда йәшәүсе боронғо көслө ҡәүемгә килеп һыйыныррға мәжбүр иткән. Урындағылар уларға йәшәргә урын, ут-һыу бүлеп биргән. Үҙҙәрен һәләкәттән һаҡлап ҡалған ҡәүемгә рәхмәт йөҙөнән ситтән килеүселәр был ҡәүемдең телен, динен, йолаларын ҡабул иткән. Был процесс бик оҙайлы йылдар барған һәм һөҙөмтәлә башҡорт милләте формалашҡан, уның эсендә йөҙҙән ашыу ырыу барлыҡҡа килгән. Тағы ла шуныһы: милләт составына ингән һәр бер ырыуҙың ике ҡитғаның ҡайһылыр төбәгендә үҙ тамырҙары, дәүләте һәм милләте бар.

Нисек кенә булмаһын, милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең нигеҙендә ҡасандыр кешелеккә янаған дөйөм бәлә ятыуын аңлауы ауыр түгел. Шулай булмаһа, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө ерҙән, ҡырҡ холоҡло ҡәүем, ҡәбилә вәкилдәре, үҙ ерҙәрен ташлап, нисек итеп Уралтауҙағы төп ҡәүемгә килеп һыйына һуң? Башҡорт (баш ҡор) һәм дәүләт һүҙҙәре бер үк мәғәнәгә эйә, уның һәр бер ырыуы - дәүләткә буйһоноусы субъект, кәрәк саҡта тиҙ генә ғәскәр туплап (ғәскәр төҙөү һәм уны үҙ иҫәбенә тотоу - дәүләтселек күрһәткесе), баш ҡорға ебәрә алыусы берәмек, дәүләттең айырым бер өлөшө, заманса итеп әйткәндә, штаты, өлкәһе...

***Беҙ, башҡорттар, кешелеккә ирекле этник дәүләтселек һәм гуманлы этник империя өлгөһөн күрһәтеүсе милләт.*** Башҡорт дәүләтселеге һәм башҡорт империяһы, әйткәнебеҙсә, беҙҙең милләттең милләт булараҡ ойошоу рәүешендә һәм маҡсатында ята. Беҙ ике ҡитғаның әле был, әле икенсе еренән беҙгә килеп һыйыныусы ҡәүемдәрҙең береһен дә көслөк менән, янап йә ҡурҡытып үҙебеҙгә буйһондормағанбыҙ, үҙебеҙҙең милләттең бер өлөшө итмәгәнбеҙ. Башҡорт империяһы - кешелектең бер ҡорға ойошоуының идеаль этник империяһы өлгөһө. Был - кешелек тарихының үҙенсәлекле башҡорт империяһы феномены. Башҡорттоң бер ваҡытта ла ситтәрҙең еренә дәғүә итмәүен, баҫып алмауын да тап ошо фактор менән аңлатып булалыр. Беҙ кешелектең киләсәген тап шулай, милләттәрҙең ирекле рәүештә бер дәүләткә ҡушылыуы, империяға берләшеүе рәүешендә күрергә теләгәйнек. Дәүләтселектең һәм империяның был формалары кешелекте яҡты киләсәккә алып килер тип хыялландыҡ, әммә беҙ теләгәнсә килеп сыҡманы, кешелек бөтөнләй икенсе юлдан китеп, дәүләтселектең һәм империяның ҡораллы, ҡанлы юлын һайланы. Кем белә, бәлки, шуның өсөн дә беҙ башҡалар күҙлегенән бер ҡатлы булып күренәбеҙҙер...

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

# ҺАНҒА ҺУҠМАҺАЛАР...

## штраф түләтәйек

**Баймаҡҡа аҡса ебәрергә уйлап, өйөбөҙ эргәһендәге почта бүлексәһенә барҙым. Был эш артыҡ мәшәҡәтһеҙ генә атҡарылыр, тип уйлағайным, тик улай булып сыҡманы. Бланктың кәрәкле урындарын тултырып бөттөм дә, бер ыңғайы хат өсөн бүлегенә әсәйемә бер-ике ауыҙ һүҙ ҙә яҙып ҡуйҙым. Быға тиклем дә шулай итә инем. Тик был юлы ҡабул итеүсе почта хеҙмәткәре минең бланк артындағы башҡортса яҙған хатымды күрҙе лә, хеҙмәтләндереүҙән баш тартты. Хатты урыҫса яҙырға ҡушты. Минең аңлатырға маташыуҙарым да бушҡа ғына булып сыҡты. Аҡсаны тиҙерәк ебәрергә кәрәк ине, шуға ла почта хеҙмәткәре менән артыҡ бәхәс ҡуптарып торорға теләмәнем. Бланкты яңынан тултырып, уны хатһыҙ ғына ебәрҙем. Әсәйемә урыҫса хат яҙғым килмәне. Килмәне генә түгел, телем дә әйләнмәне, ҡулым да барманы.**

Бер уйлаһаң, иғтибарға лайыҡ та түгел кеүек әлеге ваҡиға. Ярай, башҡортса хат тексын асыҡ бланкта ебәреп булмай икән дә, ти. Ә шулай ҙа бер минең хат менән генә бәйле шәхси проблема түгел бит был. Башҡортостан Республикаһы тип аталған илдә рус теле менән бергә дәүләт теле булып йөрөгән башҡорт теле ҡасан тулыһынса гәмәлгә ашырыла башлар һуң? Эш бит бына нимәлә тора...

Гәзиттәрҙә йыш ҡына телебеҙҙе боҙоуҙар тураһында әсенеп яҙылған хаттар баҫыла. Һәр халыҡ хәҙер үҙ телен камиллаштырырға, байытырға, уны артабан үҫтерергә һәм һаҡларға тырыша. Был - тәбиғи хәл. Халыҡты халыҡ иткән - ул тел һәм рух. Телһеҙ халыҡ булмай. Белеүемсә, французлар француз телен яҡлау буйынса бик күп саралар үткәрә. Уларҙың закондарында француз телен боҙоп яҙған йәки урынһыҙға сит телдәр һүҙҙәрен ҡулланған өсөн ҙур ғына штрафтар ҡаралған. Ошондай уҡ саралар Венгрияла ла ҡабул ителгән. Уғыр тел төркөмөнә ҡараған венгрҙар үҙҙәрен уратып алған ят тел мөхитенән үҙ-үҙҙәрен элек-электән бик ныҡ һаҡлаған һәм әле лә сит тел йоғонтоһына бирелмәү өсөн төрлө саралар күрә. Төрөктәр ҙә ошондай уҡ сараларҙы ҡуллана.

Минең уйымса, беҙҙең республикабыҙҙа ла закондар сығарыу органдарына төрлө рәсми игландарҙағы, яҙыуҙарҙағы башҡорт телендәге хаталар өсөн, йәиһә башҡорт теленең, әле мин телгә алған

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында депутаттар Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Андрей Назаровты республика Хөкүмәте Премьер-министры итеп тәғәйенләү тураһындағы тәҡдимен хупланы. Республика Башлығы шулай уҡ вице-премьерҙарҙы - Рөстәм Моратов һәм Урал Килсенбаевты - беренсе урынбаҫар, Азамат Абдрахманов, Рөстәм Ғәзизов, Ирек Сәғитов, Наталья Полянская, Александр Шельдяев һәм Илшат Фәзрахмановты урынбаҫарҙар итеп раҫлау тәҡдимен әйтте һәм 19 декабрҙә Хөкүмәтте формалаштырыу эше тамамланырға тейеш, тип билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә яңыраҡ тәғәйенләнгән Ҡыйғы районы хакимиәте башлығы Салауат Фәтҡуллин менән таныштырҙы. "Ҡыйғы районы Советының 4 декабрҙәге ҡарары менән Салауат Фәтҡуллин контракт буйынса муниципалитет башлығы итеп тәғәйенләнде, - тине Радий Хәбиров. - Һеҙҙең тәжрибәгеҙ бар, эшегеҙҙә уңыштар теләйем". Хәбәр ителеүенсә, быға тиклем Салауат Фәтҡуллин Архангел районы хакимиәте башлығының йәшәйеште тәьмин итеү, сәнәғәт, төҙөлөш, архитектура, транспорт һәм элемтә мәсьәләләре буйынса урынбаҫары булып эшләне.

✓Донецк Халыҡ Республикаһы башлығы Денис Пушилин Миңлегәле Шайморатов исемендәге беренсе башҡорт батальонының "Африка" позывнойлы яугирына "Донецк Халыҡ Республикаһы Геройы" тигән маҡтаулы исем бирҙе. Был хаҡта "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы хәбәр итә. Хәрби хеҙмәткәрҙәр менән осрашыуға юнармеецтар ҙа килде. Йәш быуын Махсус хәрби операция геройҙарына тиңләшә, тип билдәләне Денис Пушилин. Кесе сержант "Африка" Бишбүләк районында тыуып үҫкән. Миңлегәле Шайморатов исемендәге батальонда 2022 йылдан алып хеҙмәт итә, ул - пилотһыҙ осоу аппараттары операторы.

✓Рәсәй Президенты 19 декабрҙә йылға йомғаҡ яһай һәм ил халҡының һорауҙарына яуап бирә. "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" call-үҙәге граждандарҙан мөрәжәғәттәр ҡабул итә башланы. Президентҡа мөрәжәғәтте 8-800-200-40-40 телефоны аша, 0-40-40 номерына бушлай СМС-хәбәр менән, текст йәки видеояҙма рәүешендә moskva-putinu.ru сайтында, шулай уҡ программаның "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәрендәге рәсми төркөмдәрендә бирергә була. Быйыл call-үҙәк операторҙарына яһалма интеллект ярҙамға килә, шуға күрә мөрәжәғәттәрҙе эшкәртеү ваҡыты кәмене.

***✓ Әгәр дәүләт телдәрендәге хаталар өсөн штраф күләме һиҙелерлек булһа һәм бындай штраф һалыу һүҙҙә генә ҡалмайынса, мотлаҡ тормошҡа ашырылһа, файҙаһы буласаҡ, тип уйлайым.***



***Беҙ, башҡорттар, һаман да Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға тоғробоҙ.*** Үҙебеҙгә зыян килтерһә лә, шарран асыҡбыҙ, ихласбыҙ, иманға вә әхлаҡҡа хыянат итмәнек. Милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең төп маҡсаты - ирекле дәүләтселек һәм гуманлы империя сифатыбыҙға тоғробоҙ. Шуның өсөн дә беҙҙең башҡаларға ҡарата толерантлы булыуыбыҙға донъя һөмһөҙҙәре тарафынан бер ҡатлылыҡ йә сараһыҙлыҡ тигән ярлыҡ тағылалыр. Дөрөҫ әйтте Владимир Владимирович Путин, беҙҙә Рәсәй "бер тамсыла" кеүек сағыла, әммә ул һүҙен әйтеп бөтмәне: беҙҙә Рәсәй генә түгел, кешелектәге милләттәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенең идеаль формаһы бер тамсыла кеүек сағыла. Шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе ошо ерҙә яралтып, ошо ерҙең генә түгел, кешелектең аҙмышы өсөн оло яуаплылыҡ тойғоһо ла һалған. Американы азатлыҡ иле тиҙәр, тик унда бәхет эҙләп барып, үҙ асылын юғалтыусы "американлылар" бәхетлеме икән? Ай-һай...

***Беҙ, башҡорттар, донъя һөмһөҙҙәренең үҙ именлегебеҙгә хаяһыҙ мөнәсәбәтен күтәрә алмайынса, күп тапҡырҙар ихтилалдарға күтәрелеп, һуңғы сиктә XX быуат башында тағы ла ҡулыбыҙға ҡорал алып, донъяның рәсми даирәләре талап иткән формалағы дәүләтселегебеҙҙе төҙөргә мәжбүр булдыҡ һәм бының Рус дәүләтселегендәге күп кенә халыҡтарға үҙ автономияһын төҙөүгә, һуңғы сиктә Рәсәй Федерализмына юл һалдыҡ.*** Башҡорт милләтенең һәм ул халыҡтарҙың ирке өсөн миллионлап башҡорт аҫылдары башын һалды. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға әле лә тоғробоҙ, беҙҙең өҫтән ошо ер һәм кешелек өсөн яуаплылыҡ төшмәгән. Төшмәҫ тә. Шуның өсөн дә Башҡортостаныбыҙҙың һәм кешелектең яҡты киләсәге хаҡында һөйләшер өсөн донъя башҡорттарының Алтынсы Ҡоролтайы йыйылдыҡ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

миҫалдағы кеүек, ҡулланыу даирәһен тарайтырға тырышыуҙар өсөн штраф түләтеү тураһында закон ҡабул итеү мәсьәләһен күптән күтәрергә кәрәк. Һалынған штрафтар ғәйепләләрҙең кеҫәһе өсөн һиҙелерлек булырға һәм мотлаҡ түләтелергә тейеш. Шунһыҙ, ундай сараны ҡулланып тороу ҙа кәрәкмәй.

Әгәр дәүләт телдәрендәге хаталар өсөн штраф күләме һиҙелерлек булһа һәм бындай штраф һалыу һүҙҙә генә ҡалмайынса, мотлаҡ тормошҡа ашырылһа, файҙаһы буласаҡ, тип уйлайым. Шунһыҙ, беҙ төрлө тәҡдимдәр, декларациялар менән генә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашыра алмаясаҡбыҙ. Был законды һанға һуғырға теләмәгән кеше өсөн бик һөҙөмтәле тәрбиәүи сара.

Закондарҙың төп функцияларының береһе - гәйепле кешенең мотлаҡ аласаҡ язанан ҡурҡыу тойғоһо. Шуға күрә, башҡорт телен ғәмәлгә ашырыуҙа иң һөҙөмтәле сараларҙың береһе - ҙур штраф суммалары булырға тейеш. Кем дә кем "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы БР Законын һанға һуғырға теләмәй, уны инҡар итә - ул кеше, йәки ойошма ҙур штраф түләргә тейеш. Һанға һуҡмау яңынан ҡабатланһа, был юлы тәүгеһенән дә ҙурыраҡ штраф түләтергә мөмкин. Тик шундай саралар менән генә ғәмәлгә ашырырға булалыр тел тураһындағы законды. VI Ҡоролтай резолюцияһына ла инергә тейеш бындай тәҡдим, тип уйлайым.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ҮҘЕ КӨЛҺӘ ЛӘ, КҮҘЕ КӨЛМӘЙ

**Донъя йәмәғәтселеге иғтибары был көндәрҙә Сирияла булып ятҡан хәлдәргә төбәлгән. Ҡоралды оппозиция төркөмдәре коалицияһы, мәғлүм булыуынса, 27 ноябрҙә Сирияға һөжүм итте һәм власты яулауы, ә президент Бәшәр Әсәдтең үҙ вәкәләттәрен һалып, сит илгә ҡасыуы хаҡында хәбәр итте. Тәүҙә ул ултырған самолеттың радарҙан юғалып, авиаһәләкәткә осрау ихтималлығы хаҡында имеш-мимеш таралғайны, ләкин 9 декабрь иртәнге яңылыҡтар блогында ТАСС белдереүенсә, Бәшәр Әсәдтең ғаилә ағзалары менән бергә Рәсәйгә килеп төшөүе мәғлүм булды.**

Һуңғы көндәрҙә Сирия хөкүмәте армияһы әллә ни ҡаршылыҡ күрһәтеп тормайынса, төп биләмәләрен һуғышһыҙ ғына дошманға ҡалдырып, илдең төньяҡ-көнбайышына ҡарай сигенде. Сирияның күп кенә биҫтәләрендә йәшәүсе урындағы халыҡ власҡа ярҙам итеүҙән баш тартты, ә менәрләгән Сирия граждандары Ливан сиге аша үтеп, илен ташлап китергә мәжбүр булды. 7 декабрҙә Джарамана ҡалаһы халҡы Сирия лидерының атаһы - Хафиз Әсәдкә ҡуйылған һәйкәлде алып ташланы. Ислам оппозиция төркөмдәре көстәре тиҙ арала баш ҡала кварталдарына бәреп инде һәм, дәүләт телевидениеһын контролдә тотоп, Дамаск ҡалаһын яулап алыуҙары һәм бындағы режимды юҡҡа сығарыуҙары хаҡында хәбәр итте. Боевиктар башлығы Әбү Мөхәммәт әл-Джулани - хәҙер күберәк үҙенең ысын исеме менән йөрөүсе Әхмәд әл-Шараа Сирияның административ объекттары яңы власть органдарына күскәнгә тиклем хөкүмәт премьер-министры Мөхәммәт Ғазый әл Джалали контролендә ҡаласаҡ, тип ышандырҙы һәм үҙ маҡсаттарын "халыҡ һайлаған совет" менән институттар нигеҙендә яңы хөкүмәт төҙөү, тип белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта 8 декабрҙә Дамаскиҙа ҡаланы талауҙар башланды: Иран илселеге һәм үҙәк баҙар туҙҙырылды. Сирияның әлегә үҙ посында ҡалыусы премьер-министры Мөхәммәт Ғазый ил тарихында яңы этап башланды, тип белдерҙе һәм хөкүмәттең оппозиция лидерҙары менән һөйләшеүҙәр алып барыуы хаҡында хәбәр итте.

Иғтибар үҙәгендә торған икенсе тема - Ҡушма Штаттарҙың бөтәбеҙгә лә яҡшы билдәле журналисы Такер Карлсондың Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы башлығы Сергей Лавров менән әңгәмәһе. Интервьюға баш һүҙ урынына йәмәғәт эшмәкәре, билдәле журналист Карлсон властан китеүсе АҠШ президенты Джо Байден хакимиәте ҡылған ғәмәлдәр арҡаһында донъяның ядро һәләкәте алдына ҡуйылыуы һәм көсәргәнешле көйләү хаҡына Вашингтондың бер сара ла күрмәүе, Мәскәү менән аралашыуға килмәүе хаҡында һөйләне. Журналист был миссияны үҙ өҫтөнә алды.

Министр Рәсәй менән АҠШ мөнәсәбәттәре, Украина конфликты, "Орешник" ракетаһын ҡулланыу һәм башҡа бик күп мәсьәләләр тураһында һөйләне. Уның әйтеүенсә, "Беҙ хәлде ҡиҫкенләштерергә теләмәйбеҙ. "Орешник" менән Украина оборона-сәнәғәт комплексын утҡа тотоу Рәсәй территорияһына ATACMS ҡоралы менән һөжүм итеүгә яуап сигналы булды. "Орешник" кеүек яңы система ҡулланыу етди ҡабул ителгәндер, тип ышанабыҙ". Сергей Лавров: "Рәсәйҙә күптәр санкцияларҙы алыу Украина конфликты буйынса килешеүгә килеүҙең шарты тип ҡабул итергә теләр ине, ләкин Барак Обама заманынан бирле килгән санкциялар баҫымында Мәскәү күп нәмәгә өйрәнде һәм фәҡәт үҙенә иҫәп тоторға, шулай уҡ беҙгә ҡарата дуҫ илдәр менән хеҙмәттәшлеккә таянырға кәрәклеген төшөндө",- тине. Әңгәмә барышында Лавров яңы һайланған Америка президенты Дональд Трамп тураһында ла бер нисә һүҙ әйтте. Ул Трампты "көслө кеше" һәм "һөҙөмтәгә өлгәшергә ынтыла", "эштәрен аҙаҡҡа кисектерергә яратмай", тине. "Ул һөйләшкән сағында һәр ваҡыт дуҫтарса мөнәсәбәт белдерә, ләкин был Трамптың Рәсәйгә яҡшы мөнәсәбәте хаҡында һөйләмәй. Тәүге президентлыҡ йылдарында ул Рәсәйгә ҡаршы бик күп санкциялар иғлан итте", - тине Рәсәй министры. Үҙе көлөп торһа ла, күҙе көлмәй, тиғән халыҡ әйтемен иҫкә төшөрә түгелме был?

Көнбайыш дәүләттәре менән мөнәсәбәттәргә ҡағылып, министр Лавров Финляндияның ҡылығына ғәжәпләнеүен белдерҙе: "Финляндия менән беҙҙе дуҫтарса мөнәсәбәт бәйләй ине, ләкин бер төн эсендә финдар Икенсе донъя һуғышы алдынан булған сифаттарына әйләнеп "ҡайтты: ул саҡ улар Адольф Гитлерҙың бик яҡшы дуҫы ине..."

Сирия мәсьәләһенә ҡағылышлы Сергей Лавров Америка тарафтарының Сириялағы сепаратист ҡурдтар төркөмөнә "ем биреүен" һәм был маҡсаттарҙа нефть менән иген һатыуҙан алынған килемдә файҙаланыуҙары хаҡында фекерен белдерҙе. Мәскәү, Төркиә һәм Ирандың Сириялағы хәлде көйләү буйынса берләшеп эш алып барыуы хаҡында әйтте.

Һүҙҙең ахырында - тағы ла Трамп хаҡында. Truth Social социаль селтәрендәге битендә яҙыуынса, ул Украинаның Рәсәй менән конфликтты көйләүгә килеүгә ризалығы тураһында белдерҙе һәм кисекмәҫтән утты туҡтатыу кәрәклегенә баҫым яһаны. Әммә Зеленский Рәсәйгә ҡарата талаптар ҡуйыуын дауам итә һәм конфликттың килешеү менән генә тамамланмаясағына баҫым яһап, "Рәсәйҙе фәҡәт көс менән генә туҡтатырға була", тип белдерә. Бынан алда ғына Зеленский, Трамп һәм Франция президенты Эммануэль Макрон Парижда өс яҡлы осрашыу үткәргәйне. Ошо йәһәттән беҙгә йылмайып алырға ла форсат тыуҙы. Донъя лидерҙары менән ҡул биреп күрешкәндә үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтергә яратҡан Трамп был юлы ла ошо ғәҙәтен иҫкә төшөрҙө, буғай. Fox News телеканалы күҙәтеүенсә, АҠШ президенты Макрондың ҡулын хужаларса шундай ныҡ итеп ҡыҫып, борғоланы һәм тарттыланы, хатта ки аҙаҡ Франция лидерының бармаҡтарына массаж кәрәк булманымы икән, тип борсолдо социаль селтәрҙә комментарий яҙыусылар. Телеканал архивы мәғлүмәттәре буйынса, үҙенең тәүге президентлыҡ срогында - 2017 йылда ла Францияға рәсми визит менән килгәнендә Трамп Макрондың ҡулын 29 секунд буйы ҡыҫып торҙо, тип хәтерләй мәрәкәселәр. Ә Макронға бер ҙә көлкө түгел: ул хәҙер үҙен Трамп менән Европа араһын бәйләп тороусы көс итеп күрһәтергә теләй. Зеленскийға иһә иларға ғына ҡала: власҡа килеү менән Дональд Трамп Украинаға ярҙамды сикләйәсәген белдерҙе, тик шулай ҙа G7 төркөмө башланғысы менән Украина хөкүмәте Рәсәйҙең "ҡулға алынған" активтары килеменән түләнәсәк 50 млрд долларҙың 20 млрд долларын әле алыуға килешеүҙә рәҫланы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Яҙыусылар союзының элекке рәйесе Зәки Әлибаев республиканың Милли әҙәбиәт музейына етәксе итеп тәғәйенләнде. Коллективты яңы етәксе менән Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Илнур Мөхиәнов таныштырҙы. Зәки Әлибаев - әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе, филология фәндәре кандидаты. 1992 йылдан - Башҡорт дәүләт университеты, 2009 йылдан Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы, 2017-2022 йылдарҙа Башҡортостандың Яҙыусылар союзы рәйесе булып эшләне.

✓Яҡташыбыҙ, Өфөлә тыуып үҫкән донъя операһы йондоҙо Илдар Абдраҙаҡов Севастополь дәүләт опера һәм балет театры етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова хәбәр итте. Илдар Абдраҙаҡов Өфөлә тыуған. Өфө дәүләт сәнғәт институтында музыкаль белем алған. 1996 йылда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында эш башлай. 2000 йылдан Санкт-Петербургтағы Мария театры солисы.

✓Башҡортостандың "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" проекты буйынса төҙөкләндерелгән йәмәғәт киңлектәре "Рәсәй шыршылары" Бөтә Рәсәй конкурсына дәғүә итә ала. Был хаҡта илдең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы хәбәр итә. Конкурс 2024 йылдың 25 декабренән 2025 йылдың 13 ғинуарына тиклем бара. Шыршыларҙы оҫталарҙың һәм һөнәрселәрҙең, халыҡ художестволы һәм урындағы кәсепселек предприятиеларының республиканың үҙенсәлекле образын сағылдырған изделиелары биҙәй.

✓Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Шаһмөхәмәтов етәкселегендәге хәрби оркестр Мәскәүҙә сығыш яһаны. Был турала республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. "Рәсәйҙә Ватан Геройҙары көнө билдәләнгән көндө Беренсе каналдың тура эфирында Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанынан Башҡортостандың халыҡ артисы, полковник Азат Шаһмөхәмәтов етәкселегендәге Рәсәй Федерацияһы Милли гвардияһы ғәскәрҙәренең өлгөлө оркестрынан ҡотлау алыу бик ҡыуаныслы булды", - тип яҙҙы Әминә Шафиҡова.

✓Башҡортостанда 100 мең тонна шәкәр етештерелгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан. 21 ноябргә Шишмә шәкәр заводы һәм "Раевка шәкәре" предприятиеһы яңы уңыштан 705 мең тоннанан ашыу шәкәр сөгөлдөрөн эшкәрткән. Төбәк аграрийҙары шәкәр сөгөлдөрөнән мул уңыш үҫтереп алған (2,6 миллион тоннанан ашыу). Техник культураның уңышы иһә гектарынан 460 центнерҙан күберәк.

✓ Өфөлә федераль ҡаҙна иҫәбенә математика мәктәп-интернаты төҙөләсәк. "Республиканан йыйылған һәләтле балалар өсөн заманса үҙәк булдырасаҡбыҙ. Был үҙенсәлекле мәктәп буласаҡ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.



КӨН ТЕМАҺЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Традиция буйынса йыл һайын ойошторолған был сара йәмәғәтселектә лә ҙур хуплау таба, сөнки Мөрәжәғәтнамәлә әйтелгәндәр киләһе йылға иҡтисадты, социаль өлкәне үҫтереүгә, йәшәйеш кимәлебеҙҙе тотороҡло һаҡлауға, яҡшыртыуға ышаныслы күҙаллауҙар бирә. "Әлбиттә, беҙгә ҡатмарлы, артабанғы йәшәйеш йүнәлештәре хәл ителгән заманда йәшәргә тура килә. Беҙҙе һынауҙар һәм тышҡы ҡаршылыҡтар ныҡлыҡҡа тикшерә. Беҙҙе эстән бүлгеләргә маташалар. Ил тарихында бер нисә тапҡыр булған кеүек, беҙ быға берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡ менән яуап бирәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.**



# БЕРҘӘМЛЕК ҺӘМ ОЙОШҠАНЛЫҠ -

## һынауҙарҙы шулай ғына еңәсәкбеҙ

● Республика етәксеһе сығышының башында МХО-ла һәләк булғандарҙы бер минут тынлыҡ менән хөрмәтләп иҫкә алырға тәҡдим итте: "Яҡташтарыбыҙ яуҙа ҡыйыулыҡ һәм ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Күптәре дәүләт наградаларына лайыҡ булды. 12 яугирға Рәсәй Федерацияһы Геройы тигән юғары исем бирелде. Ҡызғанысҡа ҡаршы, уларҙың һигеҙенә - үлгәндән һуң. Ғүмерен ҡорбан иткән геройҙар хаҡында иҫтәлек беҙҙең күңелдәрҙә мәңге йәшәр", - тине ул. Радий Фәрит улы МХО-ла ҡатнашыусыларға төрлө ярҙам сараларын һанап үтте, уларҙы дауалау, реабилитациялау, эшкә урынлаштырыу һ.б. мәсьәләләрҙең барыһын да комплекслы хәл итеү өсөн республиканың МХО ветерандары ассоциацияһы булдырыласағын, 2025 йылды Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам йылы тип иғлан ителәсәген билдәләне.

● Республика фронттың ышаныслы терәгенә әүерелде. Оборона-сәнәғәт комплексы предприятиелары оборона заказын үтәү күләмен арттыра. Республика пилотһыҙ осоу аппараттары етештерә, операторҙарҙы уҡыта. Йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡта һөйләне. "Башҡортостан фронтҡа, яңы төбәктәргә, Курск һәм Белгород өлкәләренә 139 гуманитар ылау оҙатты. Медиктар, төҙөүселәр, юл һәм коммуналь хеҙмәткәрҙәр унда тыныс тормошто тергеҙеү өсөн күп эштәр башҡара. Беҙҙең шәфҡәт туташтары ҡатынҡыҙҙар волонтёрҙар отряды составында госпиталдә дауаланған яугирҙарҙы ҡарай",- тип билдәләне республика етәксеһе һәм ирекмәндәргә рәхмәт белдерҙе.

● 2030 йылға Башҡортостанда торлаҡ төҙөлөшө күләме 4 миллион "квадратка" еткерелергә тейеш. Радий Хәбиров Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһағанда ошондай бурыс ҡуйҙы. "Беҙ торлаҡ төҙөүҙе туҡтатырға тейеш түгелбеҙ. Иртәме-һуңмы, ауыр ваҡыттар үтеп китә. Яңы, уңайлыҡлы фатирҙарға ихтыяж һәр саҡ бар. Ихтыяж арта башлай һәм быға әҙер булырға кәрәк. Хәҙер муниципалитеттарға төҙөүселәр менән бергә әҙерлек эштәре менән шөғөлләнергә - участкалар һайларға, документтар әҙерләргә, биләмәләрҙе комплекслы үҫтереүҙең яңы проекттарын булдырырға, яңы милли проекттар сиктәрендә федераль аҡса йәлеп итергә кәрәк", - тине ул.

● Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан белем биреү кимәлен үҫтереүҙә юғары бурыстар ҡуя, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мөрәжәғәтнамәһендә. Уның билдәләүенсә, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр өсөн бер нисә ярҙам сараһы булдырылған. Капиталь төҙөкләндереү федераль программаһы буйынса 146 мәктәп бинаһы төҙөкләндерелгән. Һуңғы биш йылда республикала 31 мең урынлыҡ 44 яңы мәктәп һәм 65 балалар баҡсаһы төҙөлгән, быйыл иһә тағы ла 4 мәктәп асылған. 2025 йылда Нуғай ҡасабаһында 260 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөлә башлаясаҡ. Өфөлә иһә федераль ҡаҙна иҫәбенә математика мәктәп-интернаты төҙөләсәк. "Бөтә республиканан йыйылған һәләтле балалар өсөн заманса үҙәк булдырасаҡбыҙ. Был үҙенсәлекле мәктәп буласаҡ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

● "Башҡортостанда киләһе йылдан "Йылдың йәш ғалимы" исеме - 150-шәр мең һумлыҡ ете премия булдырыла, - тине республика Башлығы. - Был йәш белгестәрҙең республика фәненә индергән өлөшө өсөн баһа буласаҡ. Уҙған йыл аҙағында йәш ғалимдарға булдырылған ярҙам саралары буйынса ил рейтингында иң яҡшыһы булдыҡ. Фәнгә ярҙам итеү буйынса бөтә саралар ҙа ғәмәлдә ҡала". Радий Хәбиров шулай уҡ февраль айында дәүләт башлығы Владимир Путин ҡатнашлығында Өфөлә Евразия ғилми үҙәгенең университет-ара кампусының беренсе этабы асылыуы хаҡында һөйләне.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Артур СӨЛӘЙМӘНОВ, политология фәндәре кандидаты:*** Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировтың Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамәһен беҙҙең барса халҡыбыҙ ла йүнәлтелгән уй-фекерҙәре итеп ҡабул итергә кәрәктер. Был сәйәси сараның Рәсәй Конституцияһы көнө менән тап килеүе лә юҡҡа түгелдер: Башҡортостан Республикаһы оло Рәсәйҙең терәк төбәктәренең береһе - беренсеһе бит ул. Был асылып та шулай: Башҡортостан Башлығы һөйләгәндә депутаттар ғына түгел, район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары, Махсус хәрби операция геройҙары, йәмәғәт, йәштәр ойошмалары вәкилдәре, урындарҙағы үҙидара органдары хеҙмәткәрҙәре ихлас тыңланы. Республика Башлығының әйткәндәре депутаттарға ғына ҡағылмай: Радий Хәбиров ошо рәүешле халҡыбыҙға ла мөрәжәғәт итә.

Республика Башлығы иң мөһим проблемаларға туҡталып китте: беренсенән, республика етәкселеге Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы күҙ уңынан ысҡындырмай, уларҙың һәр береһе иҫәптә. Ил өсөн йәндәрен дә йәлләмәгәндәрҙең ата-әсәләре, туғандары дәүләт хәстәренә мохтаж. Улар ярҙамһыҙ ҡалмаҫ. Киләһе 2025 йыл да ошо Махсус операцияла ҡатнашыусыларға арналасаҡ. Тимәк, уларҙы хәстәрләү саралары ла артасаҡ.

Икенсе бер мөһим проблема - Башҡортостан иҡтисады артабан да йылдам үҫешһен өсөн тейешле шарттар булдырыу. Был сәнәғәт өлкәһенә лә, ауыл хужалығына ла берҙәй ҡағыла. Ил Президенты В.В. Путин иғлан иткән милли проекттарҙы ғәмәлгә ашыра алһаҡ, бөтөн илебеҙ иҡтисады үҫешен тәьмин итә аласаҡбыҙ. Иҡтисадты үҫтереү менән бер рәттән, илебеҙҙең ижтимағи мәсьәләләре лә көнүҙәк булып ҡала.

Хәҙерге заман иҡтисады өсөн заманса ғилми технологияларҙы ғәмәлгә индерә алыу үтә лә мөһим. Ошо йәһәттән Р.Ф. Хәбировтың 2025 йылдың февралендә республика Хөкүмәтендә өр-яңы орган - Башҡортостан Республикаһының Фәнни-технологик үҫеш буйынса дәүләт комитеты булдырыласағы хаҡындағы белдереүен хупларға кәрәк. Беҙҙә бөгөн фән һәм технологияларға иғтибар бермә-бер артты, тимәк, ошо юҫыҡта эшләү өсөн тейешле шарттар бар.

Рәсәй - оло ил, әммә ул төбәктәре менән көслө. Башҡортостандың иҡтисади уңыштары Рәсәй өсөн үтә мөһим. Шуға күрә лә илебеҙ етәкселәре беҙгә ҙур өмөттәрен бағлай.

***Рафиҡ ӘХМӘТШИН, "Башҡортостан" 31-се мотоуҡсылар полкы яугиры:*** Башҡортостан нацизм менән көрәштең авангардында - беҙҙең егеттәр алғы һыҙыҡта дошманды ҡыйрата. Республикабыҙ фронтҡа әүҙем ярҙам итә. Республика Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә лә, МХО-ға 139 гуманитар ылау оҙатылған, тип әйтте. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һөҙөмтәле социаль ярҙам саралары булдырылған, беҙҙең егеттәр яңғыҙ түгеллектәрен тоя. Республикаmen ярҙамы беҙгә ҡанат ҡуя, еңеүгә дәртләндерә. Бына шундай илебеҙ өсөн ябай булмаған шарттарҙа беҙҙең халыҡтың берләшеүе тойола, иҡтисад, сәнәғәт, социаль өлкә булһынмы - барыһы ла бер маҡсатҡа ирешеү өсөн эшләй.

### БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Республика менән идара итеү үҙәге чат-бот төҙөгән. Уның ярҙамында алтаҡталарҙа, юл билдәләрендә, туҡталыштарҙа, реклама плакаттарында осраған хаталар тураһында хәбәр итергә мөмкин. Бының өсөн аныҡ адресты күрһәтергә һәм фото беркетергә кәрәк. Комментарийҙы "Инцидент менеджмент" мәғлүмәт системаһы автоматик рәүештә теркәп бара, белгестәр ялыуҙы теге йәки был структураға тапшыра. "Хатаһыҙ ҡала. Башҡортостан" һанлы ярҙамсыһы русса ла, башҡортса ла "аңлай". Ул Telegram мессенджерында бар.

✓Өфөлә бер юлы өс Ҡыш бабай резиденцияһы эшләй. Ленин майҙанында урынлашҡан резиденция 26 декабрҙә асыла. Был көндә шулай уҡ баш ҡаланың төп шыршыһында уттар ҡабына, тип хәбәр итә мэрия. Резиденция көн һайын көндөҙгө сәғәт 12-нән киске 8-гә тиклем ҡабул итә. Килгән ҡунаҡтарҙы сағыу байрам программаһы көтә. Бынан тыш, Дим районында һәм Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" паркында Ҡыш бабай резиденцияһының асылыуы көтөлә. Яңы йыл төнөндә Рус драма театры алдындағы майҙанда һәм резиденцияла киске сәғәт 8-ҙән һәм төнгө 2-гә тиклем байрам программалары ойоштоҙола.

✓Яңы йыл каникулдарына ике өҫтәмә Өфө - Мәскәү поезы тәғәйенләнде. Куйбышев тимер юлының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, өҫтәмә составтар 24 декабрҙән башлап 12 ғинуарға тиклем Ульяновск һәм Һамар ҡалалары аша йөрөй. Өфөнән айырыуса 28 декабрҙә, 6, 7, 9, 10, 11 ғинуарҙа, Мәскәүҙән 25, 26, 27, 28, 29 декабрь, 7 һәм 2025 йылдың 7, 10 ғинуар көндәрендә пассажирҙар күп булыр тип көтөлә. Хәбәр иткәнебеҙсә, Өфөнән Мәскәүгә тура поезд 15 декабрҙә йөрөй башлай.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты студенты Ибраһим Мөхәммәт мас-рестлинг буйынса донъя чемпионатында бронза миҙал яуланы. Ҡырғыҙстандың Бишкәк ҡалаһында үткән турнирҙа донъяның 21 иленән 250-нән ашыу спортсы ҡатнашты. Башҡорт дәүләт медицина университетының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, шулай уҡ Нигериянан Самуэль Алладе, Конгонан Геш-Тефред Миателана, Колумбиянан Вероника Лорена республикабыҙ намыҫын яҡланы. Спортсылар ярымфиналда еңелде һәм 4-5-се урындарҙы алды.

✓Башҡортостан спортсыһы Динислам Зюзин Сочиҙа уҡтан атыу буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында алтын миҙал һәм кубок яуланы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, "Рәсәй Федерацияһының Генераль прокуроры кубогы" турнирында илдең 500 спортсыһы ҡатнашты. Улар араһынан Динислам Зюзин "21 йәшкәсә юниорҙар" дисциплинаһының шәхси зачетында иң мәргәне булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Донъя кимәлендәге һуңғы үҙгәрештәр халҡыбыҙҙы тетрәндерҙе, берләштерҙе. Үҙебеҙҙең эске мөмкинлектәрҙе асырға, берләшергә этәргес тә булды был Махсус хәрби операция.***



● Башҡортостанда 1 февралдән Фәнни-технологик үҫеш буйынса дәүләт комитеты эшләй башлауы тураһында белдереп, Радий Хәбиров шулай тине: "Дәүләт комитеты юғары белем биреү, фән һәм инновация өлкәһендәге мөһим мәсьәләләр комплексын хәл итеү өсөн булдырыла".

● Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйыл Башҡортостандың мәҙәни тормошонда булған мөһим сараларҙы барлап үтте. Ул шулай уҡ: "Циркты реконструкциялауҙы федераль адреслы инвестиция программаһына индереүгә өлгәштек. 2026 йылда уны тергеҙеү эшен башлайбыҙ. Республикаға заманса Музыка йорто талап ителә. Киләһе йылда 2 мең урынлыҡ универсаль концерт залын проектлай башларға йыйынабыҙ", - тип билдәләне.

● Радий Хәбиров Хөкүмәткә 2030 йылға инвестициялар күләмен 1,25 трлн һумға еткереү бурысын ҡуйҙы. "Республика лайыҡлы рәүештә Милли инвестиция рейтингы лидерҙары иҫәбенә инде. Быйыл тығыҙ ай эсендә инвестициялар 24,7 процентҡа үҫте", - тип билдәләне ул.

● Башҡортостан дуҫ илдәр менән, улар 100-ҙән ашыу, тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙе көйгә һалды. Киләһе йылдан 2030 йылға тиклем "Алға экспортҡа!" экспортты үҫтереү төбәк программаһы эш башлай. Радий Хәбиров Хөкүмәткә сит илдә Башҡортостан етештереүселәренең продукцияһын һатыу өсөн сауҙа йорттары төҙөү концепцияһын әҙерләргә ҡушты.

● Республика агросәнәғәт комплексын технология йәһәтенән модернизациялауға әүҙем булышлыҡ итә. Быйыл ғына дәүләт ярҙамы менән аграрийҙарыбыҙ 11 миллиард һумға яҡын суммаға 2,4 мең берәмек техника һатып алды. "Беҙгә агрокластарҙан башлап, агросәнәғәт кадрҙарын үҫтерергә, ауылдарҙа белгестәргә лайыҡлы йәшәү, эшләү, ял итеү шарттары булдырырға кәрәк", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

● Радий Фәрит улы билдәләүенсә, киләһе йылда баш ҡалабыҙҙа Һаҡлыҡ банкы ярҙамы менән Ленин исемендәге парктың реконструкциялау, Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау башлана. Өфө үҙәгендә иң унышлы етәкселәрҙең береһе Миҙхәт Закир улы Шакировҡа һәйкәл асылаҫаҡ. "Беҙ халыҡҡа баш ҡаланың Октябрь революцияһы урамын йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләргә тиғән вәғәҙә биргәйнек, уның менән шөғөлләнәбеҙ. Халыҡ күптән инде Өфөлә зоопарк булдырыуҙы һорай. Беҙ уны Урмансылар паркындағы ғәмәлдәге вольерҙар урынында ойоштороға уйлайбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

● "Ғүмер оҙайлығының 73,13 йәшкә тиклем етеүе һаулыҡ һаҡлауҙың төп ҡаҙанышы булды. Беҙ шулай уҡ балалар үлеме осраҡтарын кәметеүгә лә өлгәштек", - тине Радий Хәбиров һәм муниципалитет башлыҡтарына табиптарҙы урындарҙа ҡалдырыу өсөн шарттар булдырырға, уларға һәр яҡлап ярҙам күрһәтергә ҡушты. "Ауыл табибы", "Ауыл фельдшеры" программаларына ярашлы бөтәһе 162 медицина хеҙмәткәре 500 мендән 1,5 миллион һумға тиклем түләү алған. "Бәләкәй медицина ойошмалары өсөн табиптар" программаһы буйынса тағы 49 табипҡа миллион һум тапшырылған.

● Киләһе йылдан Башҡортостан мәктәптәренең йәш етәкселәре - гранттар, ә меңләгән уҡытыусы үҙебеҙҙең шифаханаларҙа санатор-курорт хеҙмәттәренә сертификат аласаҡ. Был яңылыҡ та Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә сағылыш тапҡан.

● Шулай итеп, республика Башлығы Радий Хабиров сығышының аҙағында ошондай еңел булмаған осорҙа уға республика менән идара итеүгә ышаныс белдергәндәре өсөн Башҡортостан халҡына рәхмәт белдерҙе һәм: "Ватаныбыҙ ҡеүәте һәр саҡ уның халыҡтарының берҙәмлегенә таянған. Һәр ваҡыт шулай буласаҡ та. Бергә эшләйбеҙ, бергә көрәшәбеҙ, бергә Рәсәйҙе һаҡлайбыҙ. Киләһе йыл Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Ул байрам беҙҙе өлкән быуындың ҡаһарманлығы һәм батырлығына, ҡаҡшамаҫ рухи көсөнә тиңләшергә саҡыра. Беҙ бергәләп теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы ла еңәсәкбеҙ. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ икәнен дә беҙ беләбеҙ" , - тине.

МХО ветерандары ассоциацияһы булдырыласаҡ, тип тә иғлан ителде республика Башлығының сығышында. МХО-ла ҡатнашыусыларға, ветерандарға, инвалидтарға һәҙөмтәле ярҙам саралары, реабилитация ойошторорға ҡушылды һәм был маҡсатта Үҙәк төҙөләсәк. Дөрөҫ һәм кәрәкле саралар был, яу ҡырынан яраланып ҡайтҡан егеттәр үҙебеҙҙең республикала реабилитация үтә алһа, бик яҡшы буласаҡ. Сөнки өйҙә, яҡындарының эргәһендә буласаҡтар, тыуған ерҙә һауа ла дауалай тиҙәр бит инде. Был алғы һыҙыкта оҙаҡ булып ҡайтҡандарға күргән ауырлыҡтарҙы онотоп, яңынан тыныс тормошҡа инеп китергә булышлыҡ итер, тип ышанам. Афған һуғышынан һуң егеттәребеҙҙең бер ни тиклем ҡараһыҙ ҡалыуы бөтәбеҙгә лә мәғлүм, бына шундай хәлдәр ҡабатланмаһын өсөн был бик етди, эшләнергә тейешле эштәрҙең береһе һәм ундай Үҙәк төҙөүҙе Башҡортостаныбыҙҙың төүгеләрҙән булып башлауы маҡтауға лайыҡ.

Мөрәжәғәтнамәлә, МХО-ла ҡатнашыусылар - иң мөһим кешеләр һәм бөтә иғтибар уларға булырға тейеш, тиелде. Ир-егеттәрҙең уңайлы, тыныс тормоштарын ҡалдырып, үҙ теләктәре менән илебеҙҙең тыныслығын, азатлығын һаҡлау өсөн китеүе, ысынлап та, баһалап бөткөһөҙ. Һәм дәүләттең уларҙы аңлауы бик мөһим. Республикала был ярҙам һүҙҙә генә түгел, эш менән дәлилләнеп бара. Етмәһә, 2025 йыл Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү йылы тип иғлан ителде. Был эш маҡсатлы рәүештә, системалы алып барыла тигәнде аңлата.

Донъя кимәлендәге һуңғы үҙгәрештәр халҡыбыҙҙы тетрәндерҙе, берләштерҙе. Үҙебеҙҙең эске мөмкинлектәрҙе асырға, берләшергә этәргес тә булды был Махсус хәрби операция. Беҙҙең яугирҙарҙың әлләни мохтажлығы юҡ, уларҙы бар республикабыҙ, халҡыбыҙ ҡарай, шөкөр. Бәләкәй генә бер миҫал: тик Башҡортостан яугирҙары ғына унайлы автобустарҙа тыуған яҡҡа ялға ҡайта. Бындай иғтибар башҡа бер төбәктә лә юҡ. Башҡортостан Махсус хәрби операция алдында ҡуйылған барлыҡ маҡсаттар теүәл үтәлһен өсөн 100 процент көсөн бирә. Бында халҡыбыҙҙың өлөшө лә ҙур, электән килгән яугирлыҡ традициялары ла этәргес бирәләр. Ил һаҡсыларына ҡараш беҙҙә һәр ваҡыт айыһ булған. Тарих биттәренә күҙ һалыу ҙа етә бының өсөн: 1812 йылғы Ватан һуғышын алһаҡ, беҙҙең ата-бабалар тулыһынса үҙҙәре ҡоралланып, үҙ аттарына атланып ил һағына баҫҡан. Ә 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышын хәтергә төшөрһәк, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тулыһынса үҙ ирке менән йыйылған яугирҙарҙан торған, тылда халыҡ үҙе аслытуҡлы йәшәһә лә, фронтҡа һәр яҡлап ярҙам иткән. Әлеге мәлдә лә беҙҙең яугирҙар үҙ ирке менән ил һағына баҫты, республика һәр яҡлап ярҙам күрһәтә. Бына шулай берҙәм халҡыбыҙға рәхмәтемде белдерәм.

## ҠЫҪҠАСА

# ТАУЫШ БИРӘЙЕК!

**Өфө мэрияһы проектлана башлаған проспектҡа Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың исемен биреүгә бәйле халыҡтың фекере менән ҡыҙыҡһына.** "Өфөләрҙән баш ҡаланың Киров районындағы проспектҡа Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың исемен биреү идеяһы тураһында үҙ фекерен белдереүҙәрен һорайбыҙ", - тиелә муниципалитет белдереүендә. 2,8 саҡрым оҙонлоҡтағы яңы проспект Кузнецов Затонында Пугачев урамы менән Ырымбур тракты араһында урынлашҡан. Бынан тыш, Өфө хакимиәте ҡала халҡының Калинин районындағы Елизавета Глинка һәм Герой Сәлих Вәлиев урамдары араһында урынлашҡан тыҡрыҡҡа - Яңы тыҡрыҡ, шулай уҡ Орджоникидзе районындағы урамға Фасад (йәки Триумф урамы) атамаһын биреүгә ҡарата фекере менән ҡыҙыҡһына. Башинформ Мортаза Рәхимовҡа арналған энциклопедия донъя күреүе хаҡында хәбәр иткәйне.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Урмансылар паркында зоопарк асыу тураһында һөйләне.** Ул әлеге ваҡытта хайуандар йәшәгән вольер урынында була. Уны проектлау эштәре башланды, тип хәбәр итте республика етәкселеге Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Радий Хәбиров шулай уҡ Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиевҡа яңыраҡ төҙөкләндереү эштәре тамамланған парк биләмәһен комплекслы үҫтереүҙе дауам итергә ҡушты. Атап әйткәндә, ул һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн воркаут-майҙансыҡ төҙөү кәрәклеген билдәләне. "Өфөләр был парктың бик ярата, шуға күрә халыҡ уға һаҡсыл ҡарай. Студент саҡта ошо паркта йөрөгәнемде яҡшы хәтерләйем, шунан бирле унда бер ниндәй ҙә эштәр башҡарылмаған. Тимәк, 40 йыл үткәс беҙ, ниһайәт, унда тәртип урынлаштырҙыҡ, артабан парк үҫтереүҙе талап итә. Хәҙер Өфө бының менән шөғөлләнһен", - тине республика етәксеһе.

✓ **Өфөлә инвалидтар өсөн социаль такси эшләй башланы. Был хаҡта Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Ленара Иванова хәбәр итте.** "Беренсе төркөм инвалидтары һәм инвалид балалар айына 4 тапҡыр бушлай социаль такси менән файҙаланырға хоҡуҡлы. Таксиға кәмендә 3 көн алдан 8 800 787 77 77 номеры буйынса шылтыратып әйтергә кәрәк", - тип яҙҙы ведомство етәксеһе социаль селтәрҙә. Сервис дүшәмбенән кесаҙнаға тиклем - иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 5-кә, йома һәм байрам алды көндәрендә иһә 8-ҙән 4-кә тиклем эшләй, тип өҫтәне ул. Хәбәр иткәнебеҙсә, социаль такси хеҙмәтен асыу тәҡдимен Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров индерҙе. Ул "Именлек" республика геронтология үҙәгендә ойошторола. Социаль такси менән ҡайҙа барырға мөмкин? Социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларына, башҡарма власть органдарына, дауалау учреждениеларына, Өфөнөң тимер юл вокзалына, дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеү буйынса күп функциялы үҙәктәргә һ.б.

✓ **Федераль бюджеттың 2025-2027 йылдарға проектында страховка пенсияларын түләү өсөн 11 триллион һум аҡса һалынған.** Ошо сумманан 700 миллиард һумы уларҙы индексациялауға йүнәлтелә, тип хәбәр итте Рәсәйҙең Финанс министрлығы. Финанс министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылдың 1 ғинуарынан эшләп йөрөгән һәм эшләмәгән пенсионерҙарға пенсия инфляция кимәлендә индексацилана. Иҡтисад министрлығы уны 7,3% кимәлендә булыр тип көтә. Эшләмәгән пенсионерҙарҙың ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме яҡынса 24 мең һум тәшкил итергә тейеш.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Һары мәтрүшкә

Был дарыу үләне 99 ауырыуҙан файҙалы булыуы тураһында яҙғайныҡ инде. Шуға уның шифаһы тейер ысулдарҙы яҙыуҙы дауам итәбеҙ.

❖ Мастит (түш шешеүе) булғанда мәтрүшкә, меңъяпраҡ, һары мәтрүшкә, юл япрағы, арыҫлан ҡойроғо үләндәрен тигеҙ өлөштә алып, сәй кеүек бешерергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң яртышар яҡан эсергә.

❖ Нервыларға бәйле хуштан яҙып ҡолау осраҡтары йыш ҡабатланғанда киптерелгән һары мәтрүшкә үләне, мелисса япрағы, йүкә сәскәһенән торған сәй эсергә кәрәк.

❖ Тирене яндырғанда 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәгә 0,5 литр һыу ҡойоп, боҫта 30 минут йылытырға, һыуытып һөҙөргә. Һары мәтрүшкә бешкән һыуҙы көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Эс киткәндә 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр 3/4 стакан эсергә.

❖ Йөрәктең хәлһеҙлегенән 3 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, тәнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Тәмәке тартҡанда 8 ҡалаҡ киптерелгән һары мәтрүшкә үләнен онтаҡлап, 0,5 литр араҡы ҡойорға һәм ауыҙын бөкө менән тығып, 8-10 көн төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп болғатып торорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң бер стакан һыуға 40-50 тамсы тамыҙып эсергә.

❖ Шулай уҡ тәмәке тартыуға ҡаршы ошондай ысул бар: 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, мейескә (духовка) ҡуйырға һәм яртылаш кәмегәнсе тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 40-50 тамсыһын эсергә.

❖ Тәмәке тартыуҙан 1-2 балғалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябып 10 минут төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 2 тапҡыр эсергә. Йәки 4 ҡалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһенә 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябырға һәм 15-20 минут төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң ярты стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡом һайыҫҡаны, ҡыҙыл суҡыш һайыҫҡан**

**(Кулик-сорока)**



Ҡара ҡарға ҙурлығында, оҙон, көслө, тура ҡыҙыл суҡышлы, ҡыҙыл аяҡлы. Кәүҙәһенең аҫҡы яғы, ҡойроғоноң өҫтө аҡ, ҡанатында ла аҡ һыҙат бар. Тауышы көслө, сағыу, "пит-пит, пит-пит" тип ҡысҡыра. Үҙе күренгәнгә тиклем тауышы әллә күпме ваҡыт алдан ишетелә. Йәш ҡоштарҙың төҫө һоро, суҡышы ҡара.

Һирәк төр, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Рәсәйҙең Европа өлөшөндә һәм Көнбайыш Себерҙә осрай. Башҡортостанда Ағиҙел һәм уның ҡушылдыҡтары Нөгөш, Еҙем, Өршәк, Дим, Сәрмәсән, Тиҙ Танып, шулай уҡ Ҡариҙел, Һаҡмар йылғалары буйында күргәнебеҙ булды. Күлдәрҙән Асылыкүл, Учалы, Сыбаркүлдә осраны.

Ҡомло-ташлы йылға ярҙарын үҙ итә. Ояһы ла ташта, асыҡ урында соҡоп ҡына яһала. Колониялар менән йәшәмәй.

Һыу бөжәктәре, ваҡ балыҡтар менән туҡлана. Башҡа сәпсәүҙәрҙән айырмаһы шунда - ҡом һайыҫҡаны бәпкәләрен өс аҙна буйы ризыҡ ташып ашата. 2004 йылда Кушнаренко районы Яңы Туҡмаҡлы ауылы эргәһендәге ҙур булмаған быуала ҡом һайыҫҡаны ғаиләһен тап иттек: ҡоштар бында башлыса ҡусҡар менән туҡлана ине.

Әй йылғаһы ярында ҡом һайыҫҡаны ояһы аҙым һайын осрай, бында бер ҡыҙыҡ күренешкә тап булғайныҡ. Ҡом һайыҫҡаны биленә тиклем һыуға инеп, ҡабырсаҡ ала ла, уны асып, ашай. Аса алмаған ҡабырсаҡтарҙы ярға ырғыта, ә унда ҡом һайыҫҡанының дуҫы - ҡарға шуны ғына көтөп тора ла, ҡабырсаҡты ҙур ташҡа бәреп, уны аса. Быңдай "дуҫлыҡ" ҡарғаның ҡом һайыҫҡанының ояһына яҡын килеүе менән тамамланды - оя хужаһы суҡышы менән уны ҡанаттары һәм ҡойроғонан эләктереп, ҡыуып та ебәрҙе.

Ҡом һайыҫҡаны ғәҙәттә 3 йомортҡа һала, инә ҡошҡа йомортҡа баҫырға ата ҡош та ярҙам итә. Ни сәбәптәндер оя һәләк булһа, яңынан йомортҡа һала һәм баҫып сығара. Йәш ҡоштар ата-инәһенән йыраҡ китмәй, оло ҡоштар уларҙы ҡайһы саҡта ашатып та тора. Улар яҡынса алты аҙналыҡ булғас оса башлай.

Йылы яҡҡа август аҙағы - сентябрь башында оса. Дингеҙ ярҙарында ҡышлай. 36 йәшкә тиклем йәшәй ала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БЕРҘӘМЛЕК ТОЙҒОҺО УЯНҺЫН!



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев милләтебеҙҙе борсоған мөһим мәсьәләләр, башҡорт ҡоролтайҙары, үткәне һәм киләсәге хаҡында һөйләне.**

**➔ Һөйләшеүҙе тарихтан башлайыҡ: башҡорт ҡоролтайҙары ҡасан үткәрелә башлаған? Улар халҡыбыҙ яҙмышына ниндәй үҙгәрештәр индергән?**

- Башҡортттоң йолаһы шулай, борон-борондан халҡыбыҙ йыйын үткәреп, мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткән, милләтте һәм телде һаҡлаған. Әйткәндәй, тәүге башҡорт ҡоролтайҙары 1917 - 1918 йылдарҙа үткәрелгән. Тап ошондай рухта 90-сы йылдарҙа "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең эшмәкәрлеге йәнләнеп китте. 1995 йылда "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында (хәҙерге "Башҡортостан" дәүләт концерт залы) яңы тормошобоҙҙоң I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылды. Иҫ киткес рух тантанаһы булды, беренсе Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың сығышын халыҡ күтәренке рух менән ҡаршы алды. Атаҡлы ғалим, археолог Нияз Мәжитов етәкселегендә эшләп алып киткән ҡоролтай туған телебеҙҙең дәүләт статусын нығытыу, уны һаҡлау һәм даирәһен киңәйтеү буйынса мөһим эштәр башҡарҙы. Тап шул йылдарҙа башҡорттарҙың аҫаба ерен һаҡлау, уны һатыуҙы тыйыу буйынса мөһим закондар ҡабул ителде. Онотолоп барған тарихыбыҙ тергеҙелде, был юҫыҡта бер генә сараны иҫкә төшөрөү етә: XVIII быуатта булған Һөйәнтүҙ фажиғәһе урынында Асҡын һәм Ҡариҙел райондары ҡоролтайҙары кәңәшмәһе уҙғарылды.

Күпләп башҡорттар йәшәгән төбәктәр менән хеҙмәттәшлек нығынды, уларҙың һәр ҡайһыһында ҡоролтайҙар үткәрелде. Ул йылдарҙа сит төбәктәрҙә милләтебеҙ өсөн иң һыҙғанып эшләгән замандаштарымды атап китмәһәм, яҙыҡ булыр: Силәбелә - Рәфҡәт Камалов, Ырымбурҙа - Миңнулла Ғәбитов, Һамарҙа - Сафиулла Вилданов, Пермдә - Рәсил Мөхәмәтйәнов, Ханты-Манси автономиялы округында - Рәүҙәт Ҡолмәмбәтов, Екатеринбургта Нәфисә Тюменцева һ.б. башҡорт ҡоролтайҙарының эшен уңышлы ойошторҙо.

Ысынлап та, тәүге һәм икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы халҡыбыҙ яҙмышына шаҡтай үҙгәрештәр индерҙе. Улар ойоштороу йәһәтенән дә, тикшерелгән көн тәртибе, мәсьәләләр буйынса ла иң уңышлыларҙан һанала. Тәүгеһендә мөһим бурыстар ҡуйылһа, икенсеһендә уларҙың үтәлеше тикшерелде. Һөҙөмтә булараҡ, демография яҡшырҙы, мәғариф һәм мәҙәниәт уңыштарға өлгәште, ғилми эҙләнеүҙәр алып барылды.

**➔ Һеҙгә лә Ҡоролтайҙа етәксе урындарҙың береһендә эшләргә тура килгән. Атап әйткәндә, ул йылдарҙа ниндәй мөһим проекттар тормошҡа ашырылды?**

- Ревизия яҙмалары (халыҡтың иҫәбен алыу) буйынса республикабыҙҙың һәр ауылында халыҡтың милли составын билдәләнек һәм 54 райондың һәр береһенең китабын баҫтырҙыҡ. Тағы ҙур проекттарҙың береһе - бөтә ил буйынса шәжәрә байрамдары ойоштора башланыҡ. Халыҡҡа шәжәрәне төҙөү буйынса ҡулланмалар тараттыҡ. Көнбайыш һәм төньяҡ райондарҙа үҙен татарға һанап йөрөгән күп милләттәштәребеҙ үҙ асылына ҡайтты. "Без - башкортлар, атай-олатайлар әйтә торғайны шул", - тип мөрәжәғәт итеүселәр күп булды осрашыуҙар ваҡытында. Әйткәндәй, бөгөн һәр йортта тиерлек шәжәрә һүрәттәре эленеп тора.

2003 йылда Ҡоролтайҙың башҡарма комитетында "Ҡоролтай тауышы" гәзитен булдырҙыҡ. Был баҫманы уҡып, республикабыҙҙа һәм күрше төбәктәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың тын алышын тойорға мөмкин ине. Ул бик күп мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙам итте. Мәҫәлән, Силәбе, Ырымбур, Һарытау һәм Һамар өлкәләрендә башҡорт телен уҡытыуҙы көсәйттек. Ул йылдарҙа хатта Силәбе өлкәһендә юғары уҡыу йортонда башҡорт теле уҡытылды. Ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙгә автобустар менән тирмәләр, милли кейемдәр, сувенирҙар һәм китаптар алып барып тапшырылды.

Иң иҫтә ҡалған ваҡиғаларҙың береһе - дүрт мең башҡорт йәшәгән Иркутск өлкәһендә башҡорт-татар ойошмаһының эшмәкәрлеге менән таныштыҡ. Ҡурайсы, йырсы Рәсүл Ҡарабулатов менән Черемхово ҡалаһында һөргөнгә оҙатылған башҡорттар менән осраштыҡ. Минең олатайҙарымдың береһе Шәмсетдин шунда йәшәй ине, туғандарым менән күрешеү насип булды. Апай-инәйҙәр башҡорт йыр-моңон тыңлап, күҙ йәштәрен түкте. Эш сәфәре һөҙөмтәһе булараҡ, унда туған телде уҡытыу маҡсатында йәкшәмбе мәктәбе булдырылды.

Һуңыраҡ Владивосток, Чита, Омск, Томск һәм башҡа ҡалаларҙа ҡоролтайҙар асылды. Иң мөһиме, бөгөн сит төбәктәрҙә йәшәгән башҡорттар менән бәйләнеш көслө.

**➔ Ҡоролтай инде утыҙ йылға яҡын эшләй. Был ваҡытта донъя ла, дәүләт тә үҙгәрҙе. Бөгөнгө төрлө сәйәси ваҡиғалар Ҡоролтайҙың эшмәкәрлегенә халыҡты берләштереү йәһәтенән күп кенә яңы йүнәлештәр өҫтәне, һеҙҙенсә, ниндәй йүнәлештәр улар?**

- Республика Башлығы Радий Хәбиров тура бәйләнеш барышында, башҡорт милләтен тарҡатырға маташалар, тип телгә алды. Был мәсьәлә мине лә бик борсой. Төрлө юлдар менән ситтән халыҡтың аңына йоғонто яһайҙар, интернетта мәғлүмәти һуғыш бара. Йәшерен-батырыны юҡ, бөгөн республикала йәшәүселәрҙең күбеһе файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарын сығарыу мәсьәләләре тураһында борсолоп, үҙ фекерен белдерә. Был йәһәттән Радий Хәбиров республикаға килеү менән ойошмаларҙың лицензияһын тикшереү һәм контролләү буйынса эштәрҙе яйға һалды. Минеңсә, ҡоролтай, йәмәғәт ойошмаһы булараҡ, власть менән бер төптән булырға, бер йүнәлештә эшләргә тейеш. Иң мөһиме, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыу фарыз.

**➔ Ҡоролтайҙың киләһе йыйынына ниндәй өмөттәр бағлайһығыҙ?**

- Заман үҙгәрә, яңы быуын килә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәштәрҙе милли телдең киләсәге артыҡ борсомай. Шуға күрә был тәңгәлдә эштәр ҡыҫыла һәм тарая бара. Ҡоролтай хәрәкәте тергеҙелгән йылдарҙа донъяға килгән быуын вәкилдәре хәҙер инде үҙ балаларын үҫтерә. Әлбиттә, ошондай ғаиләләргә айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк. Ата-әсәләр, уларҙың балалары башҡортса һөйләшәме? Тарихын, шәжәрәһен беләме? Хәҙер уларҙы берләштерергә, милли рух һеңдерергә кәрәк. Был мәсьәлә дәүләт кимәлендә хәл ителһә, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, мәҫәлән, мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре һанын арттырырға кәрәк.

Иң ҙур теләгем: башҡорт милләте артабан да бөгөнгө кеүек башҡа халыҡтар менән тиңдәр араһында тиң булып йәшәһен ине!

Теләктәрем түбәндәге шиғырымда ла сағыла:

*Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,*
*Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,*
*Ҡоролтай турында бар ғаләм тыңлаһын,*
*Башҡортта азатлыҡ тойғоһо уянһын!*

*Ҡоролтай - ҡоро дау, лаф ороу булмаһын,*
*Конгресс - ҡаңғырыш, ҡан ҡойош булмаһын,*
*Башҡортта боронғо олпатлыҡ уянһын,*
*Ғорурлыҡ, үҙаллыҡ тойғоһо тулаһын!*

*Был быуат ҡояшы байыуға барғанда,*
*Низағтар хәл итеш атышҡа ҡалғанда,*
*Күп милләт яҙмышын ҡулына алғанда,*
*Башҡортом ымһынып ҡалмаҫ ул ялғанға.*

*Ҡоролтай - гел байрам, уйын-йыр түгел дә,*
*Тормоштар шәплектән уйнаҡлау түгел дә,*
*Был йыйын - ирекке һыуһаған күңелдәр,*
*Ул - халҡым өмөтө сыраҡһыҙ төнөндә.*

*Ут йотҡан, яу кискән, бөлөнгән башҡортом,*
*Тарҡалған күстәрҙе туплаған Баш ҡортом,*
*Ҡоролтай саҡыра: ҡайтып бер баш ор, тип,*
*Ҡурсалар атайсал - Уралың, Баш йортоң.*

*Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,*
*Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,*
*Ҡоролтай саң ҡаға - бар ғаләм тыңлаһын,*
*Башҡортта берҙәмлек тойғоһо уянһын!*

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ яҙып алды.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Дөйәләрҙә төктәр менән алып барылған ылау отряд өсөн бер ҡаза ғына була. Дөйәләр рәттәргә теҙелеп бармайҙар, улар бер-береһе артынан бер епкә теҙелеп бара; унар менләгән дөйәләр сылбыры унар саҡрымдарға тиклем һуҙыла, уларҙы дошмандан һаҡларға кәрәк була. Төнгөлөккә ҡунырға туктағанда һәр дөйәнең йөгөн сисеп алып, хайуанға ятып ял итер өсөн урынды ергә тиклем таҙарталар; быныҥ өсөн бер нисә сәғәт ваҡыт талап ителә, отрядты юлға ҡуҙғатҡанда ла шунса ҡәҙәре ваҡыт үтә, кешеләргә йүнләп ашап алырға ла ваҡыт ҡалмай, уларҙы йыйыныр һәм йөктәрҙе тейәтер өсөн уяталар. Юлда барғанда берәй дөйә арып йығылһа, тотош отряд та туктала, сөнки йығылған хайуанды ситкә алып сығырға кәрәк була; бер аҙ алға табан барғас - янынан туҡталыш, шул рәүешле хәрәкәт иткәндә ғәскәр бик аҡрын бара, ҡышҡы ҡыҫҡа көндәрҙә 5 саҡрым йә иһә унан да аҙыраҡ юл үтелә. Кешеләр ауырый, үләләр; хайуандар ҙа ҡырыла, уларҙы үлгән урындарында ҡалдырып китәләр, шундай көсөргәнеш менән отряд Сусҡаҡул тигән төбәктә Эмба йылғаһына барып етә, кешеләр һәм хайуандар бик ныҡ йонсоғанлыҡтан, шунда туҡталалар. Был ҡышта һалҡындар 30 - 35 градусҡа етә.

Дошман артыҡ күренеп бармай, тик хивалыларҙың бер ҙур булмаған партияһы ғына бер рота һалдаттарға һәм капитан Ерофеев командалыҡ иткән йөҙ казакҡа һөжүм итә; ул хивалыларҙың ҙур юғалтыуҙары менән кире ҡағыла.

Был хәлде күреүселәр һөйләүенә ҡарағанда, уныһыҙлыҡты күреп, Перовский төшөнкөлөккә бирелә, сөнки ул походҡа ҡуҙғалмаһа, бындай хәлдәр булмаҫ ине.

Рустарға һалҡындар ҡурҡыныс түгел, бер ни ҙә булмаҫ әле тип, ҙур ышаныс менән юлға сығалар, сөнки отрядтар далаға элек тә ебәрелеп торған, улар кире ҡайтҡан; ҡайһы саҡта ҡара көҙ һалҡындарында ла, әммә ул саҡтарҙа казактар ебәрелгәнен онотҡандар, улар ҡайҙа барырға һәм үҙең менән нимәләр алырға икәнен белә, ә һалдаттар нимә бирәләр, шуны кейеп барырға мәжбүр була. Далала пехотаның һәм атлыларҙың өстән ике өлөшө һәләк була. Урал ғәскәре казактары ныҡ зыян күрмәй, улар полктары менән яҡшы кейендерелгән була.

Дөйәләрҙе, аттарҙы, провиант һәм башҡа багажды ташлап китәләр, сөнки уларҙы тейәп алып ҡайтыу мөмкин булмай. Ошоға өҫтәп, түбән чиндағылар аҙ ғына яңылышҡан хәлдә, уларҙы бик ҡаты язаға тарттырғандар: сисендереп, ҡаты һалҡында ҡамсы менән ярғандар. Бөтәһе лә Циолковскийҙы кеше тиреһен тереләй тунаусы тип атаған.

Хива экспедицияһы Хива өсөн йәшен кеүек ҡурҡыныс булырға тейеш, тип иҫәпләнә, һәм быны раҫлар өсөн Ырымбурҙа каруан менән килгән бер нисә йөҙ Хива сауҙагәрен тоткарлайҙар. Уларҙы ҡаҙна йортонда арестанттар кеүек тоталар, унда хәҙер Турғай губернаторы тора, ә уларҙың бер өлөшө, урын етмәгәнлектән икенсе урынға, Бирскиға шикелле, ебәрелә.1840 йылдың йәйендә Хива ханы үҙендә әсирҙә булған барса рус ирҙәрен һәм ҡатындарын, барлыһы 400-гә яҡын кешене кире ҡайтара, унан һуң Хива сауҙагәрҙәре лә азат ителә. Ырымбурҙа уларҙың яртыһы тиерлек тығыҙлыҡтан һәм төрлө сирҙәрҙән һәләк булғандыр, тип уйлайым.

Хива походының уңышһыҙ тамамланыуы бындағы мосолмандарҙа Хива ҡалаһының изге булыуы һәм христиандар тарафынан баҫып алынмаясағы хаҡында ышаныс тыуҙырҙы, һәм был хаҡта, йәнәһе, уларҙың бер китабында яҙылған имеш. Ошо Уральскийҙа казактар һәм татарҙар араһында көслө туҡмаш булған. Атаман Кожевников Хиваға икенсе поход буласағы һәм, рустарҙың хивалыларҙы тармар итәсәге хаҡында һөйләп, казактарға аңлата Казактар, ошоға ышанып, ҡынәғәт ҡала һәм тынысланa.

Хиваға ҡаршы дошманлыҡ ҡылыуҙың сәбәптәре - уларҙың ханының ҡырғыҙҙарҙы (ҡаҙаҡтарҙы. - **Тәрж. иск.**) һәр даим рустарға ҡаршы ҡотортоуы, үҙ-ара барымталарға йөрөүе йә иһә талауҙарҙа ҡатнашыуы, хандың ҡырғыҙҙарҙан законһыҙ рәүештә зәкәт (һалым) йыйыуы, бигерәк тә хивалыларҙың рустарҙы линияла тотоп алып, ҡоллоҡҡа биреүе, шулай уҡ диңгеҙҙә балыҡ тотҡан саҡта төрқмәндәрҙең уларҙы әсирлеккә алып, Хиваға ҡоллоҡҡа һатыуы.

Ошо бәхетһеҙҙәрҙең хеҙмәте менән баҫыуҙарҙағы барса ауыр эштәр башҡарыла. Әсир төшкәндәрҙе кире ҡайтарыу өсөн нигеҙ итеп Рәсәйҙең бер ваҡытта ла Хива менән һуғышмауы ҡуйыла, шулай булғас, әсирҙәр ҙә булмаҫҡа тейеш; юлбаҫарҙар тарафынан тотоп алынған тыныс кешеләрҙе хивалылар һатып ала һәм тотҡонлоҡта тота алмаҫҡа тейеш була.

Хан быға тура ғына яуап бирмәй һәм 1839 йылда Ырымбурға бер нисә әсирҙе ҡайтара, әммә барсаһын да ебәргеһе килмәй. Тап шул ваҡытта әле бөйөн ителгән экспедиция ебәрелә, ул, хивалылар менән хәрби бәрелештәргә кермәһә лә, яҡшы эҙемтәләр бирә: хан, хәүеф барлығын күреп, әсирҙәрҙе ҡайтарып ебәрә һәм улар менән бергә махсус илселек оҙата, ул Петербургҡа бара һәм унда тыныс йәшәү шарттары билдәләнә. Батшаның ҡушыуы буйынса Хиваға яҙма килешеүҙе полковник Данилевский алып бара; уны хандың үҙ ҡулдарына тапшырып, унан хан имзаһы менән йөкләмә ала.

1873 йылда рустар Хиваны алған саҡта рус телендәге ошо килешеүҙе хан һарайында төрлө кәрәкмәгән ташландыҡ әйберҙәр араһында табалар.

Хәҙер барыһы ла үҙгәрә: Хива ханы - рус батшаһы подданныйы, Ырымбур казак ғәскәренең генерал-лейтенанты, яҡтылыҡ (сиятельство) титулын йөрөтә, 1883 йылда Мәскәүҙә батша Александр III коронацияһында ҡатнаша. Мин уның менән батша өҫтәле артында ҡунаҡ булдым; минең менән уның араһында Мәскәү генерал-губернаторы, кенәз Долгорукий ултырҙы, хан уның менән тормошта барса нәмәнең үҙгәреп тороуы хаҡында һөйләште. Рустарҙың элекке уҫал дошманы - рус батшаһының ҡунағы, ә мин, ошондай дошман менән шундай тыныс шарттарҙа бер ҡасан да осрашмам, тип уйлап йөрөгән кеше, уның менән бер өҫтәл артында ултырып тыныс ҡына ҡунаҡ булдым.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҒИЛЕМЛЕ ХУР БУЛМАҪ

- Мал тота белмәгән - ауыҙын сөйгә элгән.
- Ялҡау торор һөрәйеп, уңған эшләр ирәйеп.
- Һары йөҙҙә нур булмаҫ, һары ергә кер ҡунмаҫ.
- Теленә һалынған - элмәккә алынған.
- Ел сыҡмай дауыл ҡупмаҫ, ир туламай яу сыҡмаҫ.
- Ерҙең нуры - ҡояш, кеше нуры - хеҙмәт.
- Бүләк ҙур булмаҫ, ғилемле хур булмаҫ.
- Белгән белһә лә һорай, наҙан белмәй ҙә, һорамай ҙа.
- Күп көләүҙән күңел үлә, йөҙҙөң нуры кибә, алйотлоҡҡа тиңләштерә.
- Алмандайҙың һүҙенә әүрәмә, төп башына ултыртыр.
- Меҫкенләнгән йәлләткесте йәлләмә - һуңғы тинеңде һурыр.
- Гөрбиәнгә һүҙ ҡаттың ни, тас төбөнә ҡаҡтың ни.
- Инәнәскә һүҙ ҡуштың ни, этте һөсләттең ни: икеһе бер туған.
- Иманһыҙ йөҙгә нур ҡунмаҫ, таш иҙәндә саң бөтмәҫ.
- Ил ауыҙы ҙур иләк - ондо ла, ҡомдо ла иләр.
- Һаран ҡулы асылмаҫ, йомарт ҡулында мал тормаҫ.
- Ярлыға яҫтанма - яулыҡ һорар, асты йәлләмә - һуңғы ризыҡың алыр, ҡомһоҙға яҡынайма - бөтә донъяңды утар, һыҡмырға барма - йөрәк ҡаныңды һығыр.
- Изгелекһеҙ эҙәм - серек түмәр, барынан юғы яҡшы.
- Һәр нәмәнең үҙ мөҙҙәте - ағас ҡорой, сәс ағара, йәнләләр үлә бара.

**Мөнирә МОНАСИПОВА.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

20 - 22 апрелдә 16-сы гв. атлы дивизияһының алыштарҙа ҡатнашыуы хаҡында ентекләберәк һөйләп үтәйек. Дивизияның 60-сы гв. авангард полкы 20 апрелдә Брунов тораҡ пунктын алыу маҡсатына һөжүм башлай. Был алышта 3-сө эскадрондың взвод командирҙары, гв. өлкән лейтенанттары Коровкин һәм Михалев батырҙарса һуғыша, улар үҙҙәренең взводтры менән тораҡ пунктының көньяҡ-көнбайыш ҡырыйына тәүгеләрҙән булып бәреп инә. Гв. ҡыҙылармеецы Халиҡовтың ҡаршыһына бер төркөм немец автоматсылары килеп сыға, ҡыйыу яугир 5 һалдатты юҡ итә, өсәүһен әсиргә ала. 22 апрелдә полк командитан бойороҡ ала: Ленитц-Зее күле янындағы участкала оборона тоторға һәм Шмахтенхагенға һәм Зандхаузенға һөжүм башларға әҙер булырға.14 сәғәттә эскадрондар Гогенцоллерн-каналының көнбайыш ярына сыға һәм Зандхаузенға табан хәрәкәт итә. 4-се эскадрондың ике взводы, дошманды эҙәрлекләп барып, Хафель йылғаһын күпер аша сыға һәм Фридрихсталь - Зандхаузен шоссеһында оборонаға күсә. 20 сәғәттә яу аланына 76-миллиметрлы һәм 45-миллиметрлы орудие батареялары алып килеңә. Полк 3 эскадроны менән йылға буйлап һөжүм итә. Дошман Ораниенбург йүнәлешенә сигенә башлай.

22 апрелдә дошман менән бәрелештәрҙә 4-се эскадрондың взвод командиры, гв. лейтенанты Шевченко, 3-сө эскадрондан: гв. ҡыҙылармеец Приходько, гв. өлкән сержанттары Аитбаев, Белокуров, гв. кесе сержанты Хохлов батырҙарса һуғышты. 22 апрелдә 58-се гв. атлы полкына, Вандлитц - Вензикендорф - Шмахтенхаген маршруты буйынса хәрәкәт итеп, Шмахтенхагенды алырға бойороҡ бирелә, 60-сы һәм 62-се гв. атлы полктарына йылға аша сығыу, көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыштан Зандхаузенға бәреп инеп, уна дошмандан таҙартыу бурысы ҡуйыла. Шунан һуң Кесе Канал һәм Куппинер-канал аша сығып, Ораниенбургҡа бәреп инергә һәм уның төньяҡ-көнбайыш ҡырыйына сығырға. 13 сәғәтҡә 58-се гв. атлы полкы Шмахтенхагенды таҙартып бөтә, 22 сәғәттә, Гогенцоллерн-канал аша сығып, Зандхаузендан 1,5 км төньяҡтараҡ тимер юл платформаһын ала. Беҙҙең ғәскәрҙәр ҡулына бай трофейҙар эләгә: 20 склад, 1,5 мең автомашин, 300 орудие, тотҡонлоҡтан 3 мең кеше азат ителә. 23 апрелдә полк ике эскадроны менән Ораниенбургер-канал аша сыға һәм дивизияның башҡа полктарына канал аша сығыу мөмкинлеген булдыра.

Дивизияның авангардында хәрәкәт иткән 62-се гв. атлы полкы дошман оборонаһын өҙгәндән һуң ныҡышмалы рәүештә алға барыуын дауам итте. Уның боевой ғәмәлдәре журналына бына нимәләр теркәлгән: 20 апрелдә полк Меглин, Херцхорен, Лойенберг маршруты буйынса алға барып, 60-сы гв. атлы полкы менән берлектә Брунов тораҡ пунктын алырға тейеш була: ә был Грюнталь ҡалаһының көнбайыш ҡырыйына сығыу мөмкинлеген бирә. Полк Лобеталь рубежына сыға һәм 21 апрель иртәһендә дошман частары менән алышҡа инә. Уларға дошмандың ике "СС-полицай" батальоны ҡаршылыҡ күрһәтә, әммә беҙҙең яугирҙар Берлинер-Штадтфорст урман массивын немецтарҙан таҙартып, Вандлитц тораҡ пунктын һәм уның тимер юлы станцияһын алыу маҡсатында һөжүмен дауам итә. Вандлитц Берлиндан ни барыһы 25 саҡрымға төньяҡтараҡ урынлашҡан. Уның аша Берлинға, Пренцлауҡҡа, Цедениҡҡа шоссе юлдары, Гросс Шенебекты Берлин менән тоташтырыусы тимер юлы үтә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Ғаиләләге тәрбиәгә килгәндә, атайҙың һүҙе һәр саҡ мөһим, өҫтөн булды һәм әле лә шулай. Атай абруйы ҙур беҙҙең ғаиләлә. Олатай-өләсәй тәрбиәһе лә көслө булды. Эш рәтенә уларҙан өйрәндек*

# ҮҘ АСЫЛЫҢДАН

## заман шауҡымдарын

**Ғаиләм - ҡәлғәм, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Уңыштарҙың нигеҙе ғаилә менән бәйле. Беҙҙең Башҡортостанда үҙ эшен бына тигән итеп алып барған ир-егеттәребеҙ күп. Улар йәмғәтселек эштәрендә әүҙем ҡатнашыу ғына түгел, бик күп идеяларҙың башында ла тора. Шуларҙың береһе - эшҡыуар, йәмғәт эшмәкәре, республика Мәғариф министрлығы эргәһендәге ата-әсәләр комиссияһы рәйесе урынбаҫары, Өфөнөң Киров районы ҡоролтайы рәйесе Рәмил ҠОЛТАЕВ. Бөгөн беҙ Рәмил Наил улы һәм уның хәләл ефете, һөнәре буйынса бухгалтер Гөлдәр Мирхәт ҡыҙы менән уларҙың ғаиләлә һалынған матур традициялары, бала тәрбиәләүгә бәйле мәсьәләләр тураһында һөйләшәбеҙ.**

**Бөгөнгө көнөбөҙ, заманыбыҙ тураһында фекер алышыр алдынан һеҙҙең инеш башына күҙ һалырға ине, тием. Һеҙҙе сыныҡтырған, оло юлға сығарған атай-әсәйегеҙ тураһында ла белге килә.**

**Рәмил:** Әсәйем Наилә Ғиниәт ҡыҙы - башҡорт теле уҡытыусыһы. Әсәйемдең атаһы һуғыш ветераны ине, "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены кавалеры, шулай уҡ ғүмер буйы уҡытҡан, мәктәп директоры ла булып эшләгән. Атайым - һөнәре буйынса инженер. Үҙе сәнғәткә ғашиҡ кеше булды, гармунда ла, ҡурайҙа ла уйнаны. Совет заманында Ауыл хужалығы институтында төрлө профессиональ ҡурайсылар килеп, дәрес үткәргәндәр икән - ҡурайға атайым шул студент йылдарында өйрәнгән. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигәндәй, ул мине күп нәмәгә өйрәтте. Спортҡа һөйөү тәрбиәләне. Мәктәп, район ярыштарында футбол, волейбол буйынса беҙҙең команда гел беренсе урындарҙы яулай торғайны. Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡығанда ла волейбол уйнау менән шөғөлләндем.

**Гөлдәр:** Мин күп балалы ғаиләлә тыуып үҫтем. Әсәйем - Мөслимә Исмәғил ҡыҙы, беҙҙең ғаиләнең йылы усағын һаҡлаусы ла, беҙҙе, балаларҙы тәрбиәләп, аяҡҡа баҫтырыусы ла. Атайым Мирхәт Зиннәт улы Рәжәпов - Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе. Өфө авиация институтын тамамлай. Уны баш ҡалала эшкә ҡалырға өгөтләйҙәр, ләкин ул өләсәйемде уйлап, район үҙәгенә ҡайта. Олатайым һуғыштан ҡайтҡас, оҙаҡ йәшәмәй, үлеп ҡала, дүрт баланы өләсәйем яңғыҙы тәрбиәләп, аяҡҡа баҫтыра. Уға терәк булырға тигән ниәттән ҡайтып эш башлай ҙа инде атайым тыуған яғында. Үҙен талантлы, яҡшы белгес итеп таныта. Шунан ул йәш кенә көйө юл-ремонт-төҙөлөш идалағы начальнигы булып китә. Уның етәкселек осоронда Өфө менән Әбйәлилде тоташтырған юлды төҙөнөләр.

Ғаиләләге тәрбиәгә килгәндә, атайҙың һүҙе һәр саҡ мөһим, өҫтөн булды һәм әле лә шулай. Атай абруйы ҙур беҙҙең ғаиләлә. Олатай-өләсәй тәрбиәһе лә көслө булды. Эш рәтенә уларҙан өйрәндек. "Халыҡ педагогикаһы" тиҙәр бит, беҙҙең ғаиләлә тап шундай тәрбиә өҫтөнлөк итте һәм итә.

**Берегеҙ Күгәрсен, икенсегеҙ Әбйәлил районынан. Шулай булғас, был ике йәш йөрәк нисек танышты икән, тигән һорау тыуыуы тәбиғи...**

**Гөлдәр:** Рәмилдең һылыуы Лилиә менән беҙ БДУ-ның иҡтисад факультетында бер курста уҡыныҡ. Рәмил менән өсөнсө курстарҙа таныштыҡ, бишенсе курста инде дуҫ булараҡ аралаша башланыҡ. Бер йылдан өйләнештек. "Йәншишмә"лә мөхәббәт тураһында ҡасандыр бер мәҡәлә баҫылғайны. Йәш саҡта, ғәҙәттә, ундай яҙмаларҙы уҡырға яратаһың бит инде. Унда: "Егет менән ҡыҙ бер-береһен туғыҙ ай белергә тейеш. Бына шул туғыҙ айҙан һуң да хистәр һүрелмәһә, кейәүгә сығырға, кәләш алырға була", - тип яҙылғайны. Бына шул да минең башҡа һеңеп ҡалды. Беҙҙең аралашыуға байтаҡ булып киткәйне. Рәмил мине үҙенә ҡыйыу һәм тәүәккәл, сая булыуы менән йәлеп итте.

**Ғаилә ҡороу шулай уҡ яуаплылыҡ бит инде, ике мөхиттә, ике ғаиләлә тәрбиә алып үҫкән йәштәр үҙҙәре оя ҡора, үҙҙәренең йәшәйеш ҡанундарын булдыра...**

**Рәмил:** Эйе, ғаилә ҡороу - ул оло яуаплылыҡ. Ошо яуаплылыҡты иңеңә алаһың да инде был аҙымды яһағанда. Ғаилә ҡорорға хәл иткәндә мин институтта уҡыуҙы тамамлап, эшләп йөрөй инем инде. Гөлдәр менән танышып, бер-беребеҙҙе, яратып, аралашып йөрөнөк. Мин тәҡдим яһағас, ул ҡабул итте. Шуны ла әйтергә кәрәк, мин буласаҡ ҡайныма үҙем шылтыратып, беҙҙең өйләнешеүгә фатиха биреүҙәрен һораным. Ҡайным тәфсирләп, бөтәһе тураһында ла һорашты, ныҡлап таныштыҡ. Беҙҙең арала ысын ирҙәрсә һөйләшеү булды, тип әйтәйем.

**Гөлдәр:** Эйе, өйләнешеү тураһында Рәмил менән беҙ икәү генә һөйләшеп хәл иттек түгел. Рәмил менән ошо ҡарарға килеп, ул атайым менән һөйләшкәндән һуң да әле, атай-әсәйем алдында һынау тоторға, уларҙың күп һорауҙарына яуап бирергә тура килде. Кейәүем итеп Рәмилде һайлауымды, был ҡарарым ныҡлы икәнде белгәс, оҙаҡ ҡына уйланылар әле. Нисек кенә булмаһын, беҙгә атай-әсәйҙең фатихаһын алыу мөһим ине.

**Балалар тыуғас, уларға ҡарата ла үҙегеҙ үҫкән ғаиләләге тәрбиә алымдарын ҡулландығыҙмы?**

**Рәмил:** Беҙ эшләп үҫкән балалар бит инде. Ауыл хужалығы эше менән яҡшы танышмын. Һигеҙенсе класты тамамлаған йәйҙә комбайнда эшләй инем инде. Бәләкәй саҡта беҙ йорттағы хужалыҡта ҡуян тота торғайныҡ. Ундай тәжрибәм булғас, бер саҡ балаларҙың һорауын тыңлап, ситлектәр яһап, кроликтар үрсетергә булдыҡ. Балалар бик шатланды. Улар бәләкәй ҡуяндар менән уйнарға бик яратты. Шул уҡ ваҡытта уларҙы ҡарарға, көн һайын ашатырға, ситлектәрҙе таҙа тоторға кәрәк икәнен дә белделәр. Эшкә өйрәнделәр шулай.

Беҙҙең олатай-өләсәйҙәр ғүмер буйы умарта тотҡандар. Һуңғараҡ мин дә, ҡайнымдан өлгө алып, ошо шөғөлгә тотоноп ҡарарға уйланым. Тәүҙә бер генә умарта алдым, был эшкә лә балалар ихласлап ярҙам итә башланы. Уларҙың да был шөғөлгә ынтылғанын аңлағас, умарталарҙы ишәйттек, уларҙы урманға, ҡырға бергәләп алып сығабыҙ хәҙер. Ғөмүмән, балаларҙың буш ваҡыты булырға тейеш түгел, тип иҫәпләйбеҙ, шуға ла йорт тирәһендәге эш йәки мәктәптәге бер түңәрәк менән генә сикләнмәй, төрлөһөнә ылыҡтырабыҙ. Балалар йөҙөүгә, футболға, баскетболға йөрөйҙәр, шахматта ла уйнайҙар, хатта ярыштарҙа ҡатнашалар.

**Гөлдәр:** Заман тәрбиәһе икенсе хәҙер. Тәрбиә буйынса китаптар ҙа күп. Әммә ситтән килгән тәрбиә китаптары беҙҙең тәрбиә алымдарына тура килмәй. Мин барыбер беҙҙең атай-әсәйҙәрҙең, олатай-өләсәйҙәрҙең тәрбиәһе дөрөҫ булған, тип уйлайым. Беҙ шул үҙебеҙҙең халыҡ тәрбиәһенә таянырға тырышабыҙ. Олатай-өләсәйҙәр ҙә, шулай эшләргә, былай эшләргә кәрәк, тип, ейән-ейәнсәрҙәренә өйрәтеп, әйтеп кенә торалар. Шөкөр, балалар беҙ әйткәнде лә, уҡытыусылары әйткәнде лә ҡолаҡтарына элеүсәндәр. Үҫтеләр ҙә инде: Наҙгөлгә - ун алты, Батыршаға - ун бер, Тамъянға - һигеҙ, Зарифаға өс йәш.

**Балаларға матур башҡорт исемдәре ҡушҡанһығыҙ.**

**Исем ҡушыу, исем һайлау нисегерәк булды?**

**Гөлдәр:** Наҙгөл тигән исемде тәү тапҡыр ишеткәс тә оҡшатҡайным. Уның таралған исем икәнен дә белмәй инем әле. Ҡыҙым тыуһа, ошо исемде ҡушам тигәйнем, шулай атаның та. "Зарифа" тигән башҡорт халыҡ бейеүе бар, үҙем дә бейегәс, был исем миңә бик



***Беҙ эшләп үҫкән балалар бит инде. Ауыл хужалығы эше менән яҡшы танышмын. Һигеҙенсе класты тамамлаған йәйҙә комбайнда эшләй инем инде. Бәләкәй саҡта беҙ йорттағы хужалыҡта ҡуян тота торғайныҡ. Ундай тәжрибәм булғас, бер саҡ балаларҙың һорауын тыңлап, ситлектәр яһап, кроликтар үрсетергә булдыҡ. Балалар бик шатланды. Улар бәләкәй ҡуяндар менән уйнарға бик яратты. Шул уҡ ваҡытта уларҙы ҡарарға, көн һайын ашатырға, ситлектәрҙе таҙа тоторға кәрәк икәнен дә белделәр. Эшкә өйрәнделәр шулай.***

✓ *Шәжәрәбеҙҙә милләт өсөн күп эштәр атҡарған шәхестәр байтаҡ. "Һеҙ шуларҙың тоҡомо, һеҙ яҡшы уҡырға тейешһегеҙ. Һеҙ тағы ла ҙурыраҡ эштәр атҡарырға тейешһегеҙ, был һеҙгә ҡандан бирелгән", - тип әйтәбеҙ.*



оҡшай ине. Икенсе ҡыҙыбыҙға шул исемде һайланыҡ. Улдарыбыҙға исем эҙләп, ысынлап та, китаптарҙы күп аҡтарҙыҡ.

**Рәмил:** Батырша исеме беҙ ҡушҡанда күптәр өсөн ят һымаҡ ине. Ҡәйнәм дә, әсәй ҙә аптыраны башта. "Баһадир шаһ" тигәндә аңлата Батырша. Һуңынан өйрәнеп киттеләр. Бик матур исем, тиҙәр бөтәһе лә. Икенсе улыбыҙға исем ҡушыу тарихы шулай: ҡайным Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылынан. Ул тамъян ырыуы вәкиле, Шағәли Шаҡман тоҡомо. Улар хөрмәтенә ҡушылды Тамъян исеме.

# АЙЫРЫЛМАУ -

## еңер әмәл ул

**Заман икенсе, балалар тәрбиәһе икенсе. Ә һеҙгә был заман шауҡымы ҡамасауламаймы?**

**Гөлдәр:** Тфү-тфү, күҙ теймәһен, насар шауҡым юҡ, беҙҙең өйҙә мөхәббәт, шатлыҡ, Аллаға шөкөр. "Мин һеҙҙе яратам", тип ҡосаҡлап алырға оялмайым. Бер-беребеҙҙең хәлдәрен белешәбеҙ. Мәктәптән ҡайтҡас, аш табыны артында мәктәптә нимәләр булғанын һөйләшәбеҙ. Йәшерен-батырын түгел, башҡорт ғаиләләре йыш һүҙгә һаранraҡ бит. Ҡырыҫыраҡбыҙмы инде... Беҙҙе лә бәләкәй саҡта күберәк атай-әсәй түгел, өләсәйҙәр генә ҡосаҡлап һөйә торғайны. Бәләкәй ҡыҙыбыҙ тыуғас, донъябыҙ тағы ла бөтәйҙе. Зарифаны "Беҙҙең өйө йәме", тибеҙ. Бәләкәй баланы ҡарап, яратып, балалар ҙа ниндәйҙер тәжрибә ала. Һағынып ҡайтып инәләр. Гел генә бәпләп ултырып та булмай, кәрәк булғанда, балаларҙы әрләп тә алам, әлбиттә. Ҡушылған эштең теүәл үтәүҙәрен талап итәм.

**Рәмил:** Һәр баланың үҙ холҡо. Береһе математикаға шәп, икенсеһе ижади фекерле... Быны шул һәләтлектәренә ҡарап, уларға шөғөл һайларға тырышабыҙ. Батыршаның хәтере һәйбәт, математиканы яҡшы белә, шахмат буйынса өсөнсө разрядҡа эйә. Биш йәшендә үк разряд алды. Йөҙөү буйынса ла уның разряды бар. Тамъян ҡурайҙа уйнай. Йөҙөү буйынса ла шәп.

**Рәмил, һеҙ М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында Ата-әсәләр комиссияһы рәйесе булып тораһығыҙ. Уның эше нимәнән ғибәрәт?**

**Рәмил:** Өс балабыҙ ҙа шул гимназияла уҡый бит, уларҙың уҡыуына ла, тәртибенә лә, тәрбиәһенә лә битараф түгелмен. Әүҙем атай булыуымды күреп, Ата-әсәләр комиссияһы рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Был комиссия, әлбиттә, бар мәсьәләләр буйынса ла гимназия администрацияһына, уҡытыусылар коллективына ярҙам итергә тырыша.

**Ә ни өсөн балаларығыҙ өсөн тап ошо белем усағын һайланығыҙ?**

**Рәмил:** Беренсенән, башҡорт мөхитле гимназия булғаны өсөн бында килтерҙек балаларҙы. Икенсенән, баш ҡаланың иң яҡшы уҡытыусылар уҡытҡан өлгөлө гимназияһы, тигән даны бар уның. Эргәһендә генә башҡорт балалар баҡсаһы бар, беҙҙең балалар ҙа башта шунда тәрбиәләнде. Унда йөрөгәндә лә балалар бөтә конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай торғайны. Ваҡытында "Тамыр"ға ла, Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле эргәһендәге балалар студияһына ла йөрөп алдылар. Наҙгөл әле "Гүзәл-данс" ансамблендә бейей.

**Гөлдәр:** Ата-бабалар рухында тәрбиәләргә тырышабыҙ балаларыбыҙҙы. Шәжәрәләрен беләләр. Шәжәрәбеҙҙә милләт, Башҡортостан өсөн күп эштәр атҡарған шәхестәр байтаҡ. "Һеҙ шуларҙың тоҡомо, һеҙ яҡшы уҡырға тейешһегеҙ. Был олатайың унда булған, ә был олатайың шундай эш атҡарған, улар шундай уңышҡа өлгәшкәндәр. Һеҙ тағы ла ҙурыраҡ эштәр атҡарырға тейешһегеҙ, был һеҙгә ҡандан бирелгән", - тип әйтәбеҙ.

**Ғаиләлә туған телгә мөнәсәбәтте белге килә...**

**Гөлдәр:** Беҙ балалар менән өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ. Балалар баҡсаһына барғанда рус телен бөтөнләй белмәйҙәр ҙә ине. Тик рус теле тиҙ генә "йоға" һала шул балалар теленә. Башҡорт гимназияһы булһа ла, унда ла русса аралашырға әҙер генә торалар.

**Рәмил:** Тел мәсьәләһе бөгөн енел генә тип әйтеп тә булмай. Сөнки бөтөн мәғлүмәт рус теле аша инә бит. Әммә атай-әсәйҙәргә был йәһәттән дә иғтибарлы ла, талапсан да булыу кәрәк. Туған телдә мотлаҡ үҙ-ара аралашыу теле итеп ныҡытыу кәрәк. Олатай-өләсәйҙәр ҙә был мәсьәләлә нык торорға тейеш. Беҙҙекеләр шулай итә.

**Һеҙ Өфө янындағы ауылда үҙ йортогоҙ менән йәшәйһегеҙ. Шәхси йорт, шәхси хужалыктың әһәмиәтен нимәлә күрәһегеҙ?**

**Рәмил:** Гөлдәр менән өйләнешкәс, беҙ иң тәүҙә участка һатып алып, унда мунса, өй төҙөй башланыҡ. Көн һайын эштән һуң шул участкала эш менән булышабыҙ. Наҙгөл ҡыҙыбыҙ бәләкәй ине әле. Батыршабыҙ тыуғас, төҙөп бөтөр-бөтмәстән өйөбөҙгә күсеп сыҡтыҡ.

Донъя көткәндә атай-әсәйҙәрҙең ярҙамы күп тейә бит инде ул. Һәр хәлдә, беҙҙең башҡорт ғаиләләрендә шундай тәртип - бер-беренә ярҙам итеү элек-электән килә, ул ғәҙәт әле лә йәшәй. Шул йоланы тотоп, беҙ ҙә, ҡайтып, картуф ултыртыуҙы, йорт мәшәҡәттәрен еңеләйтеүҙе, бар эште башҡарышырға тырышабыҙ. Атай-әсәйҙәр үҙҙәренсә ярҙамлашһа, беҙ ҙә үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнде эшләйбеҙ. Бер тапҡыр минекеләргә ҡайтып ярҙам итәбеҙ, икенсе юлы Гөлдәрҙәрҙең яғына барырға тырышабыҙ. Гөҙәл мөнәсәбәт урынлаштырғанбыҙ шулай.

**Гөлдәр:** Беҙҙең үҙебеҙҙең участкала ла хәҙер емеш ағастары күп. Балалар ел͡әк-емештең бешкәнен көтөп кенә тора, йәй-көҙ буйы рәхәтләнеп ашайҙар. Уларҙан ҡалғаны ғына, шулай уҡ урман-ҡырҙан йыйылғаны, тундырғысҡа тултырыла.

**Һеҙ йәнә лә умарталар тотаһығыҙ. Ләкин ҡортсолоҡ бит еңел эш түгел. Һуңғы ваҡыт "бал ҡорто ҡырылды" тигәнде лә ишетергә тура килә...**

**Рәмил:** Бал ҡорто тота башлаған сағымдан алып ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән Дәүләт тигән ағай нык ярҙам итә. Ололарса, олатайҙарса контролгә алып, шылтыратып та: "Хәҙер быны, хәҙер тегене эшләргә кәрәк", - тип өйрәтеп кенә тора. Уға бик рәхмәтлемен. Бал ҡорто тотоу ауырлыҡ түгел, файҙалы ла шөғөл ул. Ял итәһең, мәшәҡәттәрҙән арынаһың. Ҡыҙыҡ ваҡыттары ла күп булды. Умарталарҙы Аҡбирҙе ауылы янындағы урманға ҡуйғас, айыу килеп, дүртәүһен емереп китте. Өфөнөң эргәһендә айыу йөрөй тип кем уйлаһын? Быйыл да килеп китте ул. Айыу эҙҙәрен күргәс, Дәүләт ағай менән йәһәтләп умарталарҙы тейәнек тә, икенсе урынға күсерҙек. Ошондай һаҡланыу сараларын күрһәң, ҡараһаң, бал ҡорто үлмәй, үрсей. Тик былтыр ҙа, быйыл да йәй насар килде, бал әҙ булды.

**Рәмил Наил улы, һеҙ эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәһегеҙ. Ә беҙҙең күп егеттәр ситкә китеп, күберәк Себерҙә эшләй. Улар бында ҡалып, үҙҙәренең эшен аса алыр инеме? Нимә ҡамасаулай икән быны эшләргә?**

**Рәмил:** Бында мәсьәлә үҙ эшен асыуҙа ғына тормай, мәсьәләгә тәрәнерәк ҡарарға кәрәктер. Мин газ, төҙөлөш буйынса шөғөлләнгәс, шуны әйтәм: эшсе ҡулдары етешмәй. Ысынында эш хаҡы насар түгел. Себергә йөрөгәндәр күберәк аламы? Улар бер ай эшләй ҙә, бер ай ял итә. Тимәк, бер айҙа эшләгәнен ике айҙа тотоноп бөтә, тимәк, бында эшләгәндәрҙән күберәкте алмайҙыр ҙа әле. Башҡорт ирҙәренең ғаиләләрен ҡалдырып, Себергә китеүе ҡыйын хәл инде. Балалар ата тәрбиәһенә, ата иғтибарына мохтаж булып үҫә. Нисек кенә булмаһын, был хәл былай дауам итергә тейеш түгел, тигән фекерҙәмен мин. Егеттәребеҙ үҙе йәшәгән ерҙә үҙ эшен табырға өйрәнергә тейеш. Үҙ эше, тигәндән, беҙҙең башҡорт алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнә белмәй. Был эш уға ауыр бирелә. Ә шулай ҙа өйрәнергә тура килә инде. Ҡағыҙ-мағыҙ эштәрен, закондарҙы белһә, ҡалғаны ауырлыҡ тыуҙырмай. Хөкүмәт тә субсидиялар менән ярҙам итә бит хәҙер.

**Рәмил, һеҙ йәмғәтселек эшен әүҙем башҡарған иргеттәребеҙҙең береһе. Төрлө комиссияларҙа эшләйһегеҙ, был көс тә, ваҡыт та талап итә. Милләттең киләсәге өсөн һәр кем ҡулынан килгәндә атҡарырға тейеш, тиһегеҙҙер. Рухты һаҡлау өсөн нимәләргә иғтибар итергә кәрәк?**

**Рәмил:** Башҡорттар элек-электән күп бала тәрбиәләгән. Хәҙер ҙә күп балалы ғаиләләр ишәйһен ине, тием. Ҡала эргәһендәге ауылдарҙа йәшәһәләр, үҙҙәренең ерҙәре булһын, йорттар һалһындар. Үҙ йортонда һалыу, улдарыңа ла йорт төҙөп инселәү - ул да ата-бабалар йолаһы. Тыуған ергә, телгә һөйөү тәрбиәләү, тарихи тамырҙарыбыҙҙы, шәжәрәбеҙҙе өйрәнеү, уларҙы киләһе быуындарға тапшырыу буйынса ла матур традицияларыбыҙ йәшәргә тейеш. Әйткәндәй, балалар менән бергә сәйәхәт итеү ҙә уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүсе бер алым ул. Ғаиләбеҙ менән беҙ Башҡортостанды тотошлайы менән тиерлек йөрөп сыҡтыҡ. Күп тапҡыр Ирәмәлгә артылдыҡ. Торатауҙа, Нарыҫтауҙа даими булабыҙ, ҡышҡыһын Ҡуштауҙа саңғы шыуырға яратабыҙ. Яңыраҡ Салауат мәмерйәһенә барҙыҡ. Ҡурҡыныс та, ҡыҙыҡ та унда. Урыны матур, бейеклектән бөтөн донъя күренеп тора. Ҡорғаҙакта һыу индек.

**Гөлдәр:** Әбйәлилгә ҡайтып, тауҙарҙа йөрөп әйләнәбеҙ, Күгәрсенгә ҡайтып, яланда, урманда үлән йыябыҙ, һыу инәбеҙ, балыҡ тотабыҙ - былар балаларҙа аҙаҡ оҙаҡ итеп һөйләп йөрөй торған матур хәтирәгә әйләнә.

**Рәмил:** Беҙ сит илгә лә сығырға яратабыҙ. Быйыл машинабыҙға тейәлешеп, Грузияға сығып киттек. Юл ыңғайы һәр ҡалаға һуғылырға тырыштыҡ. Грузияға барып етеп, ун көн диңгеҙҙә булдыҡ. Шуға иғтибар иттем, берәй ҡайҙа сәйәхәткә барып ҡайтһаҡ, балаларҙың фекерләүе шундуҡ үҙгәрә. Етдиерәк тә, тәрәнерәк тә була бара донъяға ҡараштары...

*Башҡорттар элек-электән күп бала тәрбиәләгән. Хәҙер ҙә күп балалы ғаиләләр ишәйһен ине, тием. Ҡала эргәһендәге ауылдарҙа йәшәһәләр, үҙҙәренең ерҙәре булһын, йорттар һалһындар. Үҙ йортонҙо һалыу, улдарыңа ла йорт төҙөп инселәү - ул да ата-бабалар йолаһы. Тыуған ергә, телгә һөйөү тәрбиәләү, тарихи тамырҙарыбыҙҙы, шәжәрәбеҙҙе өйрәнеү, уларҙы киләһе быуындарға тапшырыу буйынса ла матур традицияларыбыҙ йәшәргә тейеш. Әйткәндәй, балалар менән бергә сәйәхәт итеү ҙә уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүсе бер алым ул. Ғаиләбеҙ менән беҙ Башҡортостанды тотошлайы менән тиерлек йөрөп сыҡтыҡ.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай ул беҙҙең башҡорт ғаиләләре! Үҙ асылынан айырылмай, ата-бабаларҙан килгән йола-традицияларға тоғро булып, ергә яҡынлап, ололарҙы ололап, кеселәрҙе кеселәп, үҙебеҙсә, тап башҡортса донъя көтә, эшләй, йөнләй, мал таба, шул уҡ ваҡытта үҙ быуынын дауам итеүҙе, милләт киләсәген ҡайғыртыуҙы төп бурысы итеп хәстәрләй. Бөгөнгө хәлдәр, бөгөнгө заман шауҡымы юҫығында бындай ғаиләләрҙең өлгөһө - фиҙаҡәрлек, батырлыҡ тип баһалана. Башҡорт донъяһын ошондай ғаиләләр ҡотҡарасаҡ та инде. Афарин, афарин, Ҡолтаевтар!**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
әңгәмә ҡорҙо.

✓ **Йылан йылы килә. Тик Йыланға анһат тиһегеҙме ҡар гиҙеүе! Аяҡ-ҡул юҡ, ә маҡсат ҙур. Маҡсатлы мотлаҡ теләгенә ирешә. Бына шулай, юл ыңғайында һиңә уралырға тура килде, һарыҡ дуҫ. Хәҙер төшөргә ваҡыт. Килеп еттем.**



ЯҢЫ ЙЫЛ СЦЕНАРИЙЫ



# БЕРҘӘМЛЕК ҺӘР САҠ ЕҢӘ

**Ҡатнашалар:**
**Ҡыш бабай**
**Ҡарһылыу**
**Ен**
**Айыухан**
**Төлкө**
**Йылан**
**Фил**
**Тейен**
**Бүре.**
**Сысҡан.**
**Һарыҡ.**

**Ҡыш бабай.** Һаумыһығыҙ, дуҫтарым! Яңы йылды көткәндәр һәм көтмәгәндәр, һағынғандар һәм һағынмағандар! Һеҙҙең барығыҙға ла ҡайнар-ҡайнар сәләм!

**Ҡарһылыу.** Эйе-эйе, йөрәге ҡайнар ул Ҡыш бабайҙың!

**Ҡыш бабай.** Шулай Ҡарһылыу, ейәнсәрем! Минең йөрәк ҡайнағанда, иң матур байрам башлана. Һәр йылдағыса, байрам табынына дуҫтарҙы йыям. Уларға иң изге һүҙҙәрҙе, теләктәрҙе еткерер мәл етә. Әкиәт төнө мажараһыҙ ҙа булмаҫ. Шунһыҙ ниндәй әкиәт!

**Ҡарһылыу.** Тимәк, бөтәһе лә алда?

**Ҡыш бабай.** Иң мөһиме, бөтәһе лә төп ҡунаҡты ҡыуанып ҡаршы алырға әҙерләнһен.

**Ҡарһылыу.** Кемде, Ҡыш бабай?

**Ҡыш бабай.** Бәй, Ҡарһылыу, беләһең бит, Яңы йылды.

Һинең нимә көткәнеңде
Яңы йыл яҡшы белә.
Яңы йыл килә, Яңы йыл,
Изгелек кенә телә.

**Ҡарһылыу.** Ә һин беләһеңме, бабай, уның артынса кем килә?

**Ҡыш бабай.** Беләм, ләкин әлегә сер. Алдан һөйләһәк, ул ниндәй әкиәт булһын! *(Эт өрә).* Ана, беренсе ҡунаҡ тауыш бирә.

**Ҡарһылыу.** Тоғро Алабай, һәр ваҡыттағыса, иң алдан саба.

**Ҡыш бабай.** Бергәләп ҡаршы алабыҙ, ҡыҙым. *(Сығалар)*

*Ен инә.*

**Ен.** Киттеләр. Һо, байрам табыны минә, йәғни Енгә тороп ҡалды. Ох, шәп буласаҡ! Донъя аҡтарам, буран гәрәсәте ҡуптарам. Аҙаштырам, туңдырам.

**Төлкө.** Ниндәй буран? Ниндәй гәрәсәт? Кем һин?

**Ен.** Дауыл ҡуптарыусы Ен булам! Аңра төлкө! Мине генә тыңлағыҙ! Юғиһә, бына сүлмәккә тығам.

**Төлкө.** Ниндәй сүлмәккә?

**Ен.** Минең сүлмәгем - зиндан. Төбө юҡ.

**Төлкө.** Ә ул ҡайҙа?

**Ен.** Шыршы артында!

**Төлкө.** Шыршы артында?

**Ен.** Ул Ҡыш бабайҙың бүләк һалған тоғо түгел! Сүлмәктән бөрәү ҙә сыға алмай. Һин кем яҡлы, Төлкө?

**Төлкө.** Бәй, кем, тип ней... һинең эргәңдә торғас...

**Ен.** Аңланым. Ярҙамсым бул. Ризамы, юғиһә...

**Төлкө.** Ри-ри.. риза!...

**Ен.** Әгәр ҙә хәйләләшһәң...

**Төлкө.** Ул ниткән һүҙ тағы! Хәйләләшкән бер төлкөнө лә күргәнем юҡ. Ә һине бер күреүҙә оҡшаттым...

**Ен.** Һы, оҡшаттым... йә, ярай. Ә мин Ҡыш бабайҙы алдаттым. Алабай булып өрҙөм. Ышандылар. *(Көлә)*

**Төлкө.** Бәй, ниңә?

**Ен.** Ниңә! Йөрәһөндәр ҡаңғырып. Юҡ Алабайҙы эҙләп. Ә миңә шыршылағы бүләктәрҙе алмаштырырға кәрәк. Унда нимә яҙылған?

**Төлкө.** Бәхет, муллыҡ, байлыҡ, ҡыуаныс.

**Ен.** Бына минең тәтәйҙәрем! Уҡы!

**Төлкө.** Яуызлыҡ, талаш, үсләшеү, төрлө сирҙәр... Абау...

**Ен.** Төлкө, нимә тымып ҡалдың? Йә, ярҙамлаш! Эл, йәһәтләп! Нишләп ҡулың ҡалтырай?

*Айыу килеп инә.*

**Айыухан.** Был ниндәй саҡырылмаған ҡунаҡ! Нимә эшләйһең минең урманда!

**Ен.** Айыухан, мин бында саҡырылға-ан.

**Айыу.** Һөйләмә буш хәбәр! Бөтөн саҡырыуҙы үҙем ебәрҙем. Шәхсән!

**Ен.** Ә мине Яңы йыл үҙенең илсеһе итеп ебәрҙе.

**Айыу.** Алдағаныңды еҫеңдән һиҙәм. Шомло хайуан!

**Ен.** Алдамайым! Ана, шыршы артында саҡырыу ҡағыҙы. Кил, күрһәтәм. Хатихати хатибо! Төлкө, инде күрҙеңме, Айыу юҡ булды.

**Төлкө.** Ай-ай, Ен-Дауыл! Нимә эшләттең урман хужаһын?

**Ен.** Мине хайуан, тине! Шыр тиле! Еңдең кем икәнен белмәй! Ятһын сүлмәктә. Кем оҡшамай, бөтәһен дә шунда атып бәрәм. Хәҙер мин хужа урманға. Нимә, риза түгелһеңме?

**Төлкө.** Ри-ри...Ризаааа...

**Ен.** Әлбиттә, риза. Кемдең айыу менән бер сүлмәктә ултырғыһы килһен, ха-ха-ха... Ошонда тор ҡарауылда! Ә мин теләгәй-былай сабайым. Дауыл ҡуптарайым. *(Сыға)*

**Төлкө.** Һы... Ярай, теләһә нимә эшләһен. Минең баш теүәл. Уй, Ҡыш бабай күренде. Кемеһе көслө? Енме, Ҡыш бабаймы? Шым ҡалырғамы, әллә әйтергәме? Юҡ-юҡ, телде тешләйем. Хәл ҡайһы яҡҡа үҙгәрер? Миңә бит артабан йәшәргә кәрәк... Донъя - ул ярыш майҙаны, кем сос - шул еңә.

**Ҡыш бабай.** Кемдәр унда йүгереү ярышы үткәрә, Төлкө? Саптырып сығып китте бөрәү. Ҡойроғо ғына күренеп ҡалды.

**Төлкө.** Ней бит... Урман мөғжизәләр менән тулы, Ҡыш бабай. Һиңә аңлатырға түгел...

*Ҡарһылыу инә.*

**Ҡарһылыу.** Ҡыш бабай, дауыл ҡупты! Бөгөн бит тылсымлы төнгә заказ бирелгәйне! Йәнлектәр был яҡҡа килә алмай. Бөтәһен дә бер сәйер хайуан ҡыуа.

**Ҡыш бабай.** Ниндәй хайуан?

**Ҡарһылыу.** Мин Ен-Дауыл тип ҡысҡыра. Миңә буйһоноғоҙ, буран туҡтар, ти.

**Ҡыш бабай.** Ен-Дауыл? Атаҡ-атаҡ! Хайуан түгел! Енде мең йыл элек сүлмәккә тыҡҡайнылар. Дарьяға атып бәргәйнеләр. Килеп сыҡҡан икән яуыз.

**Ҡарһылыу.** Сығыу ғына түгел, тыңламағандарҙы сүлмәккә тығам, ти. Ҡурҡыта, янай. Ҡыш бабайҙы ла шунда бикләйем, ти. Мин - ҡыш хужаһы, ти.

**Ҡыш бабай.** Борсолма, Ҡарһылыу. Хәҙер уны тылсымлы таяғым менән туҡтатам.

*Ен инә.*

**Ен.** Хәлеңдән килһә, туҡтатып ҡара. Йә! Көсөң етмәйме! Етмәҫ... Сөнки минең көстөң ҡайҙалығын белмәйһең! Йәшерҙем мин уны. Хәҙер үҙеңде сүлмәккә тығаһы ғына ҡалды. Урман хужаһы Айыу унда һине һағына.

**Ҡарһылыу.** Быға тиклем Ҡыш бабайға янағандары юҡ ине!

**Ен.** Янайым, сөнки көс миндә!

**Ҡыш бабай.** Ысынлап та, таяҡ мине тыңламай...

**Ҡарһылыу.** Эй, маҡтансыҡ Ен, ҡайҙа һинең көсөң?

**Ен.** Минең көс хәҙер юғарыла элеүле! Буйың етмәҫ, Ҡарһылыу.

**Ҡарһылыу.** Нисек элеүле?

**Ен.** Башығыҙ етмәҫ, һорашмағыҙ.

**Ҡыш бабай.** Элеүле, тимәк! Ҡарһылыу ҡыҙым, беҙҙең шыршыға ниндәй ҡараҫҡылар элгәндәр? Ҡайҙа затлы тәтәйҙәребеҙ? Алып ташла быларҙы.

**Ҡарһылыу.** Уй, яҡын барып булмай.

**Ҡыш бабай.** Мин дә бара алмайым. Был ни хәл?

**Ен.** Кем элгән, шул ғына ысҡындыра.

**Ҡыш бабай.** Ә кем элде? Төлкө, ниңә боҫтоң? Тукта, ҡайҙа киттең?

**Төлкө.** Мине ул яуыз мәжбүр итте.

**Ҡыш бабай.** Улайһа, үҙең үк алып ташла шул ҡый-ғыпырҙы.

**Ен.** Төлкө, барма шыршы янына! Юғиһә, сүлмәккә инеп ятаһың. Күрҙең бит минең көстө.

**Ҡыш бабай.** Юҡ, һин түгел. Йыл хужаһы көслө. Йылан йылы килә. Ә йылан һинең һымаҡ хәбәр һатмай. Ул үҙенең эшен эшләй.

**Ен.** Шулаймы? Тимәк, минең тағы ла бер дошманым бар! Ҡырам, юҡ итәм.

**Ҡыш бабай.** Берҙәмлектә - көс. Яңы йыл дуҫтарын йыя. Улар һиңә көстө күрһәтер.

**Ен.** Тарҡауҙар бит улар. Һәр берећен өркөтәм. Дауыл сығарҙым. Юлдарын быуҙым. Аҙашһындар.

**Ҡарһылыу.** Кемдәрҙер ярҙам һорай.

**Ҡыш бабай.** Ишетәм, ҡыҙым, әйҙә ярҙамға. Был буранда бөрәү ҙә аҙашырға тейеш түгел. *(Сығалар)*

**Ен.** Ысын дуҫтар, имеш! Ҡана, арттарынан барайым, ҡамасау итәйем. *(Сыға)*

*Тейен инә. Уның артынса Һарыҡ күренә.*

**Тейен.** Дуҫтар менән Яңы йылды ҡаршы алырға мин дә килдем. О-о-о, бына бит һарыҡ дуҫ та килгән. Билен биштән быуған.

**Төлкө.** Ҡайҙа билбауы? Төштө бит. Аңра һарыҡ бер нәмә лә һиҙмәй.

**Һарыҡ.** Ағаста шәп ялтыр билбау элеп тора ине. Алып билгә ураным. Миңә килешәме? Нишләп көләһегеҙ?

**Төлкө.** Килешер ине, ысҡынды.

**Тейен.** Төшөп ҡалды бит!

**Һарыҡ.** Уй-уй, билбауым ҡайҙалыр төшөп ҡалған...

**Йылан.** Миңә төшөргә ваҡыт ине шул, Һарыҡҡайым. Мин бит билбау түгел, мин Йылан.

**Йәнлектәр бергә.** Йылан?

**Йылан.** Йылан йылы килә. Тик Йыланға анһат тиһегеҙме ҡар гиҙеүе! Аяҡ-ҡул юҡ, ә маҡсат ҙур. Маҡсатлы мотлаҡ теләгенә ирешә. Бына шулай, юл ыңғайында һиңә уралырға тура килде, һарыҡ дуҫ. Хәҙер төшөргә ваҡыт. Килеп еттем.

**Тейен.** Һарыҡ һуштан яҙып йығылды...

**Төлкө.** Донъяны болартыусы Енде күрһә, иҫенә килер. Йылан, һаҡ бул! Ен-Дауыл бөтәһен дә сүлмәгенә тыға. Тотош йылға үҙе хужа булмаҡсы.

**Йылан.** Был шаяртыумы?

**Төлкө.** Урман хужаһы Айыухан сүлмәк эсендә!

**Йылан.** Бик ҡыҙыҡ хәлдәр бара икән... Яҡшылап танышыр-белер өсөн, ситтән күҙәтеү кәрәк. Ҡана, үрмәләйем шыршы башына. Күҙ һалайым тирә-яҡҡа. Минең ашығыр ерем юҡ.

**Төлкө.** Бына һиңә мә, бер ҡолағы ла һелкенмәне. Менде лә китте шыршыға. Хәйер, ниндәй ҡолаҡ, ти, йыланда!

**Тейен.** Бәй, бә-ә-әй... Ә Һарыҡ торҙо ла ҡасты.

**Һарыҡ.** Ҡасманым. Минең дуҫым килә ята. Ҡаршы алам!

**Төлкө.** Уның ҡарауы, Ен беҙгә эйәләште. Ана, Ҡыш бабайға тағылған.

**Ҡыш бабай.** Әкиәт дуҫтарыма ышанмайһың, Ен. Дуҫлыҡ юҡ, тиһең, шулаймы!

**Ен.** Ышанмайым.

**Ҡыш бабай.** Ана, ҡара!

**Ен.** Нимә, күҙемә күренәме? Бүре менән Һарыҡ ҡосаҡлашып киләләр?

**Ҡыш бабай.** Бына шулай була Яңы йыл мөғжизәһе!

**Һарыҡ.** Бүре дуҫҡайым, бигерәк моңло йырлайһың. Һине тыңлап туя алмайым. Тыңлайым да, илайым.

**Бүре.** Эй, улай ныҡ маҡтама инде, Һарыҡ дуҫ! Мин консерватория бөтмәгән. Үҙбелдек кенә. Һин минән дә шәп, Һарыҡ. Тыпырлап бейеп китһәң, күҙҙе алып булмай.

**Һарыҡ.** Эййй... Хәҙер йәш саҡтағы һымаҡ түгел инде...

**Бүре.** Йәштәрҙән уҙҙыраһың! Эй, еңел йөрөйһөн.

**Һарыҡ.** Һинең мондо тыңлап, бар урман тын ҡалды.

**Бүре.** Күҙ генә теймәһен үҙекәйеңә! Мәңге йәш бул, Һарыҡ дуҫ!

**Ен.** Бәй-бәй, был ни хәл...

**Ҡыш бабай.** Ана, тағы дуҫыбыҙ килә. Алыҫ юл үткән Фил.

**Ен.** Ул бер үҙе. Һа, япа-яңғыҙ!

**Фил.** Мин яңғыҙ түгел.

**Сысҡан.** Түгел-түгел! Мин сысҡан - уның ҡолаҡ артында.

**Ен.** Һеҙ дуҫтар? Мин һине күрмәйем әле.

**Сысҡан.** Эйй, һиңә мине күреү кәрәкмәй. Фил мине бөтә ерҙә лә таный. Шул еткән! Ант итеп әйтәм, Филкәйем, бынан ары бер сысҡан да томшоғоңа инеп ояламаҫ. Тонсоҡтормаҫ.

**Фил.** Вәғәҙә бирмә, дуҫҡай, вәғәҙә бирмә...

**Ҡарһылыу.** Ниндәй мөхәббәт улар араһында! Ah!

**Ҡыш бабай.** Мөхәббәтле бөгөн донъя!

**Ен.** Көтмәгәйнем. Уйламағайным.

**Тейен.** Ә мин Тейен менән Ен оҡшаш, тип уйламағайным!

**Ен.** Бахыр Тейен. Мине үҙең менән сағыштырма.

**Тейен.** Исем оҡшаш, тием ахмаҡ. Мин быға һис кенә лә шат түгел.

**Бүре.** Тейен, һин урман йәме. Ә Ен, ул, тфү!...

**Ен.** Йөмле нәмәгеҙ, бигерәк бәләкәй, ha-ha-ha!..

**Тейен.** Бәләкәймен. Ләкин минең сүлмәгем һинекенән күпкә ҙур. Ағас ҡыуышын күрһеңме? Уға тотош донъя һыя. Йылан дуҫ миндә ҡунаҡта.

**Ҡарһылыу.** Ҡыш бабай, ярҙамға ашығайыҡ, юғиһә...

**Ҡыш бабай.** Юҡ, ҡыҙым. Минең геройҙарым бөтәһен дә үҙҙәре йырып сығасаҡ. Улар мажара ярата, сығыу юлын да белә. Йыл һайын шулай.

**Ен.** Ҡайҙа тинең йыланды? Ҡыуыш эсендә! Серҙе астың бит, тиле тейен. Хәҙер уны сүлмәгемә тығам.

**Фил.** Инеп китте Ен ҡыуышҡа. Афарин, Тейен. Хәҙер нишләйбеҙ!

**Тейен.** Айыуҙы йәһәт кенә сүлмәктән сығарырға кәрәк!

**Һарыҡ.** Сүлмәк ҡайҙа?

**Төлкө.** Бына шыршы артына йәшерҙе.

**Сысҡан.** Айыуҙы нисек сығарырға? Үҙем төшөп китә яҙҙым сүлмәккә.

**Бүре.** Сысҡан, ашыҡма. Минең дә хәлдән килмәй, сүлмәктең төбө тәрән. Кем иң көслөһө?

**Фил.** Минлеккә мин, тик ҡул һыймай.

**Төлкө.** Ҡулым ҡыҫҡа, ҡойроҡ төбөнә барып етмәй.

**Йылан.** Күҙәттем, хәл-торошто аңланым. Бында мин генә сикһеҙ һуҙылам.

**Тейен.** Ҡара-ҡара, йылан һуҙылды, сүлмәктән Айыуҙы һөйрәп тә сығарҙы.

**Фил.** Йылан һаҡ, уяу, тапҡыр. Кәрәк саҡта етеҙ. Уға етеүсе юҡ.

**Йылан.** Сеү... Ен беҙҙең тауышты ишетте. Ҡыуыштан сығырға итә. Сүлмәк менән ҡыуыш ауыҙын ҡаплағыҙ. Бында һеҙҙең ҡулдар кәрәк! Әллә миңә ҡул үҫкәнен көтәһегеҙме?

**Ҡышбабай.** Күрҙеңме, Ҡарһылыуым, балаҡайым! Сүлмәк тигән ауға кем ҡапты?

**Ҡарһылыу.** Ен-Дауыл үҙ сүлмәгенә үҙе инеп ятты.

**Ҡышбабай.** Берҙәмлеккә ышанмағайны Ен-Дауыл. Хәҙер ышанды! Шулай ул беҙҙең дуҫлыҡ! Йәшәһен әкиәт дуҫтары!

**Ен.** Иртә ҡыуанмағыҙ! Минең көсөм шыршыла әлеүле. Хәҙер сығам! Төлкө, кем минә вәғәҙә бирҙе? Һин мине оҡшаттым, тинең! Төлкө, ярҙам ит!

**Төлкө.** Уй-уй, нишләйем?

**Йылан.** Аҡылыңа кил, Төлкө. Етер һинә тегелә-былай борғоланып, икейөҙләләнеп, ялағайланып йөрөү. Ә шыршыла Ен-Дауылдың бер тәтәйе лә ҡалманы. Уның бөтөн ҡый-ғыпырын дарыуланым. Таралып төшөп, саң булып остолар. Минең дарыу хәтәр көслө.

**Тейен.** Ағыуланым, тиген.

**Ҡыш бабай.** Ыумы, дарыумы - Йылан үҙе яҡшыраҡ белә.

**Төлкө.** Йылан, йыланҡайым. Һин бит мине мең бәләнән ҡотҡарҙың. Ен-Дауыл ҡотомдо алғайны.

**Йылан.** Төлкө дуҫ, Ен-Дауыл һымаҡ заттар һинең һымаҡтарҙы ҡурҡытырға ярата. Ләкин ниәте килеп сыҡмай.

**Бүре.** Сыҡмаясаҡ та, беҙ һәр саҡ уяу.

**Һарыҡ.** Минең Бүре дуҫ уяу!

**Айыухан.** Мине, Айыуҙы, тотҡонлоҡтан сығарҙың. Ярҙам итергә теләгәндә, аяҡ-ҡул да кәрәкмәй икән.

**Төлкө.** Кил, Йыланҡайым, ҡосаҡлайым үҙеңде. Уй! Йылан һып-һыуыҡ. Өшөгән. Ҡайнар сәй бирегеҙ!

**Ҡыш бабай.** Йыланға ҡайнар сәй килешмәҫ. Ул бит һалҡын ҡанлы һәм айыҡ аҡыллы.

**Йылан.** Тыштан һалҡын, эстән ҡайнар мин!

**Ҡарһылыу.** Бына шундай йыл килә. Белеп ҡуйығыҙ.

**Ҡыш бабай.** Байрам башлана.

**Йылан.** Дуҫтарым, шыршы ботағына бер биҙәүес етмәй. Сүлмәкте элеп ҡуйығыҙ шунда.

**Ҡыш бабай.** Күрҙеңме, Ҡарһылыу!

**Ҡарһылыу.** Күрҙем, Ҡыш бабай!

**Ҡыш бабай.** Нимәне күрҙең?

**Ҡарһылыу.** Ысын дуҫлыҡ, берҙәмлек еңгәнен күрҙем.

**Ҡыш бабай.** Тап шулай!

**Ҡыш бабай.** Күрҙегеҙме, күмәк көс ҡалай була. Дауыл, гәрәсәт юҡҡа сыға.

**Бөтәһе лә.** Күрҙек!

**Төлкө.** Аһ, ҡайҙа булды сүлмәк? Эленеп тора ине бит!.

**Ҡыш бабай.** Төлкөбай, уны Аҡсарлаҡ алып китте. Диңгеҙҙә ҡалдыра. Был сүлмәк элекке урынында ятырға тейеш. Ул диңгеҙҙең бер йәме ине, тине.

**Ҡарһылыу.** Диңгеҙ ҡалай шаулай.

**Йылан.** Сөнки диңгеҙҙәге тереклек тә Яңы йылды ҡаршылай.

**Ҡыш бабай.** Ә беҙҙә ниндәй шәп байрам гөрләй. Моңло-дәртле йыр-бейеүҙәр, бүләк-күстәнәстәр, матур теләктәр - бөтәһе лә мул булмаҡсы.

**Ҡарһылыу.** Яңы йыл һәр кем өсөн шатлыҡ йылы булһын!

**Йылан.** Яңы йыл ғаиләләр барлыҡҡа килһен!

**Айыухан.** Сәләмәтлек теләйем. Сирләләр үҙҙәренә дауа тапһын!

**Бүре.** Спортсылар яңы үрҙәр яулаһын!

**Сыскан.** Уҡыусыларға - файҙалы ғилем!

**Һарыҡ.** Йәш белгестәр яратҡан һөнәрҙәрен тапһын!

**Төлкө.** Сабыйҙарҙың шат көләүҙәре йышыраҡ яңғыраһын.

**Фил.** Матур сәфәрҙәр көтһөн һеҙҙе. Табыш менән әйләнеп ҡайтығыҙ!

**Ҡыш бабай.** Донъяла дуҫлыҡ, берҙәмлек ныҡыһын! Мөхәббәтле ғүмер кисерегеҙ. Барыбыҙға ла һау-сәләмәт йәшәргә, ҡыберәк изге эштәр ҡылырға насип булһын!

**Бергә.** Яңы йыл менән!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Ысынлап та, ни өсөн ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барырға ярамай икән һуң? Ағасты ғәрәпсәгә тәржемә иткәндә "шәжәрә" тигән мәғәнә килеп сыға. Р. Кузеев шәжәрәне нәҫел йылъяҙмаһы, нәҫел ағасы тип атау яғында. Халҡыбыҙға Ислам дине килгәнгә тиклем шәжәрә нәсәбнамә, нәсәпхат, силсилә, тайра атамалары менән йөрөгән. Хәҙерге ваҡытта Өфө, Ырымбур, Ҡаҙан, Санкт-Петрбург, Мәскәү архивтарында 150-ләп башҡорт шәжәрәләре урын алған. Күп кенә шәжәрәләр ғаилә архивтарында һаҡлана. Бына, шулай итеп, "Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барма" тигән әйтемгә һалынған фекер ебе осонан эләктереп тә алдыҡ, буғай. Булмаһа, тағатайыҡ йомғаҡты, сисер өсөн йомаҡты.**

# БОТАҠҺЫҘ АҒАСТЫҢ...

## күләгәһенә барма



Ырыуһыҙ милләт булалыр ҙа, әммә ырыуһыҙ халыҡ буламы икән? Ә халыҡ инде үҙ дәүләтен төҙөгәндән һуң милләткә әүерелә. Донъяла халыҡ булараҡ формалашыу осорон үтмәгән милләттәр ҙә бар. Ундай милләттәр һәм уларҙың дәүләтселеге барлыҡҡа килеүенә донъяның осраҡлы сәйәси ситуациялары, революциялар булышлыҡ итә. Нимә генә булмаһын, халыҡ ырыуҙарҙан хасил, юҡҡа ғынамы ни, халыҡ һүҙенең урыҫса әйтелешендәге "народ" һүҙенең тамырын "род" йәғни "ырыу" тәшкил итмәй. "Народ"тың туранан-тура тәржемәһе "ырыуға" килеп сыға, тимәк халыҡ - ул ырыуға йәғни ырыуҙарға бүленгән берләшмә.

Хәҙерге заман дәүләттәренең айырым өлөштәрен штаттар, ландтар, землялар, округтар, губерналар, өлкәләр, төбәктәр һ.б. алып торһа, боронғо дала цивилизацияһы осоро дәүләттәренең бындай берәмектәрен урҙалар, жуздар, ҡәбиләләр, ырыуҙар тәшкил иткән. Һуғыштар башланһа, һәр жуз, ҡәбилә йәки ырыу, дәүләт башында торған хандың бойороғона ярашлы, яугирҙарын ҡоралландырып, барлыҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп, атҡа атландырған. Һәр кемдең мөлкәткә хоҡуғы, социаль хәле ырыуы эсендә хәл ителгән һәм былар барыһы ла шәжәрәгә теркәлеп барған. Хәҙерге заман терминдары менән аңлатҡанда, шәжәрә ул дәүер кешеләренең үҙенең һәм нәҫел-нәсәбенең исемдәре теркәлгән паспорты ла, ундағы пропискаһы ла, йорт кенәгәһе лә, дәүләт органдары менән төрлө мөнәсәбәттәр буйынса килешеүҙәре лә, пенсияға страховка танытмаһы ла, алған белеме һәм биләгән вазифаһы хаҡында шәһәҙәтнамәһе лә, страховка полисы ла, йәғни беҙ бөгөн дәүләт менән ниндәй ҡағыҙҙар һәм документтар аша мөнәсәбәт ҡорабыҙ - барыһы ла булған. Айырма шунда ғына: беҙ бөгөн ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө документ, танытма, ҡағыҙ йөкмәп йөрөһәк, теге замандағы боларҙың барыһын да бер генә ҡағыҙ - шәжәрә алыштырған. Хәҙерге заман эшлеклеләре әле генә шундай, йәғни барыһын да алыштырған ниндәйҙер социаль картаны уйлап сығарҙы, тик һаман да был ғәмәлгә ашырылмай.

Юғарыла килтерелгән дәлилдәрҙән ниндәй һығымталар яһап була һуң? Һығымталарҙың бер нисәһе түбәндәгесә:

- Хәҙерге ваҡытта ниндәй милләт вәкилдәренең шәжәрәһе бар, булмаһа, уны тергеҙеүгә ынтылышы бар, был үҙ халҡыңдың боронғо дәүләтселеген, ата-олатайҙарыңдың шул дәүләтселектә биләгән урынын, башҡарған эштәрен өйрәнеүгә тиң ғәмәл;
- "Ете быуыныңды таныҡ-бел" тигән талапты үтәргә тырышып ҡына шәжәрәңде өйрәнеү урта белемдән башланғыс кластары кимәле генә, әле инсанға был тәңгәлдә урта мәктәпте тамамларға, артабан юғары белем алыу талап ителәләр;
- "Бер ағас урман түгел" тигәндән сығып ҡарағанда, үҙ шәжәрәһен өйрәнеүсе ата-олатайҙарының тарихи урманын йәғни сығышын билдәләүҙә лә күҙ уңында тотһон. Ағастың тамыры, олоно, ботаҡтары һәм япраҡтарынан тыш, уның үҫкән тупрағы ла, һуғарған дымы ла, һулаған һауаһы ла, иркәләнгән ҡояш нуры ла, урманы ла бар. Һуңғы ваҡытта күршеләребеҙҙең дә үҙ шәжәрәһен төҙөүгә, тамырҙарын юллауға ынтылышы барлыҡҡа килеүе һөйөндөрҙө. Тик уларҙың ҡайһылары, бер-ике быуынын белгәндән һуң, тамырҙары башҡортҡа һуҙылғанын күреп, туҡталып ҡалды, тиҙәр.

Ни өсөн ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барырға ярамағанлығын аңланығыҙмы инде, туғандар? Бәҡтиһән, был әйтемдең аҫтына бик тәрән мәғәнә һалынған икән. Ырыу-заты, нәҫеле, шәжәрәһе булмаған менән мөнәсәбәт ҡорма, күләгәһенә барма, йәғни уның ышығы һинә ышыҡ түгел, уға таянма, тигәнде аңлата икән был әйтем. Ботаҡһыҙ ағас, ырыуһыҙ, шәжәрәһеҙ кеше ул далалағы ҡамғаҡ кеүек, тамырһыҙ, хәҙер дауыл ҡупһа, хәҙер ауырға торған ҡыу ағас. Ырыуһыҙ һәм шәжәрәһеҙ кеше менән ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ мөнәсәбәте лә ҡорма, уларға ҡыҙ бирмә, ҡыҙ алма, тигән мәғәнә лә һалынған был әйтемгә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҺАБАҠТАР

# ТЕЛӘГӘНЕН...

## кеше үҙе яулай



Бер кеше урам буйлап үтеп барғанда тоҡсай тотоп торған ҡартты һәм уны уратып алған балаларҙы күреп ҡала. Ҡарт балаларҙың һәр теләген үтәй икән. "Мин уйынсыҡ машина теләйем", ти бер малай. Һәм ҡарт тоҡсайҙан уйынсыҡ машина алып бирә. "Ә миңә яңы ҡурсаҡ кәрәк", ти ҡыҙыҡай. Ҡарттың тоҡсайынан өр-яңы ҡурсаҡ килеп сыға. "Был бит тылсымсы", тип уйлай күҙәтеп торған кеше. Һәм балаларҙың таралышҡанын көтөп ала ла, ҡартты тотоп алып, тоҡсайына тығып, өйөнә алып ҡайта. Тоҡсайҙы сисеп: "Хәҙер һин минең теләктәремде генә үтәйәсәкһең", - ти кеше.

- Ярар, - ти ҡарт, - әйт теләгеңде.

- Донъялағы иң шәп машинала йөрөгөм килә.

Ҡарт тоҡсайынан машинаның асҡысын сығарып бирә. Ә кеше ҡартты өйөнә биклэп сығып китә. Бер аҙнанан ҡайтып, ҡартты әрләргә тотона:

- Һин мине алдағанһың. Минеке кеүек ҙур һәм матур машиналар урам тулы. Миңә бер кем дә иғтибар итмәй.

- Ни кәрәк һуң һиңә?

- Миңә күп аҡса кәрәк.

Ҡарт тоҡсайынан чек сығарып бирә. Теге кеше өйөн биклэп, йәнә сығып китә. Аҙна үткәс, тағы асыуланып ҡайта:

- Һин мине алдағанһың. Мин баҙарҙа йөрөп, йәнем теләгәнде һатып алдым. Ләкин башҡа кешеләр ҙә шул уҡ әйберҙәрҙе һатып алды.

- Ни теләйһең?

- Донъялағы иң матур ҡатын-ҡыҙ минеке булһын, - ти кеше һәм ҡартты биклэп, тағы ла сығып китә. Бер аҙнанан һуң ҡайтып, йәнә ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә:

- Иң гүзәл ҡатын-ҡыҙ өсөн барыһын да эшләргә әҙер булдым. Ә уға аҡсам ғына кәрәк булған икән.

- Һин өс теләк әйттең, ләкин теләгәндәреңде һораманың, - ти ҡарт.

- Нисек инде улай?

- Һин машина һораның, ә ысынында хөрмәт теләнең, аҡса һораның, тик ұҙаллылыҡ теләнең, ҡатын-ҡыҙ һораның, ләкин мөхәббәт теләнең. Хөрмәт, үҙаллылыҡ һәм мөхәббәтте мин һиңә бирә алмайым. Уларҙы кешеләр үҙҙәре яулап ала. Хәҙер мин китәм.

- Мин һине ебәрмәйем, - ти кеше.

- Мин теләгән ваҡытта китә ала инем.

- Ни өсөн китмәй, теләктәремде үтәнең һуң?

- Бер ай ял итеп алырға теләгәйнем, ялым бөттө, - ти ҙә ҡарт, тоҡсайына инеп юҡ була.

*✓ Беҙ башҡорт бал ҡорто тип атап йөрөткән ҡорт урта рус бал ҡорто тоҡомоноң бер төрө ул. Әммә бында бына нимәгә иғтибар итергә кәрәк: ул Көньяҡ Уралдың ҡырыҫыраҡ климатына яраҡлашҡан бал ҡорто төрө.*

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘСТӘР...

## һаулыҡ торошоң тураһында һөйләй

■ Голландия ғалимдары асыҡлауынса, стресс гормоны - кортизол кимәлен сәстәргә анализ үткәреп белергә мөмкин. Белгестәр әйтеүенсә, сәстәр кеше сәләмәтлеге тураһында мөһим мәғлүмәт сығанағы булып тора. Организмдағы кортизол кимәлен ябай ҡан анализынан түгел, сәстәрҙән анализ алып тикшереү яҡшыраҡ. Стресс гормоны юғары булыуы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеү хәфеүен дә бермә-бер арттыра. Тикшеренеүселәр өс ай дауамында өс йөҙҙән ашыу оло йәштәге кешенең сәс өлгөләрен сағыштырып, кортизол үҙгәреүе картинаһын төҙөгән. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, инсульт, диабет, периферик артериялар ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙа стресс гормоны күрһәткесе күпкә юғарыраҡ булған. Ғалимдар белдереүенсә, сәстәрҙә мәғлүмәт оҙағыраҡ һаҡлана, шуға ла был исул ауырыу үсеше хәүефен аныҡ билдәләргә мөмкинлек бирә.

■ Кивиҙа лимонға һәм әфлисунға ҡарағанда С витамины күберәк. Әммә бының менән уның файҙалы яҡтары бөтмәй әле. Табиптар раҫлауынса, был тропик емеше яҡшы кәйеф булдырыусы ла. Киви ашау организмда бәхет гормоны - эндорфин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул кешенең эмоциональ хәлен яҡшырта, ҡан баҫымын яйға һала, шулай уҡ бөйөрҙәр һәм аш һеҙдереү эшмәкәрлегенә яҡшы йоғонто яһай.Ә был факторҙар барыһы ла ғүмерҙе оҙайта. Мәҫәлән, диетологтар иҫәпләп сығарыуынса, 1 килограмм киви ғүмерҙе яҡынса 1 айға оҙайта. Барыһы ла был емештә файҙалы матдәләрҙең (органик кислоталар, магний, фосфор, калий, тимер һ.б.) максималь күләмдә булыуында. Бынан тыш, киви емешен косметик сара итеп ҡулланырға була, сөнки ул тирене таҙарта, коллаген бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ә ул үҙ сиратында һырҙар барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай.

■ Төҫкә матур ир-егеттәргә һалҡын тейеп бармай, әммә был яңылыҡ сибәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылмай, тип раҫлай ғалимдар. Daily Mail яҙыуынса, тышҡы күркәмлек менән көслө иммун системаһы араһында бәйләнеш бар. Күптән түгел үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙең йөҙ матурлығы иммун системаһының ныҡлығы тураһында һөйләй, имеш. Ғалимдар 52 йәш ҡатын-ҡыҙға гепатиттан прививка яһай һәм барлыҡҡа килгән антиесемдәр һанын үлсәй. Улар шулай уҡ кортизол күләмен дә аныҡлай. Һуңынан Турку университеты ғалимы Маркус Рантала етәкселегендәге тикшеренеүселәр был ҡатын-ҡыҙҙарҙың фотоһын студенттарға күрһәтеп, уларҙың матурлығын баһаларға ҡуша. "Ир-егеттәр һөҙөмтәләренән айырмалы рәүештә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың иммун реакцияһы, йәғни антиесемдәр эшләп сығарыу һәләтлеге йөҙ сибәрлеге менән бәйле түгел", - ти Рантала. Ә кортизол кимәле шуны күрһәткән, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә стресс хәләндә күпкә йәмһеҙерәк күренә икән, тиелә мәҡәләлә.

ТУРА БӘЙЛӘНЕШ АУАЗЫ

# БАШҠОРТ БАЛ ҠОРТО...



## яҡлауға мохтаж

**Башҡортостан Республикаһы Башлығының быйылғы тура бәйләнеш ваҡытында башҡорт бал ҡортона хәүеф янауы хаҡында Бөрйән районы ҡортсоһонан һорау булғайны. Радий Фәрит улы ошолай тип яуап бирҙе: "Был ысынлап та етди мәсьәлә. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән, башлыса, көньяҡ зонаһынан ҡорт күстәрен килтереп һатыу килем алыуҙың киң таралған ысулына әйләнде. Һуңынан сит яҡтарҙан килтерелгән күстәр йыйған балды башҡорт балы тип һаталар. Бик йыш ҡына антибиотиктар ҡулланалар, был продукцияның сифатына кире йоғонто яһай һәм беҙҙең репутацияға тап төшөрә. Республикабыҙҙың ветеринар хеҙмәттәре ошо мәсьәләне хәл итергә тейеш. Рейдтар үткәрәбеҙ, махсус айлыҡтар уҙғарыла. Контролде көсәйтәсәкбеҙ, башҡорт балының уникаллеген һаҡлау фарыз".**

Бер Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов башҡа төбәктәрҙән бал ҡорто күстәрен индереү буйынса ҡәтғи контроль булдырылыуы хаҡында белдерҙе. 2024 йылдың йәйендә Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республика биләмәләренә легаль булмаған ҡорттарҙы индереүҙе туктатыу маҡсатында "Бал ҡорто" тип аталған операция уҙғарылды. Был бал ҡорттары ауырыуҙарына дусар булған ҡорттарҙы республикаға индермәү йәһәтенән дә отошло алым. Министр күҙәтеүсе органдарҙың ошо эште дауам итәсәге хаҡында ла белдереү яһаны.

Бал ҡорто, ғөмүмән, бик боронғо бөжәктәр иҫәбенә инә. Ер шарында бынан 20 мең йыл әүәл һуңғы бөйөк боҙлоҡ осоро булып уҙа. Климат йомшарғас, һауа йылына, боҙҙар иреп бөтә, үҫемлектәр өсөн үтә уңайлы шарттар барлыҡҡа килә: йылы һәм дымлы урындарҙа улар бик тиҙ үҫә, сәскә ата, тиҙ үрсей. Тап ошо дәүерҙәрҙән бирле Көньяҡ Уралда, башҡа бөжәктәр менән бер рәттән, бал ҡорто ла үрсей башлағандыр, тип фараз итергә була. Беҙ башҡорт бал ҡорто тип атап йөрөткән ҡорт урта рус бал ҡорто тоҡомоноң бер төрө ул. Әммә бында бына нимәгә иғтибар итергә кәрәк: ул Көньяҡ Уралдың ҡырыҫыраҡ климатына яраҡлашҡан бал ҡорто төрө, ғилми телдә, районлашҡан, тип тә әйтәләр. Беҙҙә ҡыш бик һалҡын була, яҙ көндәрендә лә һауа торошо үҙгәреп тора, беҙҙең климатты географтар ҡырҡа континенталь тип нарыҡлай. Ә беҙ, Башҡортостан патриоттары, башҡорт бал ҡорто тигән атамаға ризабыҙ һәм уны яҡларға һәм һаҡларға әҙербеҙ. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа Башҡортостанға ситтән бал ҡорто күстәре күпләп индерелә башланы - был бизнес. Килем алырға теләүселәрҙе башҡорт бал ҡортоноң саф, боҙолмаған килеш ҡалыуы һис борсомай.

Бынан бер нисә йыл элегерәк биология фәндәре докторы, профессор Ә.М. Ишемғолов, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Р.Н. Ҡәйепҡолов башҡорт бал ҡорто һәм башҡа төр бал ҡорттары менән сағыштырмаса тикшеренеүҙәр уҙғарып, уның үҙенсәлектәрен асыҡлай алды. Беҙҙең "Башҡорт балы" тигән брендыбыҙ бар, беҙ уны ла һаҡларға тейешбеҙ.

**Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, Башҡортостанда йүкә ағастары күп таралған.** Көньяҡ Уралдың көнбайыш һырты урмандарында, күл, йылға буйҙарында, дымлы, һаҙлыҡлы урындарҙа йүкә ағасы һәйбәт үҫә. Шуға күрә лә йүкә балын беҙ Башҡортостандың визит карточкаһына тиңләй алабыҙ. Бына Башҡортостандың көнбайыш райондарында йүкә бик аҙ, унда төрлө сәскәләрҙән йыйылған бал өҫтөнлөк итә. Шул уҡ Ҡыйғы районында, Урал һырттарындағы урмандарҙа йүкә күп үҫә. Ә Уралдың көнсығышында йүкә артыҡ үрсей алмай, унда күпкә һалҡыныраҡ та. Беҙҙең йүкә балы артабан да башҡорт бал ҡорттарының халыҡ теләп-хуплап алған продукцияһы булып ҡалһын, тибеҙ.

Тарихи Башҡортостан территорияһының, шул уҡ Пермь крайының бал ҡорттары тик бер сәскәнән йыйылған, ғилми телдә монофлер тип аталған бал йыйырға биологик яҡтан яраҡлашҡан. Бына һеҙ баҙарға барһағыҙ, умартаҫылар һеҙгә тәкдим итә: быныһы йүкә балы, быныһы - сағандыҡы, өсөнсөһө - ҡарабойҙай балы, ә тегеһе - ялан сәскәләренеке. Беҙҙең ҡорттар ошо рәүешле ҡышҡа әҙерләнә: бер-ике аҙна эсендә мөмкин тиклем күберәк нектар йыйып өлгөрөргә кәрәк. Бал ҡорттары кәрәҙҙәренә тултырғансы бал йыйып, уны йоҡа ғына балауыҙ менән ҡаплап та ҡуя. Ҡортсолар умартаның бер ни тиклем балын алһалар ҙа, улар эштәренән туктамай: икенсе өлгөрөп еткән үлән сәскәләренән бал йыйыуын дауам итә. Ә бына ситтән килтерелгән карпат, кавказ, урта азия бал ҡорттары хәйләкәрерәк: улар йыйған бал полифлер була, ниндәй сәскә осрай, шуның нектарын алалар. Әлбиттә, улар балды күберәк йыя ала, әммә сифаты яғынан ул бал беҙҙекенән ҡайтышыраҡ.

**Башҡорт бал ҡорто тураһында аныҡлабыраҡ әйтеп үтәйек.** Морфологияһы буйынса беҙҙең бал ҡорттары урта рус ҡорттарынан бер ни тиклем эрерәк. Башҡорт эшсе бал ҡортоноң ауырлығы - 100 - 110 мг, а кавказ йә иһә карника бал ҡорто - максимум 80 - 85 мг. Быны нисек аңлатып була: беҙҙең ҡортобоҙ ике осоуҙа алып ҡайтҡан нектарҙы йыйыр өсөн башҡа ҡорттар өс тапҡыр барып ҡайтырға тейеш була. Беҙҙең инә ҡорттоң ҡукәй һала алыу мөмкинлеге көньяҡтыҡыларға ҡарағанда күпкә артығыраҡ, шуға күрә йәй башынан ҡорттар беҙҙә йышыраҡ айыра башлай, был үрсемдең көслөрәк булыуын аңлата. Беҙҙә ҡыш бик оҙон, әммә, башлыса, етерлек кимәлдә сифатлы бал булғанда, улар ошо ауыр айҙарҙы имен-аман сыға. Беҙҙең солоҡ ҡорттары телән ниндәй һыуыҡ ҡыштарҙа ла үлеп бөтмәй, улар әлеге һалҡын климатҡа ныҡ яраҡлашҡан. Ә улар һәм беҙҙең умарталарҙа ҡышлаған ҡорттар араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ.

Бал ҡорттары балауыҙ кәрәҙҙәргә йыйған балдарын ҡаплап, мисәтләп ҡуя. Дымлы мисәт һәм аҡ, ҡоро мисәт була. Шул балауыҙ ҡаплама аҫтында бер ни тиклем һауа ҡала. Был һауа ҡатламы балды үҙенсә һаҡлап йылытып тора, ул ҡыштарын бал ҡорттарына туҡланыу мөмкинлеген бирә.

Бал етештереү өсөн ҡорттарҙың организмында махсус ферменттар бүленеп сыға, шул ферменттар составы буйынса ла беҙҙең балыбыҙ отошлораҡ. Көньяҡ ҡорттары йәшәгән ерҙәрҙә ҡыш оҙон түгел - иң күбендә ай ярым. Бер-ике аҙна дауамында һауа температураһы -15 градусҡа етеүе мөмкин. Беҙҙең ҡорттар оҙон ҡышты үткәреп ебәрергә тейеш, уларҙың балауыҙ пәрҙәһе менән ҡапланған балдары ла, организмдарындағы ферменттар ҙа яҙ еткәнсе йәшәү мөмкинлеген бирә.

Беҙҙең ҡорттарыбыҙҙың балауыҙ сығарыу мөмкинлектәре лә юғарыраҡ: ҡыҫҡа ғына йәй дауамында бал һалырлыҡ кәрәҙҙәрҙе етештереп өлгөрөү бик мөһим. Ҡорттарыбыҙ яһаған прополис та сифаты яғынан юғарыраҡ: ул көслө тәбиғи антибиотик, ҡорт күсен ауырыуҙарҙан һаҡлау йәһәтенән бер нимә менән дә алыштырғыһыҙ.

Беҙҙең ҡорттарыбыҙҙың бер йомшаҡ яғы ла бар; төньяҡ ҡорттары үҙ ояларын тейешле кимәлдә яҡлай һәм һаҡлай алмай. Ә бына көньяҡ ҡорттары урлашырға бик оҫта: сит умартаға баҫып кереп, булған балдарын һурып алып сығып та китә улар. Эволюция беҙҙең ҡорттарҙа уның ояһын туҙҙырған саҡта ғына агрессивлыҡ тыуҙырыуға һәләтле иткән. Әммә беҙҙең ҡорттарыбыҙҙың ағыуы көслөрәк һәм сифатлыраҡ.

**Хәҙер төп темаға күсәйек: ни өсөн беҙ сит төбәктәрҙән ҡорт күстәрен килтереүгә ҡаршыбыҙ?** Әгәр ҙә беҙ бер тыйыуһыҙ ситтән икенсе бер бал ҡорттарын күпләп индерәбеҙ икән - был беҙҙең башҡорт ҡорттары өсөн бик хәүефле. Теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, бал ҡорттары - тәбиғи бөжәктәр, улар араһында парлашыу, енси күҙәнәктәр менән алмашыу осраҡтары буласаҡ. Был үҙе уҡ башҡорт бал ҡортоноң генетикаһына үҙгәрештәр индереүе мөмкин - уны һәр бер осраҡта ла файҙалы тип ҡарап булмаясаҡ. Әйтергә кәрәк, Башҡортостан ҡортсоларының 80 проценты - ауылдарҙа көн иткән ябай кешеләр. Улар ауылдарында сит тоҡом ҡорттары булыуына артыҡ иғтибар итеп тә бармай. Әлбиттә, һуңғы осорҙа һаһалма аталандырыу технологиялары ла барлыҡҡа килде. Тик былар менән генә ҡотолоп булмай. Иғтибар итмәнһегеҙҙер, ҙур форумдарҙан аҙаҡ инфекция киң таралыусан. Был ҡорттарға ла бермә-бер ҡағыла. Сит-ят ерҙәрҙән килтерелгән ҡорттар менән уларға хас вирустар, инфекциялар ҙа Башҡортостанда тарала башлаясаҡ. Ул яҡтарҙағы бал ҡорттарының иммун системаһы уларға йәшәү һәм үрсеү мөмкинлеген бирһә, беҙҙең ҡорттар быға әҙер түгел.

Бына бер миҫал килтерәйек. Бал ҡорттарының нозематоз тигән сире бар. Беҙҙеңсә әйткәндә, улар эстәре китеп ауырый. Әммә Азия тарафтарында таралған нозематоз церано инфекцияһынан беҙҙең ҡорттар күпләп ҡырыла. Көҙ еткәнсе умарта бушап ҡала - ҡорттар үлеп бөтә.

Ҡорттарҙың шундай мейе сирҙәре була - умартаһынан осоп китә лә, кире ҡайта алмай - тәбиғи ориентирын юғалта.

70-се йылдарҙа беҙҙең ҡортсолоҡ өсөн хәүефле сирҙәрҙән варроатоз талпаны килеп сыҡҡайны, әммә уға ҡаршы уңышлы саралар ҡулланылды. Хәҙер ситуация ҡатмарланды: көньяҡ төбәктәрҙән бал ҡорттары күстәре менән тропилелапсоз, акарапидоз талпаны килтереп, Башҡортостанда таралыу хәүефе бар. Беҙ ошо талпанға ҡаршы көрәшкә әҙер түгелбеҙ. Әлбиттә, уға ҡаршы көрәшеү методикаһы бар, әммә беҙҙең кадрҙар уға әҙер түгел. Әгәр ҙә мәгәр ошо бал ҡорто сире Башҡортостанда тарала икән, юғалтыуҙар күп буласаҡ. Быны Ауыл хужалығы министрлығында ла, Россельхознадзор хеҙмәткәрҙәре лә яҡшы аңлайҙыр.

✓ *Йүкә ағастарын күпләп киҫеп алыу осраҡтары була. Ҡай сағында быны бер кем дә белмәй-күрмәй ҡала. Йүкә ағастары кәмеү менән бал ҡорттарына ла көн бөтәсәк.*



Беҙҙә ситтән индерелгән бал ҡорттары күстәрен тикшереү буйынса махсус айлыҡ иғлан ителде, барса хеҙмәттәргә тейешле бурыстар йөкмәтелде: Ауыл хужалығы министрлығы, Россельхознадзор, Ветеринария идаралығы, Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре йәлеп ителде. Шулай итеп, сит төбәктәрҙән легаль булмаған ҡорт күстәрен индереү юлдарын ябыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды. Бына нимә мөһим: һатып алыусылар булмаһа, ситтән бал ҡорто күстәрен индереүселәр ҙә бермә-бер аҙайыр ине. Беҙҙә ошо юҫыҡта өгөт-нәсихәт эше бик аҡһай.

Был мәсьәләне әлегә махсус закон индереп тә хәл итерлек түгел. Беҙҙә бит һатыу-алыу ирекле. Әммә граждандар араһында, бигерәк тә ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр араһында, пропаганда алып барыу зарур.

Ә шулай ҙа сит-ят төбәктәрҙән ирекле рәүештә бал ҡорто күстәрен индереү бынан ике йыл элек кенә сикләнә башланы. Әйтергә кәрәк, контрафакт бал ҡорттары күстәрен Башҡортостанға килтереп һатыу күпкә кәмене.

**Беҙҙә, Башҡортостандың үҙендә, үҙебеҙҙең ҡорт күстәрен әҙерләүҙе һәм һатыуҙы бермә-бер арттырыу фарыз.** Яңыраҡ башҡорт бал күстәрен үрсетеүсе заводчиктар ассоциацияһы барлыҡҡа килде. Инә ҡорттарҙы үрсетеүселәр, бал ҡорто күсе пакеттарын әҙерләүселәр өсөн махсус уҡыуҙар ойошторолдо. Был эш менән беҙҙең Башҡорт дәүләт аграр университеты шөғөлләнә, сит төбәктәрҙән ошондай эштәр менән шөғөлләнгән ҡортсолар саҡырыла. Беҙҙең үҙебеҙҙең умарталыҡтарҙың күләмен арттырһаҡ, ҡорт күстәрен һатыу мөмкинлеге лә арта барасаҡ.

Беҙҙең Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү институты алдына башҡорт бал ҡортоноң ни хәлдә булыуын асыҡлау маҡсатында Хөкүмәт махсус бурыс ҡуйҙы. Беҙ әлегә республиканың 32 районындағы бал ҡорттарына тикшереү уҙғарҙыҡ. Ҡортсолар араһында махсус һорауҙар менән анкеталар уҙғарабыҙ, унан һуң интернет селтәрҙәрендә 70-тән артыҡ ҡортсо-умартасылар чаттары эшләй. Унда бик эшлекле һәм гәмле аралашыу бара, һәр кем үҙ һорауҙарына яуап таба, файҙалы кәңәштәр ала. Бында ҡортсолоҡ менән бәйле барса өлкәләр ҙә сағылыш тапҡан: кемдер балауыҙ етештереү, кемдер умарталар, рамдар эшләү менән шөғөлләнә: улар чаттар аша үҙ клиентарын таба ала. Ошо чаттар үҙенә күрә беҙҙең өсөн дә информация сығанағы булып тора: хәҙер беҙ ҡайһы районда ниндәй проблемалар булыуын белеп торабыҙ. Ойошмабыҙҙың үҙенең мәғлүмәт үҙәге бар, унда бөтөн республиканан килгән мәғлүмәттәр туплана.

Әйтергә кәрәк, республикала ҡортсоларҙың 32 йәмәғәт ойошмаһы бар, Рәсәй кимәлендә сыҡҡан 2 ойошма эшләй: "Сәнәғәт ҡортсолого союзы", уның рәйесе, Көйөргәҙе умартасыһы Ҡудашев. Сәнәғәт кимәлендә сыҡҡан умартасыларҙың умарталыҡтарында 200-ҙән артыҡ умарта тотола. Унан башҡа "Башҡортостан умартасылары" ойошмаһы бар, ул Рәсәй умартасылары ойошмаһының төбәк бүлеге. Уларҙың төп маҡсаттары - Башҡортостан умартасыларының мәнфәғәттәрен яҡлау, башҡорт бал ҡортон һаҡлау һәм үрсетеү.

Был өлкәлә барса эштәрҙе контролдә тотоу Россельхознадзор дәүләт ойошмаһына тапшырылған, әммә йәмәғәт контроле лә бик һөҙөмтәле. Бына шул уҡ контрафакт бал ҡорто күстәрен һатыуҙы иң элгәре йәмәғәтселек белә, ул быны тыйыу өсөн Россельхознадзорға мөрәжәғәт итә. Йә иһә, йүкә ағастарын күпләп киҫеп алыу осраҡтары була. Ҡай сағында быны бер кем дә белмәй-күрмәй ҡала. Йәмәғәт инспекторҙарын булдырыу фарыз, беҙ әлегә был проблеманы хәл итмәгәнбеҙ әле. Ошондай йәмәғәт инспекторҙары Алыҫ Көнсығышта бар. Бер ваҡыт унда кедр ағастарын күпләп киҫә башлағандар ине. Хәҙер йәмәғәт контроле был законһыҙ эште туҡтатты. Улар бына нимә эшләй алды: кедр ағасына Хайуандарҙы һәм үҫемлектәрҙе һаҡлау буйынса бөтөн донъя ойошмаһы аша үтә ҡиммәтле үҫемлек статусын бирҙереүгә өлгәштеләр. Тик йүкә ағасының төрҙәре алтау, дүртеһе - иң күбе, уға ошо статусты бирҙереү мөмкинлеге юҡ. Шуға күрә инспекторҙар ярҙамында йүкә ағастарын законһыҙ рәүештә киҫеүҙе теркәп, Россельхознадзор һәм дәүләтебеҙҙең башҡа контроль органдары аша ғына туҡтатып буласаҡ.

**Йүкә ағастары кәмеү менән бал ҡорттарына ла көн бөтәсәк. Әйтергә кәрәк, йүкә ағастары буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә беренсе урында тора.** Беҙҙәге һымаҡ йүкә урмандары Европала ла юҡ. Бына беҙҙә "Кроношпан" предприятиеһы бар. Беҙҙең уға дәғүәләребеҙ күп. Уны ағас материалдары менән тәьмин итеүселәр урманға инә лә, ағастарҙы тотошлай ҡыра башлай. Ә бит "Кроношпан" ағас ҡалдыҡтарын ғына эшкәртергә тейеш!

Беҙ ошо турала экологик форумда ла сығыш яһағайныҡ. Ҡартыраҡ йүкәләрҙең ҡыуыштары була: ошо тәбиғи өйҙәрендә бик күп бөжәктәр, йәнлектәр ҡышлай. Ул сәскә атҡан саҡта бик күп бөжәктәр уның нектары менән туҡлана. Ә йәш йүкә ағасы иң кәмендә 20 йылдан һуң ғына нектар бирә башлай. Ҡарт йүкәләр киҫелеп бөтһә, йүкә балы ла булмаясаҡ. Ә бына 80 - 100 йәшлек йүкә ағастары максималь кимәлдә нектар бирә. Бер заман ҡарт йүкә ағастарын киҫеп ташлап, урынына йәш йүкәләр ултыртыу хаҡында һүҙ булғайны. Улай булһа, беҙ йүкә балынан ваз кисергә мәжбүр булыр инек, иң кәмендә 20 йылға. Бер кәңәшмәлә 95 мең гектар урманды (әлбиттә, йүкәләре менән) киҫергә рөхсәт һоранылар. Урынына 35 мең йүкә ағасы ултыртырға вәғәҙә итәләр. Ә Ишембай районында йәшәгән умартасы-аҡһаҡал (ул заманында Ишембай нефть ятҡылығын асыусыларҙың береһе) бына ни тип әйтте: йүкә урманын тергеҙер өсөн 1 гектар ергә 10 мең йүкә ағасы үҫентеһен ултыртырға кәрәк! Йүкә - дымлы урындарҙы ярата, һәр бер ерҙә ерегеп китмәй.

Сикләүҙәргә ҡарамаҫтан, Башҡортостан биләмәләренә контрафакт бал ҡорто күстәрен индереү осраҡтары байтаҡ. Шуға күрә "Башҡортостан умартасылары" йәмәғәт ойошмаһы йыш ҡына рейдтар ойоштора. Ошоноң менән шөғөлләнгән кешеләр бар - уларҙың уйында нисек итеп булһа ла килем алыу. Уларҙы был эштәренән тыйыу ауыр - тейешле закондар юҡ. Беҙ ошо хаҡта Рәсәйҙең Дәүләт Думаһына, Йәмәғәт Палатаһына, РФ-ның Ауыл хужалығы министрлығына, Россельхознадзорға ла мөрәжәғәт иттек. Махсус закон ҡабул итеү әлегә мөмкин түгел - мәҫәлән, ҡортсолоҡ буйынса закон акттарын әҙерләү "Равноправие" тип аталған юридик ойошмаға бирелгән. Ә уның составында ҡортсолоҡтоң ни икәнен белгән бер кеше лә юҡ.

Әйтергә кәрәк, Рәсәй ДәүләтДумаһы 2020 йылда ҡабул иткән "Кортсолоҡ тураһында"ғы законды әҙерләүҙә профессионал умартасылар ҡатнашманы. Ә Башҡортостан парламенты 1997 йылда ҡабул иткән "Ҡортсолоҡ тураһында"ғы закон күпкә яҡшыраҡ ине, әммә уны әлеге Рәсәй законына яраҡлаштырҙылар.

Элегерәк райондарҙа ҡортсолоҡ буйынса зоотехник булды, инспекторҙар ҙа бар ине. Улар аша Ауыл хужалығы министрлығында бөтөн республика буйынса мәғлүмәт туплана торғайны. Федераль закон сыҡҡас, улары ла бөтөрөлдө.

**Бына тағы ла бер проблема - ауыл хужалығында күпләп ҡулланылған пестицидтар арҡаһында бал ҡорттары ҙур зыян күрә.** Ҡайһы бер райондарҙа бал ҡорттарының күпләп ҡырылып бөтөүе хаҡында хәбәрҙарбыҙ. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Рәсәйҙә пестицидтар етештереү әйләнеше генә лә 120 млрд һумға етә, сит илдәргә сығарған саҡта таможня килеме лә шул суммаға тиң. Тимәк, пестицидтар етештереүҙе үҫтереүҙе талап иткән лоббистар ҙа етерлек. Беҙ барыһына ла илтифатһыҙыраҡ ҡарарға өйрәндек: ауыл хужалығында пестицидтар ни тиклем күберәк ҡулланыла, халыҡ һаулығына ла шул тиклем күберәк зыян килә. Пестицидтарҙың химик ағыулы матдә икәнен онотоп барабыҙ, ә улар микродоза кимәлендә генә лә кеше организмына эләгә икән, шул сәбәпле кешенең төрлө яман сирҙәргә дусар булыуы мөмкин

Һүҙебеҙҙе йомғаҡлап, бал ҡорттары килтергән тағы ла бер файҙа хаҡында әйтеп үтмәйенсә булмай. Бал ҡорттары - меңәрләгән сәскәгә ҡунып, үҫемлектәрҙе аталандыра. Улар арҡаһында емеш-еләк тә, шул уҡ беҙ яратып ашаған ҡарабойҙай ҙа һәйбәт уңыш бирә. Ҡытайҙың ике провинцияһында заманында пестицидтарҙы шул тиклем күп ҡулланғандар ки, унда үҫемлектәр донъяһы әлегә тиклем бик ярлы, бөжәктәр ҙә юҡҡа иҫәп. Был хәлдә кешелеккә үҙенә күрә бер киҫәтеү итеп ҡабул итергә кәрәктер: бал ҡорттары беҙҙең йәшәйешебеҙҙең алыштырғыһыҙ бер өлөшө, улар һаҡлауға һәм яҡлауға мохтаж.

**Ревнер БАЙТУЛЛИН,**
**Башҡортостан Республикаһы Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү институты директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы эшмәкәре.**

**Руслан ҠӘЙЕПҠОЛОВ,**
**институттың ғилми тикшеренеүҙәр һәм инспекция контроле начальнигы, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме икенсе хат: "Уҡырға яратығыҙ!"

"Ҡыҙыҡһынмаған", әммә ҡыҙыҡлы китап - бына нимә әҙәбиәткә һөйөү уята һәм кешенең донъяға ҡарашын киңәйтә.

Мәктәптә яуап бирер өсөн һәм теге йәки был әйберҙе бөтәһе лә уҡыған, ул модалы булған өсөн генә уҡымағыҙ. Ҡыҙыҡһынып һәм ашыҡмай ғына уҡый белегеҙ.

Ни өсөн бөгөн телевизор китаптарҙы өлөшләтә ҡысырыҡлай? Сөнки телевизор ниндәйҙер тапшырыуҙы ашыҡмай ғына ултырып ҡарарға, бер нәмә лә ҡамасауламаһын өсөн уңайлы итеп урынлашырға мөмкинлек бирә, ул донъя мәшәҡәттәрен онотторa, ул һеҙгә нимә һәм нисек ҡарарға икәнде көсләп таға. Ләкин күңелегеҙгә яҡын китапты һайлап, барлыҡ мәшәҡәттәрегеҙҙе ситкә ҡуйып тороп, уңайлы ғына ултырып алып уҡый башлаһағыҙ, донъяла уҡымайса йәшәй алмаҫлыҡ китаптарҙың күплеген, уларҙың телетапшырыуҙарҙан да мөһимерәк һәм мауыҡтырғысыраҡ булыуын аңларһығыҙ. Мин телевизор ҡарауҙан баш тартығыҙ, тимәйем. Әммә һайлап ҡына ҡарағыҙ, тием. Ваҡытығыҙҙы сарыф итерлек әйберҙәргә генә сарыфлағыҙ. Шулай ҙа күберәк һәм һайлап уҡығыҙ. Китап классик әҫәр булып танылыу өсөн кешелек мәҙәниәте тарихында ниндәй роль алыуына ярашлы һайлағыҙ. Был унда ниндәйҙер әһәмиәтле нәмә барлығын аңлата. Бәлки, был кешелек мәҙәниәте өсөн әһәмиәтле булған нәмә һеҙҙең өсөн дә мөһим булып сығыр?

Классик әҫәр - ваҡыт һынауҙарын үткән нәмә. Уның менән ваҡытығыҙҙы әрәм итмәйәсәкһегеҙ. Әммә классика бөгөнгө заман һорауҙарының барыһына ла яуап бирепбөтә алмай. Шуға заман әҙәбиәтен дә уҡыу кәрәк. Тик һәр модала булған китапты уҡырға ынтылмағыҙ. Сәбәпләнеүсән булмағыҙ. Сәбәпләнеүҙәр кешене иң ҙур һәм иң ҡиммәтле байлығын - ваҡытты аңһыҙ исрафларға мәжбүр итә.

## Егерме өсөнсө хат: "Шәхси китапханалар тураһында"

Бөгөн бик күп өйҙәрҙә шәхси китапханалар бар. Хатта шундай күренеш бар - китап бумы. Китап бумы - был бит яҡшы! Китап шау-шыуы бит ул, башҡа берәй төрлө түгел. Кешеләрҙең китаптар менән ҡыҙыҡһыныуы, сират тороп һатып алыуы ла бик яҡшы, был йәмғиәтебеҙҙең мәҙәни күтәрелеш кисереүе хаҡында һөйләй. Әммә миңә, китаптар кәрәк кешеләр ҡулына эләкмәй, тип әйтеүҙәре ихтимал. Ҡайсаҡ улар биҙәк булып хеҙмәт итә; матур тышлыҡтары өсөн һатып алына һ.б. Ләкин был да насар түгел. Китап һәр ваҡыт үҙенә кәрәкле кешене табасаҡ. Мәҫәлән, уны берәү ашханаһын биҙәргә тип һатып ала. Ә уның улдары, башҡа кесе туғандары булыуы ла ихтимал бит. Күптәр әҙәбиәт менән нисек ҡыҙыҡһына башлауы хәтерегеҙҙәлер - атаһы, йәки туғандарында күргән китаптар аша. Шуға күрә китап үҙ уҡыусыһын ҡасан да табасаҡ. Ул һатылыуы ла ихтимал, был да насар түгел. Сөнки күпмелер китап тупланған һәм ул тағы ла үҙ уҡыусыһын табасаҡ.

Шәхси китапханаға килгәндә иһә, был мәсьәләгә бик етди ҡарарға кәрәк. Уны хужаһының визит карточкаһы тип иҫәпләгәндәрҙе өсөн генә түгел, ә ҡайсаҡ дәрәжәне сағылдырғаны өсөн дә. Әгәр кеше китаптарҙы абруй өсөн генә һатып ала икән, юҡҡа хитлана. Тәүге әңгәмәлә үк үҙен "һатасаҡ". Үҙе китап уҡымаһа, йәки уҡыһа ла, төшөнөп етмәгәне күренәсәк.

Шәхси китапхананы артыҡ ҙур итеү кәрәкмәй һәм уны бер тапҡыр ғына уҡырлыҡ китаптар менән тултырмаҫҡа кәрәк. Ундай китаптарҙы китапхананан алып уҡырға кәрәк. Өйҙә ҡабаттан тотоп уҡый торған китаптар, классиктарҙың әҫәрҙәре (яратып уҡылған), бигерәк тә белешмәләр, һүҙлектәр, библиография күп булырға тейеш. Улар ҡайсаҡ тотош китапхананы алыштыра ала. Мотлаҡ үҙ библиографияғыҙҙы төҙөгеҙ, был ҡағыҙҙарға теге йәки был китапта һеҙҙең өсөн мөһим һәм кәрәкле урындарҙы билдәләп ҡуйығыҙ.

Ҡабатлайым. Әгәр китап бер тапҡыр уҡып сығыу өсөн икән, уны һатып алып тороу кәрәкмәй. Һәм шәхси китапхана туплау оҫталығы нәҡ шундай китаптарҙы һатып алыуҙан тыйыла белеүҙә тора.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 16 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 11.40, 12.15, 1.30, 2.20, 3.05, 3.10, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.05 Д/ф "Щедрин-сюита". Ко дню рождения Родиона Щедрина". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Тайны следствия-24". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.00 Профессия - режиссёр. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.15 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Прекрасная возлюблённая". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 17 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.30, 3.05, 3.20, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Тайны следствия-24". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Ради добра. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Квадратные метры. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Шамассовские чтения. [12+]**
**20.45 Х/ф "Оберег". [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Мама приехала". [12+]**

## 18 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Герой гагаринской эпохи". К 90-летию Бориса Волынова". [12+]
1.10, 2.00, 2.45, 3.05, 3.35, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Тайны следствия-24". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.50 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**2.30 Спектакль "Эх, друг Байтимер!" [12+]**
**4.15 Мегасело. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 19 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55, 11.20, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 13.30, 17.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Итоги года с Владимиром Путиным. Прямая трансляция.
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Комбинация". [16+]
0.10 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2025. Мужчины. Короткая программа. Пары. Короткая программа. [0+]
1.40, 2.30, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 13.00, 19.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 17.00 "60 минут". [12+]
14.00 Итоги года с Владимиром Путиным. Прямая трансляция.
20.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
20.30, 21.30 Т/с "Тайны следствия-24". [16+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.10 "Наши". [12+]
2.00, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
4.21 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Современник. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома.**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**4.00 Башҡорттар. [6+]**
**4.30 Тормош. [12+]**

## 20 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.50 "АнтиФейк". [16+]
15.20 "Давай поженимся!" [16+]
16.15 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2025. Пары. Произвольная программа. Танцы. Прямая трансляция.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Спецпроект. "30 лет вместе". "Угадай мелодию". [12+]
1.30 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2025. Женщины. Короткая программа. [0+]
2.30, 3.15, 4.05, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Райский". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Х/ф "Последний богатырь: Корень Зла". [6+]
23.40 Х/ф "Решение о ликвидации". [12+]
1.25 Х/ф "Мирный атом". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 4.30 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Дела и люди. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Квадратные метры. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 21 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Сапсан". Наперегонки со временем". [0+]
11.10 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё". [12+]
13.05 "ПроУют". [0+]
14.00 Д/ф "Герой гагаринской эпохи". К 90-летию Бориса Волынова". [12+]
15.00 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2025. Женщины. Произвольная программа. Мужчины. Произвольная программа. Прямая трансляция.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
20.05 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Х/ф Премьера. "Пассажиры ночи". [18+]
1.20, 2.05, 2.50, 3.40, 4.25, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Новая жизнь". [16+]
0.40 Х/ф "Зимний вальс". [12+]
4.05 Х/ф "Кузнец моего счастья". [12+]
5.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Атайсал. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "У слияния трёх рек". [12+]**
**19.00 Ради добра. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**2.45 Спектакль "Вот так случилось…." [12+]**
**5.00 Мама. [12+]**
**5.15 Әлләсе… [12+]**

## 22 ДЕКАБРҘ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.40, 2.25, 3.10, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Вызов". Национальная премия в области будущих технологий. Церемония награждения. [12+]
14.00 Х/ф "Жестокий романс". [12+]
16.50 Д/ф Премьера. "Во имя раскола. Украина". Специальное расследование". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
0.10 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2025. Показательные выступления. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 Истории Большой Страны. [12+]
13.30 Т/с "Фантазер". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Юморина-2024. [16+]
17.00, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Счастлива та разведка". [12+]
2.35 Х/ф "Цена измены". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15, 4.30 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 Тирмәкәй. [6+]**
**10.15 Гора новостей. [6+]**
**10.30 Зерно. [6+]**
**11.00 Территория женского счастья. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.30 Уфимская волна-2024. [12+]**
**18.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.00 Мегасело. [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Лидеры профессионального образования. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Йырҙарҙа йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**0.15 Спектакль "Дачники". [12+]**
**2.30 Ете егет. [12+]**
**3.30 Колесо времени. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**

# НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (15) дүшәмбе | 7:46 | 9:36 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:37 |
| 17 (16) шишәмбе | 7:47 | 9:37 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:38 |
| 18 (17) шаршамбы | 7:48 | 9:38 | 13:30 | 15:02 | 16:47 | 18:38 |
| 19 (18) кесе йома | 7:49 | 9:39 | 13:30 | 15:03 | 16:47 | 18:38 |
| 20 (19) йома | 7:50 | 9:39 | 13:30 | 15:03 | 16:47 | 18:38 |
| 21 (20) шәмбе | 7:50 | 9:40 | 13:30 | 15:04 | 16:48 | 18:38 |
| 22 (21) йәкшәмбе | 7:51 | 9:40 | 13:30 | 15:04 | 16:48 | 18:39 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Баланы тәрбиәләүҙең төүмаҡсаты шул: артабан ул ата-әсәһеҙ һәм уҡытыусыһыҙ ҙа үҫешә, камиллаша алһын.*

*(Элберт Хаббард).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 14 ДЕКАБРЬ - БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ

**Башҡорт теле көнө 2019 йылдан алып Башҡортостандың Башлығы Радий Хәбиров указына ярашлы, рәсми рәүештә бөйөк башҡорт мәғрифәтсе шағиры Мифтахетдин Аҡмуллланың тыуған көнөндә билдәләнә.**

Был көндә республикабыҙҙа һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә матур байрам саралары, флешмобтар, рәсми осрашыуҙар, лекциялар үткәрелә. Тыуған телебеҙҙе үҫтереүгә һәм һаҡлауға өлөш индергән замандаштарыбыҙ тәбрикләнә.

Тыуған телебеҙҙә һөйләшәйек, уны үҫтерәйек, тигән теләгебеҙҙе еткерәбеҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға был уңайҙан. Ә беҙ ошо юҫыҡта үҙ тәңгәлебеҙҙәге эште дауам итербеҙ.




## Башҡорт теле

*Беҙҙе батыр иткән тел ул;*
*Беҙҙе матур иткән тел ул;*
*Беҙҙе сабыр иткән тел ул;*
*Беҙҙе ғорур иткән тел ул-*
*Һай, афарин башҡорт теле!*
*Беҙҙе төйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе көйөк иткән тел ул;*
*Беҙҙе бөйөк иткән тел ул-*
*Һай, афарин башҡорт теле!*
*Мең - мең йылдар үткән тел ул;*
*Мең киҫелеп, үҫкән тел ул;*
*Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;*
*Дуҫлыҡ аманат иткән тел ул -*
*Һай, афарин башҡорт теле!*
*Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;*
*Изгелекте һаҡлар тел ул;*
*Моңло, йырлы сәсән тел ул;*
*Утты - һыуҙы кискән тел ул-*
*Һай, афарин башҡорт теле!*
*Йөрәгемде һулҡылдатҡан*
*Ҡан тамыры менән бер ул!..*
*Мәғдән йәшеренгән ер ул,*
*Әле асылмаған сер ул*
*Һай, афарин башҡорт теле!*

**Хәким ҒИЛӘЖЕВ.**




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бәрәс. Мәжитов. Сарыҡ. Ҡалъя. Аҡмырҙа. Шәл. Аяҡ. Шыршы. Сыпҡай. Ғәм. Көл. Һалма. Оҫта. Ауыл. Башаҡ. Оноре. Атҡа. Вәғәз. Наҙан. Йосопов. Ҡом. Ҡаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ишемғолов. Сөләймәнов. Аҙнабаев. Мышы. Әбей. Ҡаҡса. Бөжәк. Көлтә. Закон. Айытҡолова. Токио. Совет. Ваҡ. Ҡаш. Һабан. Ыҙма. Шлем. Яҫы. Арҡан.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 декабрь "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+

**20 декабрь Премьера! "Йырланмаған йырым һин..."** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 16+

**21-22 декабрь Премьера! "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылев), әкиәт. 10.30, 13.00, 15.30 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16-17 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 6+

**17, 18, 19 декабрь Премьера! "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 6+

**18-19 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+

**20 декабрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 10.00, 12.00, 14.00 6+

**20 декабрь "Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+

**21 декабрь "Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 9.00, 11.00, 13.00, 15.00 0+

**"Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 6+

**22 декабрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 10.00, 12.00, 14.00 0+

**"Рассказы Альфии"** (М. Кәрим), бер бәхетле бала саҡ. 11.00, 13.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17, 18, 19 декабрь "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 18.00 0+

**20 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова). 15.00 0+

**20-21 декабрь "Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 10.00, 12.00, 18.00 0+

**22 декабрь "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 15.00, 18.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21-22 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"**, ғаилә өсөн байрам. 11.00, 13.00 0+

**21 декабрь "Быяла арфа һәм орган"**, концерт. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20-29 декабрь Премьера! "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский), музыкаль әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**19, 20, 21, 22 декабрь "Бул-буль-буль"ный Новый год или волшебный посох Деда Мороза"** әкиәте менән Ҡыҙыл, Ҡашҡар, Михайловка ауылдарында гастролдәрҙә. 0+

**21 декабрь "Переполох в мире елочных игрушек"**, әкиәт. 11.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**22 декабрь "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов инсц.), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**20 декабрь "Урал батыр уҡыуҙары"**, ғилми-ғәмәли ҡор. 10.00 12+

Ротанг үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**21 декабрь "Ғаилә өсөн экскурсия"**. 15.00 0+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ТӘРБИӘЛӘЙ

**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында "Вариҫ" спектакленең премьераһы булып үтте.**

Театр өсөн премьералар ғәҙәти күренеш, коллектив йылына кәмендә алты тапҡыр яңырыу халәтен кисерә: режиссерҙар күнегелгән тормоштарын ситкә ҡуйып, ауырлы ҡатындарҙай, тулғаҡ тотоп, яңы сәхнә әҫәре тыуҙыра. Актерҙарҙың һәр береһе, шулай уҡ онотолоп, яңы образ өҫтөндә эшләй. Рәссам сәхнәлә буласаҡ ваҡиғаларҙың урынын хәстәрләй, шулай уҡ үҙ күҙаллауын декорациялар ярҙамында тыуҙыра. Ҡалған хеҙмәткәрҙәр ҙә ситтән күҙәтеүсе түгел, һәр береһенең үҙ вазифаһы, тәғәйенләнеше - бына шундай күмәк көс менән тыуа спектаклдәр. Тыуа, йәшәй, тамашасыларҙың зауыҡын ҡәнәғәтләндерә һәм хәтерҙә ҡала, киләһе быуын театр хеҙмәткәрҙәренең һөнәренә үҙенсәлекле нигеҙ ҡора.

Владимир Жеребцовтың пьесаһы буйынса ҡуйылған был спектакль дә ана шул нигеҙҙең бер ташы, тос таянысы. Әҫәрҙе театрҙың баш режиссеры Денис Нурғәлин сәхнәләштерҙе. Драманың темаһы, йөкмәткеһе бөгөнгө көн өсөн бик тә урынлы. Төп герой, замана егете, көн үткәрер өсөн генә музейға инә һәм пьесаның сюжеты буйынса Бөйөк Ватан һуғышының 1942 йылына юлыға, икенсе донъяға - беҙ китаптарҙан уҡып белгән, киноларҙан ҡараған үткән заманға күсә. Тарихты өҫтән-мөҫтән һиҙемләгән, һуғыш тураһында күберәге Голливуд фильмдарынан ҡарап белгән бөгөнгө көн егете өсөн был ҙур һынау, күңел көсөргәнешлеге, аҡылға һыймаҫ үҙгәреш. Спектаклде ҡарағандар ҙа ана шул көсөргәнеште һиҙҙе, актерҙар менән бер тире эсендә йәшәп алды.

Илһөйәрлек, берҙәмлек өсөн бөгөн ошондай сәхнә әҫәрҙәре бик тә кәрәк - сокор-саҡырлы юлдан барған тарих арбаһынан төшөп ҡалмаҫ өсөн. Әйткәндәй, замана йәштәре, бөгөнгө үҫмерҙәр ҙә спектаклде аңлап, йылы ҡабул итте, шәхес булып формалаша башлаған күңелдәренә орлоҡ һалды.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**театрҙың әҙәби-драма бүлеге етәксеһе.**

# КҮҢЕЛГӘ ТАНҺЫҠ ТАМАША

**Өфөлә "Юлдаш" радиоһы коллективы ойошторған "ЮлдашХит" музыка фестиваленең 2024 йылғы лауреаттары билдәләнде.**

Йыр-моң байрамы барған "Башҡортостан" дәүләт концерт залы сәхнәһендә йыл буйына әүҙем ижад иткән йырсы-шағир (Гөлназ Ҡотоева), композитор (Рәмил Туйсин), аранжировкалаусы (Раил Өмөтбаев), музыканттар (скрипкасы Илшат Мөслимов, гармунсы игеҙәктәр - Айҙар һәм Алмаз Юнисовтар, ҡурайсы Морат Йәнозаҡов) бүләкләнде. "Легенда" номинацияһында республикабыҙҙа мәҙәниәт һәм йыр жанрын үҫтереүгә тос өлөш индергән сәнғәт эшмәкәрҙәре билдәләнә. Тамашасылар Башҡортостандың халыҡ артистары Тәнзилә Үҙәнбаеваны һәм Асия Смакованы аяғүрә баҫып алҡышланы.

"Асыш" номинацияһында йәш таланттар сығыш яһай. Рөстәм Йәнгиров моңло тауышы һәм күптәр яратып тыңлаған "Кейек ҡаҙҙар" йырын оҫта башҡарыуы менән хәтерҙә ҡалды. "Моңло ғаилә" номинацияһы еңеүселәре - Тайыповтар башҡарыуында үҙенсәлекле йыр ҙа көслө алҡыштарға күмелде. Кескәй Баязит менән Саранның сығышы ихлас һоҡланыу уятты. "Рух көсө" номинацияһында билдәләнгән Азат Исҡужиндың йырын тамашасылар күҙ йәштәре аша тыңланы.

"Юлдаш" өсөнсө йыл инде "Радионың халыҡ артисы" миҙалын тапшыра. Радио тыңлаусылар тауыш биреү юлы менән лайыҡлыларҙы һайлай, һөҙөмтәләр концерт ваҡытында иғлан ителә. 2024 йылда исем һәм миҙал өсөн Ян Лираның һәм Ирек Ноғомановтың ижадын һөйөүселәр көрәште. Улар өсөн 5 меңгә яҡын кеше тауыш бирҙе, 53 проценты Ирек Ноғомановты һайланы.

Ойоштороусылар әйтеүенсә, ай һайын үткәрелгән хит-парад еңеүселәрен дә радио тыңлаусылар һайлай. Быйыл "Йыл меценаты" тигән яңы номинация булдырылды. Ул йыл дауамында милли мәҙәниәт үҫешенә, радиостанцияларға төрлө акциялар һәм саралар уҙғарырға ярҙам иткән яҡташтарыбыҙға тапшырыла. Рафаэль Мифтахов диплом, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалы менән бүләкләнде.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# ШУНДАЙ ҠЫҘҘАР БАР!




**Билдәле режиссер Фәрзәнә Утарбаеваның "Нигеҙ" фильмы "Синема парк" кинотеатрында күрһәтелде.**

Зал тулы халыҡ ғаилә ҡиммәттәре, ауылдарҙың бөтөүе, изге атай нигеҙе хаҡында бәйән итенсе яңы башҡорт фильмын оҙаҡ алҡышланы, артабан да ҙур еңеүҙәр һәм асыштар теләне. Тәрән мәғәнәле, йөрәктәргә үтеп инерлек кинонан һуң тамашасылар күҙ йәштәре аша режиссерға, төп ролдә уйнаусы А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Риф Сәйфуллинға рәхмәтен белдерҙе.

Өфөнән башҡорт теле уҡытыусыһы Әлфиә Ғәзизова фильмды республика мәктәптәрендә күрһәтергә тәҡдим итте. "Был фильмда бик ҙур тәрбиәүи мәғәнә ята. Уны мәктәптәрҙә күрһәтергә мөмкин. Беренсенән, ул ололарҙы хөрмәт итергә өйрәтә, тыуған илгә һәм кесе Ватаныңа һөйөү уята. Режиссер йәш булһа ла, бик көнүҙәк мәсьәләләрҙе аса алған. Афарин, Фәрзәнә", - тип рәхмәтен белдерҙе педагог.

Режиссерҙың эшен коллегалары ла юғары баһаланы. Танылған режиссер, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Йосопов: "Сабып барған атты ла туҡтатыр, тигәндәй, шундай шәп кино төшөрөрҙәй ҡыҙҙар бар беҙҙә! Был фильмдың темаһы бик ауыр. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уны моңһоу, тыныс картина булыр, тип көткәйнем. Әммә, киреһенсә, бөркөттәр күккә оса, тормош йәнләнә, ҡыҫҡаһы, фильмды ҡарағандан һуң, тик яңғай тойғолар ҡалды. Фәрзәнә бик ҡыйыу ижадсы, артабан да уңыштар юлдаш булһын", - тине Булат Йосопов.

Әйткәндәй, Фәрзәнә Утарбаеваның "Нигеҙ" фильмы быйыл ноябрь-декабрь айҙарында Германияның Галле, Төркмәнстандың Ашхабад, Мәскәү, Мурманск һәм Ҡыҙыл ҡалаларында күрһәтелде һәм күрһәтеләсәк. Был башҡорт кинокартинаһының Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара фестивалдәрҙә еңеү яулауы хаҡында яҙғайныҡ инде.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ТОРОН-ТОРОНСА

**"Йәшәгән ти беҙҙең заманда әбей менән бабай. Уларҙың торон-торонсаһы бик тә күп булған икән". Әкиәт шулай башлана. "Ә торон-торонсалары нимә һуң ул?"- тип һорай икән өләсәһенән әкиәтте тыңлаған ейән-ейәнсәрҙәре. "Нимә түгел, ә һеҙ булаһығыҙ ҙа инде", - тип шуҡ ҡына яуаплай имеш өләсәләре.**

**Торон.** Әүәл был һүҙ "ейән" мәғәнәһендә йөрөгән. Миҫалға: *Торондарҙы олаталары атта йөрөргә өйрәткән. Бер тороно бәйгелә лә ҡатнашҡан.*

**Торон ҡыҙ.** "Торон ҡыҙ" тигәндә, ейәнсәрҙәр күҙ алдына баҫһын. *Балаҫ һуҡҡан өләсәләрен торон ҡыҙҙар уратып алған.*

**Торпаҡ.** "Торпаҡ" - йәш үгеҙ быҙаүҙы белдергән һүҙ. *Һөҙгәк торпаҡ. Торпаҡтарҙы көтөүгә өйрәтеү.*

**Тотмар.** Йөкмәтке, эстәлек тураһында һүҙ барғанда, "тотмар" һүҙе тура килер. *Китаптың тотмары бик тә маҡтырлыҡ. Тәрән тотмарлы телмәр.*

**Төрпө.** Тырнаҡ йышҡыһын ҡулланыусылар уның икенсе атамаһы төрпө икәнен белеп ҡуйһын. *Маникюр ҡулланмаһы төрпөһөҙ булмай. Төрпө шымарып бөткән.*

**Шулай итеп, олатай-өләсәйҙәр торон-торонсаға, телмәребеҙ тотмарға байыһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАБЫҘМАҺАҢ... шырпы ла янмай

Икенең бере үлһә, бере ҡалыр, яңғыҙҙың үҙе үлһә, кеме ҡалыр?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эске донъяһы менән йәшәмәгән кеше әйләнә-тирәләгеләрҙең ҡоло ул.

**(Анри Амиель).**

Тоғролоҡ тигән ҡиммәт онотолһа, аҡыл һәм ҡыйыулыҡ - буш ҡыңғырау ғына ул.

**(Вишакхадатта).**

Донъянан төңөлгән йәш пессимист йөҙөнән дә күңелһеҙерәк күренеш булыуы мөмкин түгел!

**(Марк Твен).**

Мин тыңлайым - мин онотам, мин күрәм - мин иҫтә ҡалдырам, мин эшләйем - мин аңлайым.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Баланы тәрбиәләүҙең төүмаҡсаты шул: артабан ул ата-әсәһеҙ һәм уҡытыусыһыҙ ҙа үҫешә, камиллаша алһын.

**(Элберт Хаббард).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер яңғыҙ һәм бәхетһеҙ кеше йәшәгән. Бер ваҡыт ул:**

**- Эй, Хоҙайым, мине яңғыҙлыҡтан һәм бәхетһеҙлектән ҡотҡарыр матур ҡатын ебәр, зинһар!- тип Аллаға ялбара икән.**

**Алла йылмайған һәм:**

**- Ә ни өсөн тәре һорамайһың? - тигән.**

**- Тәре? Нимә, мин йәшәүҙән туйған, тип уйлайһығыҙмы әллә? - тип асыуланған кеше. - Мин бары тик матур ҡатын ғына теләйем...**

**Хоҙай үтәгән уның үтенесен: ул матур ҡатынлы булған. Ләкин оҙаҡламай был кеше үҙен элеккегә ҡарағанда ла бәхетһеҙерәк тойған: ҡатыны уның муйынына асылған ауыр ташҡа һәм йөрәк яраһына әйләнгән. Кеше тағы Хоҙайға ялбара икән:**

**- Йә, Хоҙай, ҡылыс бир миңә...- тигән ул, ҡатынын үлтерергә, шулай итеп үҙенең элекке бәхетле мәлдәрен ҡайтарырға йыйыныуы тураһында белдереп. Алла тағы йылмайған һәм:**

**- Ә ниңә тәре һорамайһың? Бәлки һиңә ысынлап та тәре ебәрергәләр? - тип ныҡышҡан.**

**- Йә, Хоҙай, һин был ҡатындың теләһә ниндәй тәренән дә насарыраҡ икәнен белмәйһеңме ни? Зинһар, миңә ҡылыс ебәр! - тигән кеше тағы ла нығыраҡ асыуланып.**

**Бына уның ҡулына ҡылыс тотторолған. Кеше ҡатынын үлтерергә маташҡанда ғына уны тотоп алалар һәм тәрегә ҡаҙаҡлау язаһына тарттыралар. Тәрегә ҡаҙаҡланғас, кеше ҡысҡырып көлөп ебәрә:**

**- Ғәфү ит мине, Аллам! Мин бит Һине ишетмәгәнмен, Һин бит минән башта уҡ "Тәре ебәрәйемме?" тип һораның. Башта уҡ Һине тыңлаған булһам, был кәрәкмәгән ығы-зығыларҙан ҡотолған булыр инем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24049

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 2199